ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

15-21 сентябрь (нарысай)

2018

№37 (819)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Иғтибар үҙәгендә - йәш быуын



4

Силәбенән яҡшы хәбәр



5

Журналистың ҡоралы - геройын, уҡыусыһын арбау ул



8-9

Янка Купаланы ла... башҡорт телендә яңғыраттым



12-13

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Гәзит-журналдарға яҙылыуҙың ҡыҙыу миҙгеле 1 сентябрҙән яңы хаҡтар менән старт алды. Шулай итеп, 2019 йылдың беренсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 609 һум 96 тингә, 50673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 641 һум 16 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары 550 һум 38 тингә яҙыла ала. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер, ғәҙәттәгесә, матур китапҡа өмөт итә ала. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Эскелек касафаты сигенәме бөгөн, айығамы халыҡ?

**Азамат КАШКАРОВ, Баймаҡ районының табип-нарколоғы:** Үкенескә, һорауығыҙға ыңғай яуап биреүе ҡыйын. Эскелек айырыуса хәүефле күренеш алды: суррогат, арзан техник спирт эсеп ҡырылалар. Магазин тулы завод етештереүендәге рөхсәт ителгән араҡы, ләкин эскән ҡатламдың уны алырға аҡсаһы юҡ. Ә хаҡтар, үҙегеҙгә мәғлүм, ай үҫәһен көн үҫә, тигәндәй... Илдәге эскелек тарихына күҙ һалһаҡ, кемдәр генә нисек тыйып ҡараманы был зәһәрҙе. Андроповтан башлап, Горбачев замандарын алайыҡ. Дөрөҫ, тыйыу, контроль һөҙөмтәһен бирмәй ҡалманы - халыҡ айыға төштө, ләкин даими эскән кеше барыбер юлын, әмәлен таба торҙо, шулай итеп, техник спиртҡа көндәре ҡалды. Рәсми рәүештә тыйылған булыуға ҡарамаҫтан, канистра менән ситтән күпләп килтереп һаталар. Арзанлығын арзан, тик ул нәмә иҫертмәй, ә уғата минңрәүләндерә генә. Элек совет араҡыһы эскән кешене дауаханаға килтерәләр, уға система эшләйһең дә, иртәгәһенә һин дә мин һикереп тора ла китә, хатта беҙгә ярҙам итеп, йыйыштырышып, ҡар көрәп эшләп йөрөрҙәр ине. Хәҙер организмдары ағыуланып, 4-5 көн буйы хәлһеҙ яталар. Әле генә бына 2 кешене дауаханаға һалдыҡ, яралыны яу ҡырынан алып сыҡҡандай, артмаҡлап, ҡултыҡлап, саҡ килтереп киттеләр. Аяҡтарында ла баҫып тора алмайҙар. Береһе ҡан ҡоҫоп, хәле ҡатмарлашҡас, хирургияға күсерергә мәжбүр булдыҡ. Аяҡҡа баҫтырып, өгөтләп сығарып ебәрәһең, ҡайтып китәләр ҙә юғалалар. Иҫән ҡалғандарын бер аҙҙан тағы килтереп һалалар. Төп бәлә: уларҙың наркологта иҫәптә торорға теләмәүҙәре. Ошоға бәйле бер тәҡдимем бар. Сараһыҙҙан, тип әйтәйемме... Эйе, алдан әйтәм, проблеманы аңламағандарға был тәҡдим сәйер генә түгел, көлкө лә тойолор, ләкин минең бер ҙә көлгө килмәй. Ағыулы техник спирт эсеп үлгәнсе, арзанлы араҡыны, шешә тышына ҡурҡыныс антиреклама биреп, наркологтарҙан килеп алыу тәртибе булдырылһа, уны эсеп үлмәйәсәктәр. Икенсенән, был үҙенә күрә иҫәптә тороу буласаҡ, сөнки эсергә алырға барыбер киләсәктәр. Уның ҡарауы, ике зыяндың яманырағынан - техник спирт кеүек үлемесленәнән ҡотолоу юлы булыр ине был. Минең фантазия тип уйлай күрмәһен гәзит уҡыусылар, ундай тәжрибә ҡайһы бер сит илдәрҙә бар һәм эшләй. Нарколог булараҡ, беҙ бит сит илдәр тәжрибәһен дә күҙәтеп барабыҙ.

**Йомадил ЙОМАҒУЖИН, Белорет районы:** Мине лә бик борсой эскелек мәсьәләһе. Илдәге бөтөн халыҡтар вәкилдәренә лә хас был бәлә, ләкин мин тәү сиратта милләттәштәрем өсөн әрнейем. Борон бит былдай хурлыҡ нәҫелебеҙҙә булмаған. Башҡорт ҡымыҙ, буҙа, үлән сәйҙәре эскән, шунлыҡтан һауһаҡ, сәләмәт, көслө, дәртле булған. Үҙем, Аллаһҡа шөкөр, иҫерткес хәрәм эсемлектәрҙе 17 йыл инде ауыҙыма ла алғаным юҡ. Ә районыбыҙға килгәндә, үкенескә, эскелек һаҙлығына батып барыусылар күбәйҙе, тип әйтер инем. Улар араһында йәше-ҡарты ла, ҡатын-ҡыҙҙар, хатта ғаиләләре менән эсеүселәр ҙә байтаҡ. Бигерәк тә йәштәрҙең юлдан яҙыуы ҡыҙғаныс. Эскелеккә ҡаршы көрәш юлдары тураһында һәр саҡ уйланам. Ә шулай ҙа көрәш ошо һаҙлыҡҡа батҡан кешенең һәр кемеһенең үҙенән башлана, минеңсә. Яман ғәҙәтен ташларға көсөнән килгәндәр бик һирәк, шуға күрә ундайҙар яҡындары, туғандары-дуҫтары ярҙамына ла бик мохтаж. Хәҙер бит дәүләт учреждениеларында бушлай дауаланырға ла була, тик бының өсөн әлеге лә баяғы кешенең үҙ теләге, аңлылығы кәрәк. Бушлай дауаланыу наркология диспансерында иҫәпкә тороу шарты менән, тейешле документтарға ҡул ҡуйғандан һуң ғына мөмкин, буғай. Шул уҡ дәүләт учреждениеларында аноним рәүештә дауаланған хәлдә иһә түләргә тура килә, тиҙәр. Эскән кешенең, ғәҙәттә, түләр мөмкинлеге булмай, әлбиттә, ләкин туғандары өсөн ул ҡәҙерле икән, түләргә лә риза булырҙар ине, моғайын, тип уйлайым. Яҡындарығыҙҙы бәлә менән яңғыҙын ҡалдырмағыҙ, ярҙам итегеҙ, туғандар!

**(Дауамы 2-се биттә).**

ШАҒИР ҺҮҘЕ




## БӘХЕТ ҠАЛАҺЫ

***Йәшлек ҡалаһы һин - Өфө,***
***Йәштәр килә төрлө яҡтан.***
***Тәүге хистәр менән янып,***
***Һөйөүҙәрен бында тапҡан.***

***Бәхет ҡалаһы һин - Өфө,***
***Бында күпме пар ҡауышҡан.***
***Өфө - һөйөү ҡалаһы, тип***
***Улар әйтә бар тауыштан.***

***Өфө - тарих ҡалаһы һин,***
***Тарих һөйләй һәр бер ташың.***
***Үткәндәрҙән киләсәккә***
***Күпер һала һәр бер таңың.***

***Өфө - дуҫлыҡ ҡалаһы һин,***
***Бында йәшәй күпме милләт.***
***Һин үҫәһең, ҙурайһың,***
***Йыллап түгел, айлап, көнләп.***

***Өфө - киләсәк ҡалаһы,***
***Күпме сабый урамдарҙа.***
***Улар менән дауам итә***
***Тарих тағы мең йылдарға.***

***Имәнҡала тиҙәр һине,***
***Иман ҡалаһы һин беҙгә.***
***Изге нурҙан балҡып таңдар***
***Имен тыуһын мәңге ерғә!***

12+

**✓ Ҡайһы бер төбәктәрҙә бер баш һыйыр ҙа көтмәгән ғаиләләр бар. Милләттәштәргә кәңәш итеп, малыбыҙҙан яҙмайыҡ, үҙ тамағыбыҙҙы үҙебеҙ туйҙырырлыҡ хәлдә булайыҡ, тип әйтергә теләйем.**



## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ШӨҒӨЛӨҢДӨ...
## ауылыңда тап!

***Филүс ХӘЛИУЛЛИН, Дәүләкән районынан шәхси эшҡыуар, йәмәғәт эшмәкәре:*** Борсоуға һалған проблемаларҙы һанай китһәң, байтаҡ инде ул. Телде юғалтыу, демография, халыҡтың социаль хәле лә хафаландыра. Проблемаларҙы һанау түгел, хәл итеү юлдарын эҙләргә кәрәк инде. Беҙ Дим буйында ултырған ауылдарҙа йәмәғәтселек һәм етәкселек менән бергә халыҡ мәнфәғәтендә эшләргә тырышабыҙ. Йыйындар, байрамдар, дини саралар үткәреп тә ҡарайбыҙ, һөйләшәбеҙ, аңлатабыҙ. Башҡорт халҡы йыйындарҙа кәңәш ҡороп, фекерләшеп, килешеп эшләгән өсөн милләт булараҡ һаҡланып ҡалған. Шуға ла шундай саралар үткәрмәй башлаһаң, тарҡауланып бөтөргә генә тора халыҡ. Бергә йыйылғанда кеше бер-береһен күреп, үрнәк алып, сәмләнеп тә китә. Был йәһәттән үҙемдең ауылдаштарым миҫалынан да сығып әйтәм: шул тиклем дәртләнеп, сәмләнеп үҙ эшен асып, матур итеп донъя көтәләр. Бөгөн беҙҙең ауылда күмәртәләп мал аҫрайҙар, һәр кемдең үҙ техникаһы бар, ҡош-ҡорт көтәләр, умарта тоталар. Һәр йортта 10-15 баш һыйыр, ауыл көтөүенә 1500 баш тирәһе һыйыр малы сыға, 500 баш тирәһе йылҡыһы бар ауылдаштарҙың. Ҡош-ҡортто ла йәйгелеккә бишәр йөҙләп алып көтәләр. Йәйгеһен иртә менән ауылдан теҙелешеп машиналар сығып китә, ауылдаштар яҡындағы ҡалаларға үҙҙәре етештергән продукцияны алып барып һата.

Мин дә егерме йылға яҡын инде йылҡысылыҡ менән шөғөлләнәм, йәйгеһен ҡымыҙ, ҡышҡыға ҡаҙылыҡ әҙерләйбеҙ. Күп йылдар эсендә беҙҙең продукцияның сифатлы булыуын белгән даими һатып алыусыларыбыҙ ҙа бар. Башҡортостандан ғына түгел, Рәсәйҙең төрлө тарафтарынан башҡорттоң шифалы ҡымыҙын килеп алып торалар. Ҡаҙылыҡ та яҡшы үтә, әле бына Мәскәүгә 100 килограмм әҙерләп ебәрергә торабыҙ. Әлбиттә, эште былай йәйелдереп ебәреү өсөн көн дә таңғы биштән, ҡараңғы төнгә тиклем алһыҙ-ялһыҙ тырышырға кәрәк. Ауылдаштарҙың барыһы ла ваҡытында эште бәләкәйҙән генә башланы, мин дә колхоз тарҡалып, иң шәп йылҡыларын ситкә һатып, йә һуғымға ебәрә башлағастар, йәлләп, бер нисә башын һатып алып ҡалғайным. Тора-бара үрсетеп, эшләп алып киттем. Ауыл ерендә эш юҡ, тигән фекер менән шуға бер ҙә килешмәйем. Аҡса табырға, ғаиләһен аҫырарға теләгән кеше бер яйын табып, үҙенә эшләй ул. Әлбиттә, эшҡыуарлыҡ еңел түгел, тәүге йылда уҡ килем алып булмай, түҙемлек талап ителә. Өс йыл эшләгәндән һуң ғына күпмелер килем алырға була, шул ауырлыҡты түҙеп үткәрергә кәрәк. Эшҡыуар бер тапҡыр эшен ойоштороп ебәреп кенә рәхәт кенә аҡса табып ята алмай, ауыл ерендә ҡул ҡаушырып торорға ваҡыт юҡ. Әммә Себер тарафтарына китеүселәргә лә бушты бушҡа ауҙарған өсөн аҡса түләмәйҙәр бит. Ауыл кешеһенә гел әйтәм: ситтән төрлө эш эҙләп йөрөгәнсе, үҙең ошо торған ереңдә шөғөлөңдө табырға тырыш. Ул саҡта кемдеңдер аҡса түләгәнен көтөп тә ултырмаҫһың, үҙ йүнеңде үҙең күреп йәшәрһең. Башҡорт халҡы борондан мал аҫраған, был шөғөлгә беҙгә яңынан өйрәнәһе түгел һәм ялҡауы килмәгән кешегә бик тә килемле эш. Шуны күптәр белмәйме, әллә хәҙер мал аҫрап йәшәргә теләмәйме кеше, ҡайһы бер төбәктәрҙә бер баш һыйыр ҙа көтмәгән ғаиләләр бар. Милләттәштәргә кәңәш итеп, малыбыҙҙан яҙмайыҡ, үҙ тамағыбыҙҙы үҙебеҙ туйҙырырлыҡ хәлдә булайыҡ, ауыр эштән ҡурҡып, еңел юлдар эҙләп йәшәмәйек, тип әйтергә теләйем.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Эскелек касафаты сигенәме бөгөн, айығамы халыҡ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Урал МӨХӘМӘТШИН, Мәләүез районы Иштуған мәҙәниәт йорто директоры:*** Бынан 20 йыллап элек эскелек тигән афәт беҙҙең ауылда ла ныҡлап тамыр йәйә башлағайны. Утыҙға ла етмәгән ир-егеттәрҙең байтағын ҡармап алғайны инде был бәлә. Был осор илдә власть та, йәмғиәт ҡорολошо ла алышынған саҡтағы ике арала көсәйеп китте. Бер яҡтан, сәбәптәре аңлашыла ла ине: күҙ терәп торған хужалыҡтарҙың тиҙ арала тарҡалыуы, эшһеҙлек, яҡлауһыҙ тороп ҡалыу тойғоһо ҡайһы берәүҙәрҙе ҡотолғоһоҙлоҡ упҡынына һөйрәне. Бынан нисек ҡотолорға? Шул йылдарҙа уҡ әле юҡҡа сыҡҡан идеологик ориентирҙарға алмашҡа ниндәйҙер йоғонтоло тәрбиә мәктәбе кәрәклеге билдәле ине инде. Беҙ уны дин нигеҙҙәрендә күрҙек һәм халыҡ менән эшебеҙҙә был йүнәлеште һайлап, яңылышманыҡ. Мәҙәниәт йорто янында һәр кемдең һәләттәре буйынса түңәрәк ойоштorғайныҡ. Тора-бара ул мәҙрәсәгә әйләнде. Дин нигеҙҙәре буйынса уҡыған бер инәй һабаҡ бирә башланы. Ауылыбыҙ өҫтөндә һәр көн иртән аҙан моңо яңғырар булды. Элекке эскеселәр яҡты донъяны ташлап китә торҙо. Шулай итеп, халыҡ үҙенән-үҙе сәләмәт тормошҡа ылыҡты ла китте. Дин буйынса ғына түгел, тормошобоҙҙағы башҡа рухи ҡиммәттәргә арнап, һәр төрлө мәҙәни саралар үткәреү ғәҙәткә инде. Яңыраҡ ҡына, 25 августа, Ғаилә йылына бағышлап, "Матур гаилә - ил күрке" тигән байрам үткәрҙек. "Йәгеҙ әле, егеттәр!", "Йәгеҙ әле, ҡыҙҙар!" конкурстары йыл һайын даими үткәрелеп килә. Һуңғы ваҡытта беҙҙең ауылда ла ағинәйҙәр хәрәкәте әүҙемләште. Уларһыҙ бер сара ла үтмәй. Эскелек осраҡтары бөтөнләй юҡҡа сыҡты тип әйтеп булмаһа ла, һирәгәйҙе. Киреһенсә, ауыл халҡы хәҙер бер-береһенән күрмәксе, сәмләнешеп, етеш, матур йәшәргә ынтыла. Үҙебеҙҙә эш урындары булмаһа ла бик аптырап тормай, ситкә барып эшләп, ғаиләһен аҫрарлыҡ аҡса эшләп ҡайта, хатта машина, башҡа төр ауыл хужалығы техникаһы һатып ала. Халыҡтың рухын күтәреп, дөйөм байрамдар һәм күмәк сараларға йәлеп итеп, динебеҙ өйрәткәнсә әхлаҡ нигеҙҙәрен тотоп йәшәгәндә, тормошобоҙҙа эскелеккә урын ҡалмаясаҡ, тигән фекерҙәмен үҙем.

***Сәлиха КӨМӨШБАЕВА, пенсиялағы уҡытыусы, ағинәй:*** Эскелек барыбер сигенәлер, тип уйлайым. Элек беҙ йәшерәк саҡта һәр уңай менән эске ойошторола ине. Хатта мәктәптәрҙә лә уҡытыусылар тыуған көн булһынмы, берәй байраммы, сәй табынына ялтыратып килтереп ултырта инеләр шешәбикәне. Хәҙер ундай күренештәр юҡ тиерлек. Беҙ, элек аҙ-маҙ булһа ла шул алкоголле эсемлекте ҡапҡылаған өлкән кешеләр, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, ир-егеттәр ҙә, хәҙер айыҡ табындарға өҫтөнлөк бирәбеҙ. Ә "Айыҡ туй"ҙар нисек үтә хәҙер! Элек бит туйҙарҙы эскеһеҙ үткәреүҙе күҙ алдына ла килтермәй торғайныҡ. Үҙем әллә күпме шундай туйҙа ҡатнашып, кинәнес алдым. Беҙ, ағинәйҙәрҙе, матур итеп туй йолалары башҡарыуға, киленде һыу юлы башлатыуға тип саҡырып ҡына торалар. Йәштәр үҙҙәре лә шул тиклем ҡәнәғәт.

Эскелектең зыяны тураһында мәғлүмәттәр ҙә етерлек бит хәҙер. "Айыҡ ауыл" конкурстары гөрләп үтте Башҡортостанда, уларҙа йөҙәрләгән ауыл ҡатнашты (йәл, ошо конкурс хәҙер үткәрелмәй ниңәлер). Шул саҡта бик күп китаптар таратылды. Әхмәр Үтәбайҙың "Мин эсеүемде ташланым" тигән яҙмалары ла шул осорҙа "Киске Өфө" биттәрендә донъя күрҙе, уны ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыныҡ. Шуға бәйле бер ваҡиға тураһында яҙайым әле. Ул саҡта мәктәптә уҡыта инем әле. Шул осорҙа өлкән класс малайҙары араһында һыра менән мауығыусылар күбәйеп киткәйне. Бер уҡыусының шул алама ғәҙәткә ныҡлап бирелә барыуын, дәрестәргә килеп, иғтибарын туплай алмай, ҡыҙарып, ауыр һулап, ни эшләргә белмәй ултырғанын шәйләп ҡалдым. Бахмурҙан йонсой бит был, тигән һығымтаға килдем. Тик нисек ярҙам итергә, нисек һөйләшергә белмәйем. Бер көндө тоттом да "Киске Өфө" гәзитенеңдәге шул мәкәләне алдына һалдым һәм был текстан ябай, ҡушма, тағы ниндәйҙер һөйләмдәр табып яҙырға ҡуштым. Үҙем башҡа балалар менән эшләйем, үҙем иплəп кенә теге малайҙы күҙәтәм. Иғтибар менән уҡый был малай тексты. Дәрес аҙағы яҡынлашыуға уға тағы өндәштем һәм яуабы әҙерме, түгелме икәнен һораштым. "Апай, мөмкинме, мин тәнәфес ваҡытында яуап бирәм", - тине малай. Ризалаштым. Тәнәфес ваҡытында был минең янына килде лә:"Апай, был ағай алкоголле эсемлек эскәндән һуң кешенең хәле шулай мөшкөлләнеүен ҡайҙан белде икән?" - тип һүҙ башланы. "Һуң, үҙ башынан кисергән инде, шунһыҙ былай һүрәтләй алмаҫ ине..." - тинем. "Дөп-дөрөҫ яҙған бит", - тине лә малай, гәзитте өйгә алып ҡайтып, мин биргән эште өйҙә башҡарырға рөхсәт һораны. Артабан инде мин уға "Киске Өфө"нөң һәр һанын биреп уҡыта башланым. Малайҙың йөҙө асылғандан-асыла барыуын тойҙом һуңынан. Тимәк, был яҙмалар уға тәьҫир итмәй ҡалмағандыр, тип уйлайым.

Әлбиттә, алкоголдең зыяны тураһындағы бик хәтәр мәғлүмәттәр ҙә, яҡындарының өгөт-нәсихәттәре лә, балаларының илашыуы ла ярҙам итмәгән кешеләр бар инде ул. Ләкин улар һирәгәйә, күбеһе был донъяны ташлап китә тора. Шундай кешеләр, шәхестәр харап булды бит эскелек арҡаһында. Үкенесле үлемдәр бик күп булды.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**




## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостанда 9 сентябрҙә Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға һәм урындағы үҙидараның вәкиллекле органдары депутаттарын һайлау уҙҙы. Тауыш бирергә килеүселәр һаны 49,19 процент тәшкил итте. Һайлау йомғаҡтары буйынса республикала "Берҙәм Рәсәй" - 79 мандат, "КПРФ" - 15, ЛДПР - 7, "Ғәҙел Рәсәй" - 5, "Рәсәй патриоттары" - 2 мандат, "Йәшелдәр" экологик партияһы 1 мандат алды. Төбәк парламентына Сәнәғәт округы буйынса үҙ-үҙен тәҡдим итеүсе Айрат Кәримов үтте.

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт наградаларын тапшырҙы. Иҡтисад, социаль өлкә, мәҙәниәт һәм спорттың төрлө тармаҡтарында эшләгән 45 хеҙмәткәрҙең һөнәри ҡаҙаныштары ордендар, почет грамоталары, маҡтаулы исемдәр һәм рәхмәт хаттары менән билдәләнде. Бүләкләнеүселәр араһында - Салауат Юлаев орденына лайыҡ булған яҙыусы Гөлнур Яҡупова ла бар.

✓ Өфөләге Конгресс-холда Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов йәштәр мәшғүллеге буйынса "Уңышлы һәм мәшғүл булыу - трендлы булыу" - "PROFуспех" I республика форумының пленар сессияһында сығыш яһаны. Төбәк етәксеһе, башҡарма власть органдары вәкилдәре, Башҡортостандың ҙур эш биреүселәре һөнәри йүнәлеш биреү, мәшғүллек, эшҡыуарлыҡ әүҙемлеге, төрлө тармаҡтарҙа йәш кадрҙарға ихтыяж мәсьәләләрен йәштәр менән асыҡ диалог форматында тикшерҙе.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов етәкселегендәге республика делегацияһы Владивостокта асылған көнсығыш иҡтисади форумында ҡатнашты. Быйыл форумда алты меңдән ашыу кеше ҡатнашырға теләк белдергән, улар - 60-тан ашыу ил вәкилдәре. Сит ил ҡунаҡтары иҫәбендә - Ҡытай Халыҡ Республикаһы рәйесе Си Цзиньпин, Япония Премьер-министры Синдзо Абэ, Монголия Президенты Халтмагийн Баттулга һәм Көньяҡ Корея Премьер-министры Ли Нак Ён.

✓ Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев 2018 йылдың сентябрь йомғаҡтары буйынса Рәсәй Федерацияһы субъекттарының закондар сығарыу органдары башлыҡтары медиарейтингында бишенсе урынды биләне. Ул Мәскәү, Санкт-Петербург, Мәскәү һәм Иркутск өлкәләрендәге коллегаларынан ғына ҡалышып, сираттағы тапҡыр Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәрендәге парламент етәкселәрен уҙып китте.

✔ *Йәш кеше был йәшәйештә китап донъяһын аҙләп, уны тапмай күңелен төшөрмәһен, китап сюжеты, геройҙар характеры, хисләр бирелеше, ваҡиғалар сиселеше менән артыҡ мауыҡмаһын, тием.*



БӘХӘС ҠОРАМ

# КИТАП УҠЫУ ҺӘР САҠ ФАЙҘАҒАМЫ?

**Китап уҡыуҙың яҡшы икәнен барыбыҙ ҙа беләбеҙ. Китап - белем шишмәһе, тибеҙ. Әммә бөтә нәмә лә сама менән булырға тейеш шул. Саманан үтә икән, иң файҙалы нәмәләр ҙә зыянға әйләнеп китә. Китап менән дә шулай.**

Релли Селленг тигән кешенең яҙмаларында ошо хаҡтағы фекерҙе уҡығас, башта күңелемдә ҡаршылыҡ тыуғайны. Тик уҡый һәм уйлана бара мин быны ысынлап та шулай икәнен танырға мәжбүр булдым. Әлбиттә, был бик ескә һәм тәрән төшөнсә. Уны ҡапылдан ғына аңлау, ҡабул итеү һәм үҙеңдә баһалау ауыр. Бына нимә ти психолог был хаҡта. Китаптарҙа һәм китап геройҙары аша тәрбиәләнгән балалар күп осраҡта китап донъяһы менән реаль донъяны бутай һәм ысынбарлыҡта шул йәмғиәтте, шундай кешеләрҙе, ундағы мөнәсәбәттәрҙе эҙләп йәшәй. Ә асылда бит ул донъя юҡ. Хатта булған хәл-ваҡиғаларҙы ҡулланғанда ла яҙыусы уға художестолы биҙәлеш индерә. Ундағы геройҙар идеаллаштырыла, тормоштағынан күпкә батырыраҡ, матурыраҡ, юғарыраҡ итеп һүрәтләнә. Китап уҡып үскән уҡыусы шул идеалды эҙләп, йәшәйештәгеләрҙән ҡәнәғәт була алмайынса, көтә-көтә, эҙләй-эҙләй төшөнкөлөккә, өмөтһеҙлеккә бирелеп китеүсән һ.б.

Уйлап ҡараһаң, был бит ысынлап та шулай. Мин үҙем дә, мәҫәлән, китап геройҙарыма аҙ ғашиҡ булмаым һәм тормош ысынбарлығында китаптағыса идеаль шәхес эҙләнем. Китаптарҙағы мөнәсәбәттәр, ундағы кульминациялар, хис-тойғолар буранды бер ваҡытта ла мине ташлап китмәне. Ә ысынбарлыҡтағы эргәмдәгеләр күпкә ваҡ, хисһеҙ, ҡыҙыҡһыҙ кеүек тойолдо. Һәм шул нигеҙҙә барлыҡҡа килгән өмөт бөтә нәмәгә күҙемде япты, мине йәмғиәттә, йәмғиәтте миңә аңлайышһыҙ итте.

Шарль Перронның "Красавица и Чудовище" мультфильмында Бель шулай китаптар донъяһында йәшәй һәм уҡығандарынан яһап алған геройын көтә. Бәхеткә ҡаршы, күп мажаралар аша булһа ла унын был батыры килеп сыға һәм улар бәхетле була. Ә бит тормош әкиәт түгел һәм күп осраҡта был герой осрамай ҙа ҡуя. Ысынында, был бик ҙур трагедия ул. Бала саҡтан алып ошо осрашыуға әҙерләнгән, үҙен ошо мәлгә тәғәйенләгән әҙәм балаһының мөлдөрәмә күңеле ғәзаплана-ғәзаплана ҡорорға мәжбүр. Хыялдын, өмөттән, ымһыныуҙың үлеүе тотош йән-тән торошонон ауырыуы ул.

Китап уҡырға яратҡан, үтә лә күп уҡыған кешеләр менән һөйләшкәндә лә уларҙың шәхси бәхеттәрен таба алмауын, мөхәббәт өлкәһендә лә ҡәнәғәт булмауын, ғөмүмән, был донъяны ҡабул итә алмағанын аңғараһың. Уларҙың күптәре арыуыҡ йәштә булғанда ла проблемалырынан китап эсенә йәшеренәләр. Ундағы беҙҙекенә хас, әммә күпкә яҡтыраҡ һәм мәрхәмәтлерәк булған илгә ҡасып китәләр. Бәлки, был дөрөҫтөр ҙә...

Психологтың яҙғандарын уҡыйуҡый мин үҙемдәге күп хаталарҙы аңлай, төшөнә барған һымаҡмын. Әммә был хәҡиҡәтте аңлау менән өсөн һуңыраҡ инде. Мин быны шулай уҡ китап артынан китап уҡыған ҡыҙыма аңлатырға тырышам. Ысынбарлыҡтағы донъя менән китап донъяһы араһында аңды уята алырлыҡ кәртә булырға тейеш, тием. Йәш кеше был йәшәйештә китап донъяһын эҙләп, уны тапмай күңелен төшөрмәһен, китап сюжеты, геройҙар характеры, хисләр бирелеше, ваҡиғалар сиселеше менән артыҡ мауыҡмаһын, тием.

Шулай итеп, китаптар күп сирҙәрҙән, йән сирҙәренән дауа. Һәм шул уҡ ваҡытта әлеге үк йән ауырыуын барлыҡҡа килтереүсе сәбәп тә. Параллель донъялар тураһында һөйләйбеҙ бит, был да шундай уҡ йоғонтоға, шундай уҡ мөғжизәгә эйә булған төшөнсә ул. Ҙур, бик ҙур көскә эйә ул китап һәм китап донъяһы. Ул кешене һурып алып йоторға һәм үҙендә әсир итеп тотоп йәшәтергә мөмкин. Шунлыҡтан, китап уҡығанда ла аҡыл һәм сама кәрәк. Бының өсөн баланы китап уҡыу һәм уны ҡабул итеү ҡағиҙәләренә өйрәтеү мөһим. Был тәңгәлдә иң яҡшы ысул - уҡыған китап хаҡында бала менән һөйләшеү, уны анализлау, беҙҙең йәшәйеш, ысынбарлыҡ менән сағыштырып аңлатыу, төшөндөрөү. Уҡыусы китап донъяһының ни тиклем йәмле, йәнле һәм ҡыҙыҡлы икәнен белергә, әммә ысынбарлыҡта йәшәргә һәм уның шатлыҡ-ҡыуаныстары, ҡайғы-хәсрәттәре менән үсешергә тейеш. Шунда ғына китап уҡыу файҙалы булалыр... Эйе, тема бәхәсле... Кемдә ниндәй фекерҙәр булыр?

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

ТУҠТА, МӘЛ!




Ә БЕҘ ГӘЗИТ УҠЫЙБЫҘ!

ҠАЙТАУАЗ

**"Киске Өфө"лә туған тел тураһындағы мәҡәләләрҙе ҡыҙыҡһынып уҡып барам. Был бик мөһим мәсьәлә. Минеңсә, балаларҙа телгә һөйөү тәрбиәләү мотлаҡ ғаиләнән, ата-әсәнән тора.**

# ТЕЛГӘ ҺӨЙӨҮҘЕ...

## ғаиләлә тәрбиәлә

"Балаларың башҡортса беләме, һөйләшәме?" - тип һорағайным бер танышымдан: "Эйе, мин уларҙы өйрәтергә тырышам, яныраҡ башҡортса-русса һүҙлек алып бирҙем", - тине. Был көлкө лә, аяныс та тойолдо миңә.

Балалар башҡортса белһен өсөн уларҙың теле асылғансы уҡ үҙ телеңдә һөйләшергә кәрәк. Минең ҡатыным татар милләтенән, өйләнешкәс тә, өйҙә лә, урамда ла һәр кем үҙебеҙҙең телебеҙҙә һөйләштек. Тәүге улыбыҙҙың теле татарса асылды. Уға 3-4 йәштәр булғанда минең менән башҡортса һөйләшергә кәрәклеген аңлаттым. Икенсе улымдың теле башҡортса асылды. Улар әсәләренең дә, минең дә телемде өйрәнеп, ике телдә лә яҡшы һөйләшеп үҫте, ике телде бутаманы һәм айырмаһын яҡшы белде. Өйҙә бер ваҡытта ла русса һөйләшмәнек һәм бынан балаларҙы ла тыйҙыҡ.

Улдарымда башҡорт рухы тәрбиәләй алдым, тип уйлайым. Йоҡлар алдынан төрлө риүәйәттәр, башҡорттар тарихы, батырҙар тураһында боронғо йырҙар тарихын һөйләй инем. Өлкән улым башҡорт гимназияһында уҡығанда ошо хаҡта үҙенең иншаһында яҙған булған икән, башҡорт теле уҡытыусыһы һәм мәктәп директоры: "Ысынлап та улдарыңды риүәйәттәр һөйләп йоҡлата инеңме?" - тип аптырап һораны хатта.

Башҡортса һөйләшеп үҫһәләр ҙә, малайҙарыма балалар баҡсаһында ла, мәктәптә лә рус теле буйынса бер ҙә ауыр булманы, хатта тәрбиәселәр: "Рус телен яҡшы өйрәткәнһегеҙ", - тип, маҡтап та ҡуя ине. Ғәмәлдә, уларым рус телен урамда, тиҫтерҙәре менән аралашып өйрәнде. Өлкән улым башҡорт гимназияһын алтын миҙалға тамамлап, Өфө дәүләт нефть техник университетында уҡып сыҡты, хәҙер Төмән өлкәһендә эшләй. Кесе улым математика йүнәлешле рус гимназияһын яҡшы билдәләргә тамамланы, артабан Ырымбур авиация институтында уҡыны, әле Ханты-Манси автономиялы округында механик булып эшләй, икенсе юғары белем алып йөрөй. Хәҙер улдарым менән рәхәтләнеп, ауыҙ тултырып башҡортса һөйләшәбеҙ, рус телендә бер һүҙ ҙә ҡулланмайбыҙ. Хатта эргәләренә рус дуҫтары килһә лә, әсәләре менән миңә мөрәжәғәт иткәндә башҡортса өндәшәләр, үҙ телдәренән оялмайҙар, бер ниндәй комплекстары ла юҡ.

Йомғаҡлап, шуны әйткем килә: ғаиләһендә тик башҡортса һөйләшеп үҫкән балалар бер яҡтан да башҡа милләт балаларынан кәм түгел, киреһенсә, уларға башҡа сит телдәрҙе өйрәнеү еңелерәк. Шуға, балаларҙа үҙ милләтенә, теленә һөйөүҙе бәләкәйҙән тәрбиәләргә кәрәк.

**Сөләймән МӘЖИТОВ.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың указы менән заманса әҙәбиәтте үҫтереүгә тос өлөш индергән, әүҙем ижтимағи эшмәкәрлеге өсөн С.Т. Аксаков исемендәге әҙәби премия Юрий Поляковҡа бирелде. Юрий Михайлович Поляков (1954 йылда тыуған) - билдәле Рәсәй яҙыусыһы, шағир, публицист, драматург, журналист. 2001-2017 йылдарҙа "Литературная газета"ның баш мөхәррире булды.

✔ Башҡортостанда йыл һайын уҙғарылған бал байрамы - "Бал ҡорто туйы" була. Умартасылар, ғәҙәттәгесә, 15 сентябрҙә Бәләбәй районының Мәтәүбаш ауылына йыйыла. Республикала 335 мең бал ҡорто ғаиләһе иҫәпләнә. Башҡортостан умартасылары был байрамды беренсе тапҡыр 2013 йылда ойошторғайны. "Бал ҡорто туйы" - Рәсәйҙә умартасылыҡҡа һәм умартасылыҡ продукцияһына арналған иң йәш умартасылар байрамы. Бал фестивале миҙгел ябылғандан һуң уҙғарыла.

✔ Ҡырым Республикаһының Белогорск ҡалаһында капиталь ремонттан һуң район мәҙәниәт йортон асыу сараһы булды. Тантанала Ҡырым башлығы Сергей Аксенов мәҙәниәт йортон асыу райондың муниципаль власы һәм Башҡортостан Хөкүмәтенең хеҙмәттәшлек һөҙөмтәһе булыуын билдәләне. Бынан алда республиканың социаль максатлы программалар фондында Ҡырымға булышлыҡ итеү буйынса сараларҙы финанслау өсөн иҫәп асылғайны. Белогорск районына ярҙам күрһәтеүгә йүнәлтелгән аҡсаның дөйөм күләме 400 миллион һумдан ашыу тәшкил итте.

✔ Өфөлә элекке белем биреү йорттарының беренһе - 44-се мәктәпте нигеҙенән үҙгәртеп ҡороу дауам итә. Яңыртылған мәктәптә бер сменала 1300 бала уҡый алаcаҡ, тип хәтергә төшөрҙөләр Совет районы хакимиәтендә. Реконструкциялау "Республиканың 100 йыллығына - 100 объект" проекты сиктәрендә уҙғарыла, уға төбәк ҡаҙнаһынан миллиард ярым самаһы аҡса бүленгән.

✔ Башҡортостандың Милли музейында совет замананы мәктәбе тураһында "Мөғжизәле мәктәп йылдары!" күргәҙмәһе асылды. Коллекция бик күп йылдар буйына тупланған. Унда ысын тарихи документтар һәм фотоһүрәттәр, шулай уҡ совет мәктәбе атрибуттары: дәреслектәр, дәфтәрҙәр, яҙыу дәфтәрҙәре, көндәлектәр, ҡауырһынлы ручкалар, портфелдәр ҡуйылған. Экспозицияла төп урынды әлифбалар йыйылмаһы биләй, иң боронғоһо 1935 йылда сыҡҡан.

***✓ Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, йыл һайын Өфөнөң юғары һәм урта белем биреү уҡыу йорттарында уҡыуҙар башланғас, йәмәғәт урындарында сүп-сар күләме күҙгә күренеп арта икән.***



*БАШ ҠАЛАМ*



## ЙҮГЕРӘМ!

**Баш ҡалала һуңғы йылдарҙа спортҡа етди иғтибар бирелә. Ихаталарҙа спорт майҙансыҡтары, хоккей ҡумталары һаны йылдан-йыл арта, велоюлдар эшләнә, теләгән спорт төрө менән шөғөлләнеү өсөн мөмкинлектәр асыла. Ә бит тап бала саҡта кеше спорт менән нығыраҡ дуҫ була.**

Мин дә ҡасандыр еңел атлетика менән шөғөлләнә инем. Бынан ике тиҫтә йыл элек уны ташлап ҡуйҙым. Дөрөҫөн әйткәндә, ваҡыт тапманым. Бер йыл элек артабан да спортҡа ваҡыт тапмауҙың аҙағы хәйерле булмаҫын аңланым. Сөнки даими ултырып эшләгән эш үҙен һиҙҙерә башланы. Ул ваҡытта Өфө халыҡ-ара марафоны (УММ) илһамландырҙы. Нисә йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан, теләһә ниндәй дистанцияны йүгереүселәргә ҡарап, барыһын да ҡабаттан башларға булдым. Дөрөҫөн әйтәм: еңел булманы. Әммә иң мөһиме - үҙеңде еңеп, ҡарар ҡабул итеп, башлау.

Бөгөн үҙемдең BASHRUN серияһында ҡатнашыуыма йомғаҡ яһап, шуны әйтә алам: быйыл өс тапҡыр стартҡа сыҡтым, әлбиттә, ҡыҫҡа дистанцияларҙа. Беренсе миҙгелдән һуң үҙемдең көсөмдө һынап ҡарау, ҡабаттан йүгереүселәр хәрәкәтенә ҡушылыу, старт пистолеты тауышын ишетеү, һинең менән иңгә-иң тереп йүгергән кешеләрҙә тойоу мөһим ине. Артыһына өмөт тә итмәнем. Әммә 20 майҙа баш ҡалала үткән ЗаБег РФ ярышында 5 километр дистанцияла - өсөнсө, 14 июль, Благовещен ярыммарафонында 2 километрҙа - беренсе, 2 сентябрь, Өфө халыҡ-ара марафонында 3 километрҙа өсөнсө урын алдым.

Профессиональ спортсылар йылмайып ҡына ҡуйһа, был ҙур булмаған һөҙөмтәләр ҙә илһамландыра. Ә мин яңы миҙгелгә үҙемә бынан ике тапҡырға йәш булған ваҡыттағы - 18 йәшлек сағымдағы һөҙөмтәне үтергә тигән яңы маҡсат ҡуям.

Бынан бер йыл элек бындай маҡсат буй етмәҫлек булып күренһә, хәҙер, киреһенсә, уға өлгәшергә йәки яҡынлашырға мөмкин. Бер-ике йылда ғына булмай икән, яйлап. Әммә йүгерә башлау өсөн бер ваҡытта ла һуң түгел.

Ниндәйҙер шигеҙ бар икән, көсәнмәй генә, акрынлап кенә башлап ҡарағыҙ. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң мотлаҡ һөҙөмтә булыр. Ҙур булмаһа ла, бөгөнгө менән сағыштырғанда яҡшыраҡ буласаҡ. Ә иң төп һөҙөмтә - һеҙҙең сәләмәтлегегеҙ, һеҙҙең һәр саҡ формала булыуығыҙ.

**Евгений РӘХМӘТУЛЛИН.**
**Өфө ҡалаһы.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов үткәргән сираттағы оператив кәңәшмәлә үҫеп килеүсе быуынға һәм йәштәргә күберәк иғтибар йүнәлтелде.**

# ИҒТИБАР ҮҘӘГЕНДӘ - ЙӘШ БЫУЫН

Был юҡҡа түгел, сөнки ошо арала уҙған саралар ҙа был темаларҙы урап үтергә мөрхәт бирмәй. Мәҫәлән, 5-6 сентябрҙә Өфөлә үткән әүҙем граждандарҙың беренсе "Тере Өфө" форумы ла быны раҫлай. Тирә-яҡ мөхит, тарих, мәҙәниәт һәм ҡаланы үҫтереү темаларына битараф булмаған әүҙем граждандарҙы йыйған был сарала йәштәр ҡаланы эске туризм, йәшәү өсөн унайлы итеү буйынса ижади идеяларын тәҡдим иткән. Шуға ла ҡала хакимиәте башлығы, йыл һуңына тиклем әҙерләнеп бөтөргә тейешле ҡаланы үҫтереү стратегияһында йәштәрҙең тәҡдиме лә иҫәпкә алыныға тейеш, тип белдерҙе һәм шундай бурыс ҡуйҙы.

8 сентябрҙә иһә Еңеүҙең 50 йыллығы исемендәге скверҙа беренсе синыф уҡыусылары өсөн күләмле байрам уҙҙы. 9 йыл эсендә был проект Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә балаларҙың көтөп алған байрамына әүерелгән, сөнки унда төрлө күңел асыу программаһы менән бер рәттән, балаларҙың заман уйындарына әүерелгән ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс, мөғжизәле квест үтә. Быйыл был сара ысын мәғәнәһендә халыҡ байрамына әйләнә - унда 9 мендән ашыу кеше ҡатнаша.

Шулай уҡ Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, RAEX рейтинг агентлығы сығарылыш уҡыусылары Рәсәйҙә иң абруйлы вуздарына уҡырға ингән мәктәптәрҙең исемлеген баҫтыра. ТОП-300 иҫәбендә Өфөнөң 153-сө лицейы (46-сы урын), 93-сө (179), 39-сы (182) гимназиялары, М. С. Пинский исемендәге 83-сө инженер лицейы (263) ла бар. "Был яҡшы һөҙөмтә, әммә беҙ уны тағы ла яҡшыртырға тырышырға, ҡала мәктәптәрен тамамлаусыларҙың илдең абруйлы уҡыу йорттарына инеү күләмен үҫтереүгә йүнәлтергә тейешбеҙ. Быға өлгәшеү өсөн белем биреүҙең сифатын яҡшыртырға кәрәк", - тине ҡала хакимиәте башлығы.

Студенттар темаһына ҡағылғас, шуны ла әйтеп китмәй булмай: 15 сентябрҙә баш ҡалала Студенттар параҙы үтәсәк. Талиптарҙы берләштереүгә һәм беренсе курсҡа килеүселәргә ҙур мегаполис тормошона дөрөҫ инеп китеүҙә формалаштырыуға йүнәлтелгән был сара. Сөнки, Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, йыл һайын Өфөнөң юғары һәм урта белем биреү уҡыу йорттарында уҡыуҙар башланғас, йәмәғәт урындарында сүп-сар күләме күҙгә күренеп арта икән. Бигерәк тә был күренеш Театр скверында, Ете ҡыҙ фонтаны эргәһендә, Салауат Юлаев һәйкәлендә, Ватан этнопаркы майҙанында һ.б. урындарҙа күҙәтелә. "Ноябрь тирәләрендә хәл-торош нормаллашә, әммә беренсе курс студенттарына уларҙың етди, матур ҡалаға килеп эләгеүҙәрен, эскәмйәләрҙә саф һауа һулап ултырғанда тирә-яҡты көнбағыш ҡабығына, сүп-сарға батырыу насар икәнлеген аңлатырға кәрәк. Бер кемде лә үпкәләткем килмәй, әммә был - ысынбарлыҡ. Был йәһәттән уҡыу йорттары етәкселеге менән эшләргә кәрәк", - тип белдерҙе Ирек Ялалов.

Баш ҡалала, ысынлап та, торлаҡ-коммуналь хужалығына, юлдарҙы һәм ихаталарҙы ремонтлауға, йылытыу миҙгеленә әҙерлеккә генә түгел, кеше ресурсына ла, бигерәк тә йәш быуынды тәрбиәләүгә, тормош һынауы алдында ҡалған балаларҙы дөрөҫ юлға баҫтырыуға етди иғтибар бирелә. Ошо йүнәлештә алып барылған эшмәкәрлек хаҡында оператив кәңәшмәләрҙә тыңланған сығыштар ҙа быға асыҡ дәлил булып тора. Был юлы ла был тема көн үҙәгендә булды. Сөнки ошо көндәрҙә генә Өфө ҡалаһы делегацияһы Силәбе ҡалаһында үткән "Бергә - балалар хаҡына! Бергә ун йыл!" IX Бөтә Рәсәй күргәҙмә-форумында ҡатнашып ҡайтты һәм сәфәр йомғаҡтары, ошо йүнәлештәге эшмәкәрлек һөҙөмтәләре менән Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов таныштырҙы: "Ауыр тормош һынауҙары алдында ҡалған балаларға ярҙам фондының төп йүнәлештәренең береһе - ғаиләләге имен булмаған хәл-торошто һәм балаларҙың социаль етемлеген профилактикалау, - тине Сынтимер Биктимер улы. - Өфө хакимиәте һуңғы биш йылда балаларҙың хоҡуғын һаҡлау өлкәһендә ҡыҙыҡлыныусы учреждениелар менән берлектә бер нисә проектты уңышлы тормошҡа ашыра. Барлыҡ ойошмаларҙа уполномоченныйҙар хеҙмәте бар. Эш технологияһына ярашлы, мәғариф, медицина һәм башҡа учреждениелар урындарҙа имен булмаған ғаилә билдәләре күҙәтелгән ғаиләләрҙе асыҡлай. Уполномоченныйҙар хеҙмәте ғаиләгә барып, хеҙмәттәшлек планын төҙөй. Һәр осраҡ буйынса куратор тәғәйенләнә. Ул квартал һайын ғаиләләге хәлгә мониторинг эшләй һәм территориаль дисциплина-ара консилиум эшмәкәрлекте артабан дауам итеү йәки туҡтатыу тураһында ҡарар ҡабул итә. Уртаса алғанда, бер ғаилә менән белгестәр алты айҙан ике йылға тиклем эшләй. Беҙҙең методика йыйылыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы һәм 2019 йылдың ноябрендә Өфөлә муниципалитеттар өсөн федераль тәжрибә уртаҡлашыу майҙансығы ойоштороруға ҡарар ҡылынды".

"Ҡаланың төрлө йүнәлештәр буйынса уңыштары халыҡтың Өфөнө даими йәшәү урыны итеп һайлауына сәбәп булып тора. 2008 йылдан беҙҙә тәбиғи үҫеш һәм ыңғай миграция күренеше күҙәтелә. Был - етди ҡаҙаныш. Беҙгә әүҙем, ижади кешеләр килә. Улар - интеллектуаль һәм хеҙмәт ресурсы булып тора, - тине сығышты йомғаҡлап, Ирек Ишмөхәмәт улы.

Өфө ҡала хакимиәтенең Опека һәм попечителлек буйынса идаралыҡ начальнигы Татьяна Квасникованың сығышы ла үрҙә әйтелгәндәрҙе һандар миҫалында дәлилләне. Уның докладыетем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙың йәйге ялын ойоштороуға, уларҙы һауыҡтырыуға арналды. Әлеге ваҡытта Өфөнөң опека һәм попечителлек органдары 8-10 октябрҙә Конгресс-холда үтәсәк "Мегаполис. Балалыҡ территорияһы" халыҡ-ара форумына әҙерләнә. Унда ҡатнашырға Рәсәй төбәктәренән - Калининградтан алып Хабаровскиға тиклем 100 ғариза килгән дә инде.

Артабан билдәләнеүенсә, йәй башына ҡарата иҫәптә 2513 бала тора. Ҡалала ғаиләне алмаштырыусы ғаиләләрҙә йәшәгән балаларҙың һаны 1750 булһа, шулар араһынан һауыҡтырыу лагерҙарына йәки шифаханаларға ебәрергә мөмкин булған 7 йәштән 16 йәшкә тиклем 1417 бала иҫәпләнә. Һауыҡтырыу кампанияһы барышында Идаралыҡ 760 путевка алған, шуларҙың 466-һы - шифаханаларға. Уларҙың 371-е буйынса балалар ял иткән, 95-е - көҙ дауамында файҙаланыласаҡ. Балалар йорттары тәрбиәләнеүселәренең йәйге ялы республика бюджетынан финанслана. Бөгөн Өфөләге балалар йорттарында 118 бала бар. 1-се, 9-сы балалар йорттары тәрбиәләнеүселәре шифаханаларҙа һәм һауыҡтырыу лагерҙарында, 59 бала республика лагерҙарында ял итә, 25 бала каникул ваҡытында сит ғаиләләрҙә ҡунаҡта була. 2-се балалар йортонда тәрбиәләнеүсе мөмкинлектәре сикләнгән балалар йәйгеһен балалар йорто базаһында һәм Республика реабилитация үҙәгендә реабилитация үтә.

Кәңәшмәне йомғаҡлап, Ирек Ялалов артабан да етем балаларға ярҙам буласағын һәм бөгөн яңыраған мәғлүмәтте Өфө ҡалаһынан БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың яңы саҡырылышына депутат итеп һайланыусыларға ла еткерергә кәрәклеген белдерҙе.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ 15 сентябрҙә Өфөлә Бал фестивале үтә. Унда Башҡортостан умартасыларына киң билдәлелек килтергән иң яҡшы бал төрҙәре тәҡдим ителәсәк. Алдан белгестәр быйыл Башҡортостанда бал етерлек күләмдә булыр тип һөйләне. Унан бигерәк, умартасылар күберәк йүкә балы ағыҙған, ә сәскәненекен - йәй һүнлап килеү сәбәпле ғәҙәттәгенән аҙыраҡ айыртҡан.

✓ Бөгөн, 15 сентябрҙә, Өфөлә Рәсәйҙә иң ҙур спорт сараларының береһе үтә. Башҡортостандың баш ҡалаһы "Милләттәр кросы"н ҡабул итә. "Башҡортостан Республикаһында үҙәк старт "Кашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркында бирелә. Сара иртәнге сәғәт 11-ҙә башлана. Арауыҡты парк биләмәһендә үгерәләр", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр республиканың Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығында.

✓ Өфөлә "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" программаһы буйынса урам-юл селтәре ремонты 70 процентҡа үтәлгән. Бөгөнгө көнгә эштәр 55 объектта бара. Бөтә объекттарҙа деформация һәм ярыҡтар барлыҡҡа килеүҙе кәметеү өсөн уйлап сығарылған Superpave технологияһы файҙаланыла. Программаны ике йыл ғәмәлгә ашырғанда баш ҡалала бөтәһе 137 саҡрым урам йүнәтелде.

✓ Йылы һауа торошона алмашҡа һыуыҡтар, төнгө ҡыраудар килә. "Гисметео Өфө" порталы мәғлүмәттәре буйынса, көндөҙгө 20 градуслы һауа температураһы Башҡортостандың баш ҡалаһында был аҙна аҙағына тиклем һаҡлана. Унан һуң түбәнәйә башлай һәм 27 сентябрҙә көндөҙ +6 градус билдәһенә етә. Яуым-төшөм норма сиктәрендә көтөлә. Әлегә ҡар көтөргә кәрәкмәй: синоптиктар төүге ҡарҙы октябрҙең өсөнсө декадаһында фаразлай.

✓ Башҡортостан спортсылары октябрь башында үҫмерҙәрҙең III йәйге Олимпия уйындарында миҙалдар өсөн көрәшергә Аргентинаның Буэнос-Айрес ҡалаһына юллана. Унда 206 илдән 15-18 йәштәге үҫмерҙәр йыйыла. Рәсәй йыйылмаһында Башҡортостандан өс спортсы: йөҙөүсе Полина Егорова, уҡ атыу вәкиле Станислав Черемискин һәм велоспорт буйынса ике дисциплинала сығыш яһаясаҡ Айгөл Гәрәева ҡатнаша.

✓ "Салауат Юлаев" хоккей клубы 2018/19 миҙгелендәге КХЛ чемпионатында башланғыс күсмә турне сиктәрендә һуңғы уйынын СКА командаһы менән үткәрҙе һәм уларҙы 4:1 иҫәбе менән еңде. КХЛ яңы миҙгелендә өйҙәге беренсе уйынды "Салауат Юлаев" "Торпедо" менән үткәрҙе һәм уны 4:3 иҫәбе менән еңеүгә өлгәште.

✓ *Силәбе өлкәһендә 161 668 башҡорт йәшәй. Уларҙың 90 645-е туған телен белә. Процент нисбәтендә балаларҙың 10 проценты ғына әле башҡорт телен өйрәнеү мөмкинлегенә эйә, ә өйрәнә алған балалар һаны - 32 400 самаһы.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# СӘҒӘТ-ФОНТАН

**Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Ленин майҙанындағы фонтан төҙөлөшө менән танышты.**

Был гидродинамик ҡоролма түңәрәк һауыт формаһындағы сәғәт буласаҡ. Һандар махсус тумбаларға ҡуйыласаҡ. Фонтандан һыу төрлө бейеклектә атыласаҡ, иң көслөһө шул мәлдәге ваҡытты күрһәтәсәк. Кисен иһә уның төрлө төҫтәге уттары Ленин майҙанын тағы ла ылыҡтырғысыраҡ итәсәк. Әлеге ваҡытта фонтанға электр кабелдәре һуҙылған, инженер коммуникацияларын ҡороу тамамлана. Һауыттар урынлаштырылып, коммуникация каналдарына тоташтырылғас, каналдар ҡапланасаҡ, нығытыласаҡ һәм һауыттар бетондан ҡойолоп, проектҡа ярашлы гранит плиталар менән йөҙләнәсәк. Фонтан төҙөлөшөн тамамлау өсөн ҡала бюджетынан 50 миллион 89 мең һум аҡса бүленәсәк. Фонтан бассейнының диаметры - 20, тәрәнлеге 0,3 метр. Ул көнөнә 4 кубометр һыу сарыф итәсәк.

# ҠУНАҠТАР КИЛӘ...

**20-22 сентябрҙә Өфөлә БДБ илдәренең баш ҡалалары һәм эре ҡалаларҙың (МАГ) халыҡ-ара ассамблеяһы ойошманың 20 йыллығына арналған XXVI сессияһын һәм "Ҡала хәүефһеҙлеге. Комплекслы ҡараш" халыҡ-ара форумын үткәрә.**

Уның эшендә МАГ-тың ағза-ҡалалары етәкселәре, БМО-Хабитат, БДБ-ның Башҡарма комитеты, РФ Федераль Йыйылышының Федерация Советы вәкилдәре, РФ Дәүләт Думаһының профиль комитеттары етәкселәре, ҡала-ара берләшмәләр, фәнни һәм эксперт ойошмалары вәкилдәренең ҡатнашыуы көтөлә. Форум темаһы ҡаланың тотороҡло үҫеше өсөн шарттар тыуҙырыуҙы күҙаллаған хәүефһеҙлек проблемаларына комплекслы ҡарашты, милләт-ара һәм конфессия-ара татыулыҡты, экологик хәүефһеҙлекте, ҡала инфраструктураһы эшмәкәрлегенең хәүефһеҙлегенә комплекслы ҡарашты һ.б. проблемаларҙы үҙ эсенә ала.

# ТАҘАРТЫУ АЙЛЫҒЫ

**Башҡортостандың баш ҡалаһында территорияларҙың төҙөклөгөнә, таҙалығына ҙур иғтибар бүленә, унда йәшәү имен һәм уңайлы булһын өсөн барлыҡ шарттар тыуҙырыла. Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр көн һайын тәүлек әйләнәһенә, ялһыҙ һәм байрам көнһөҙ үҙҙәренә беркетелгән участкаларҙың таҙалығы тураһында хәстәрлек күрә.**

Төҙөкләндереү эштәре 17 сентябрҙән 21 октябргә тиклем үтәсәк территорияларҙы санитар таҙартыу айлығы сиктәрендә лә дауам итәсәк. 29 сентябрҙә Өфөлә дөйөм ҡала өмәһе ойоштороласаҡ. Был осорҙа ҡалала юлдарҙы, тротуарҙарҙы, ҡоймаларҙы, парапеттарҙы ремонтлау, квартал эсендәге территорияларҙы, гараж кооперативтары майҙандарын, баҡсаларҙы, ҡалаға ингән урындағы территорияларҙы таҙартыу, рөхсәт ителмәгән урындарҙа сүп-сар түгеүҙе туҡтатыу буйынса эштәр алып барыласаҡ. Төрлө милек формаһындағы предприятие, ойошма, учреждениелар етәкселәренә үҙҙәренә беркетелгән территорияларҙы, шул иҫәптән тротуарҙарҙы һәм газондарҙы тәртиптә тотоу йөкмәтелә. Төп эш күләме торлаҡ-коммуналь хужалыҡ комплексы хеҙмәткәрҙәре елкәһенә төшөүгә ҡарамаҫтан, һәр кем был изге эшкә үҙ өлөшөн индерә ала. Санитар йомалар һәм өмәләр шулай уҡ йәш быуында тыуған ҡалаһына һөйөү тәрбиәләргә ярҙам итә.

- Айлыҡ сиктәрендә йәшелләндереү эштәре тормошҡа ашырыласаҡ, шул иҫәптән ағастар ултыртыласаҡ. Шуға күрә был акцияла ҡатнашырға теләгән граждандарҙы үҫентеләр менән тәьмин итергә, уларға ихата территорияларын төҙөкләндереүҙә ярҙам итергә кәрәк, - тине ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов сираттағы оператив кәңәшмәлә.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# АСЫҠ КӘШТӘЛӘ ҺАТЫЛМАҺЫН!

**Дәүләт Думаһы Рәсәйҙә аҙыҡ-түлек магазиндарының асыҡ кәштәләрендә спиртлы эсемлектәрҙе һатыуҙы тыйырға тәҡдим итә.** Бындай башланғыс менән Дәүләт Думаһының Һаулыҡ һаҡлау буйынса комитеты рәйесе урынбаҫары Леонид Огуль сығыш яһаны. Хәмерҙе, тәмәке изделиелары кеүек үк, һатып алыусылар күҙенән йәшерергә кәрәк - йә айырым залға, йә иһә ябыҡ шкафтарға, тип иҫәпләй ул. Кибеттәрҙә алкоголдең иркен һатылыуы өлкәндәр өсөн генә зарарлы түгел, балаларға ла насар өлгө күрһәтә, тип билдәләне парламентарий.

# БЕНЗИН ХАҠЫН АУЫҘЛЫҠЛАРҒА!

**КПРФ партияһынан депутаттар Дәүләт Думаһына бензинға һәм дизель яғыулығына хаҡтарҙы дәүләт көйләүе тураһында закон проектын индерҙе.** Документ 2019 йылдың башынан хөкүмәттең яғыулыҡҡа сикке хаҡ билдәләй алыуын күҙ уңында тота. Билдәләнеүенсә, бындай сара ҡулланыусыларҙы хаҡтарҙың көслө тирбәлеүенән һәм бензинға сығымдарҙың ҡырҡа артыуынан яҡларға мөмкинлек бирергә тейеш. Ағымдағы йылдың майында Башҡортостанда бензиндың хаҡы алты тапҡыр күтәрелде. Әлеге ваҡытта баш ҡалабыҙҙа АИ-92 маркалы бензиндың литры уртаса 40, 59 һум; АИ-95 - 43,63 һум, АИ-98 - 47,87 һум. Дизель яғыулығының литры Өфөлә 43,85 һумға төшә. Уҙған йылдың 31 июле менән сағыштырғанда баш ҡалала дизель яғыулығы 14,6 процентҡа ҡиммәтләнде. 92-се бензин ошо ваҡыт эсендә 11,8 процентҡа, 95-се бензин 10,9 процентҡа артты.

# ӨҪТӘМӘ ХАҠҠА ҺАЛЫМ...

**Рәсәй Президенты Владимир Путин өҫтәмә хаҡҡа һалымды 18 проценттан 20 процентҡа тиклем арттырыу тураһында законға ҡул ҡуйҙы.** Ул 2019 йылдың 1 ғинуарынан үҙ көсөнә инә. Документтың тексы рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Унда, атап әйткәндә, төп хеҙмәттәр һәм социаль әһәмиәтле тауарҙар өсөн өҫтәмә хаҡҡа һалым 10 процент кимәлендә ҡала, тиелә. Аҙыҡ-түлек (деликатестарҙан тыш), балалар тауарҙары, дарыуҙар, медицина тауарҙары, шулай уҡ мәғариф, фән һәм мәҙәниәт менән бәйле әҙәбиәт өсөн һалымдың льготалы ставкаһы һаҡлана. Эске авиаташыуҙарға һалым һалынмай. Өҫтәмә хаҡҡа һалымды арттырыу ҡаҙнаға 600 миллиард һум өҫтәмә аҡса килтерә. Был аҡса Путиндың ярлылыҡты кәметеү һәм ғүмер оҙайлығын арттырыу тураһындағы май указын үтәүгә йүнәлтелә. Уны башҡарыуға кәм тигәндә 8 триллион һум кәрәк.

АФАРИН!

# СИЛӘБЕНӘН ЯҠШЫ ХӘБӘР



**Силәбе өлкәһендә йәшәгән башҡорт балаларының 90 процентының туған телен өйрәнеү мөмкинлеге бар. Был хаҡта Башҡортостандың Силәбе өлкәһендәге вәкиле Амур Хәбибуллин Силәбе өлкәһе мәктәптәрендә башҡорт телен өйрәнеүгә арналған видеоконференцияла белдерҙе.**

Онлайн режимында кәңәшмәгә өлкәнең 39 муниципалитетынан мәғариф ойошмаларында башҡорт телен өйрәнеү мәсьәләләре буйынса дөйөм белем биреү йөкмәткеһенең этномәҙәни компонентын бойомға ашырыуҙы күҙәткән белгестәр ҡушылды, тип хәбәр иттеләр Силәбенең "Уралым" гәзитенән. Башҡортостандың төбәктәге даими вәкиллеге һәм өлкә башҡорттары ҡоролтайы башланғысы менән Силәбе өлкәһе мәктәптәрендә башҡорт телен фән итеп өйрәнеү тураһында мәсьәлә 2017 йылда уҡ күтәрелгәйне. Был тәҡдим төбәк губернаторы Борис Дубровскийға еткерелде һәм хуплау тапты. Силәбе өлкәһе губернаторы ҡарамағындағы дәүләт милли сәйәсәтен тормошҡа ашырыу буйынса совет ултырышында Борис Дубровский бер генә бала башҡорт телен өйрәнергә теләк белдерһә лә, уға ошондай мөмкинлек бирелергә, шарттар тыуҙырылырға тейешлеге хаҡында әйтте.

Башҡортса белгән балалар республика вуздарына уҡырға инә (унда абитуриентҡа башҡорт теленә өҫтәмә фән булараҡ башҡа телдәрҙе һайлау мөмкинлеге бар); тел буйынса олимпиадаларҙа, конкурстарҙа, гранттарҙа ҡатнаша; яңы һөнәрҙәр үҙләштерә, Силәбе өлкәһенең "Уралым" гәзитендә яҙыша, Көньяҡ Урал биләмәһендә тормошҡа ашырылған милли проекттарҙа ҡатнаша ала, тип билдәләне спикер.

Конференция аҙағында Силәбе өлкәһе Мәғариф һәм фән министрлығының Башланғыс, төп һәм урта дөйөм белем биреү идаралығы начальнигы Елена Тюрина муниципалитеттан килгән коллегаларынан балаларға, ата-әсәләргә башҡорт телен өйрәнеү мөмкинлеге тураһында мәғлүмәт еткереүҙәрен һораны. Уның әйтеүенсә, Силәбе өлкәһенең Мәғариф министрлығы башҡорт телен өйрәнергә теләгән уҡыусылар һанын махсус анкета ярҙамында асыҡлай.

"Уҡытыу-методик комплекс буйынса проблема бар, ләкин ҡулланмалар өлкә бюджеты аҡсаһына һатып алыныуы мөмкин", - тип билдәләне Елена Тюрина һәм ошо йүнәлештә һәр яҡлап ярҙам күрһәтергә әҙер булыуын белдерҙе.

2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә ярашлы, Силәбе өлкәһендә 161 668 башҡорт йәшәй. Уларҙың 90 645-е туған телен белә. Процент нисбәтендә балаларҙың 10 проценты ғына (өс меңгә яҡын кеше) әле башҡорт телен өйрәнеү мөмкинлегенә эйә, ә өйрәнә алған балалар һаны - 32 400 самаһы. Уларҙың күбеһе Силәбе өлкәһенең 26 район-ҡалаһында йәшәй. Төбәктәге даими вәкилдең сығышында башҡа милләт вәкилдәренең дә башҡорт телен өйрәнеү йәһәтенән ыңғай миҫалдар килтерелде. Мәҫәлән, башҡорт телен белгән рустар - 1674, украиндар - 44, татарҙар - 4489, ҡаҙаҡтар - 364.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Импотенция

❖ Тигеҙ күләмдә алоэ һуты, ауыл майы, бал, ваҡланған гөлйемеште ҡушырға. Көнөнә 3 тапҡыр ризыҡ ҡабул итерҙән ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ ошо ҡатнашманы 1 стакан ҡайнар һөткә болғап эсергә. Ҡараңғы һалҡын урында һаҡларға.

❖ Тигеҙ күләмдә бал һәм яңы һығылған кишер һуты алырға, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1/4 стакан эсергә.

❖ 150 мл алоэ һуты, 250 г бал, 350 мл ҡыҙыл шарап, 100 г ваҡланған гөлйемеш, 30 г петрушка орлоғон ҡушып болғарға һәм 1-2 аҙна төнәтергә. Ваҡыты-ваҡыты менән һауытты һелкетеп, болғатып торорға. Көнөнә 3 тапҡыр ризыҡ ҡабул итерҙән ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

## Йоҡоһоҙлоҡтан

❖ 1 стакан һыуға 1-әр ҡалаҡ бал һәм лимон һуты ҡушып эсегеҙ.

❖ Төнгөлөккә 1 стакан һыуға йәки ҡатыҡҡа 1 ҡалаҡ бал болғап эсһәгеҙ, яҡшы йоҡларһығыҙ.

## Аритмия

❖ Тигеҙ күләмдә бал һәм ҡара торма (черная редька) һуты алып, көнөнә 2-3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ашарға.

## Бронхит

❖ Бронхиттан, көслө йүтәлдән дауа: көнөнә 3 тапҡыр ярты стакан кәбеҫтә һутына 1-2 балғалаҡ бал ҡушып эсергә.

❖ 200 мл аш һеркәһенә 1 стакан ваҡ итеп туралған һуған һалып, марля аша һөҙөргә, шул уҡ күләмдә бал өҫтәргә. Һәр 20 минут һайын 1-әр балғалаҡ эсергә.

## Аҙ ҡанлылыҡ

❖ 1-әр ҡалаҡ бал, ҡара торма менән сельдерей һутын ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр ҡабул итергә.

## Йөрәк сире

❖ Йөрәктең ишемик сирҙәренән ҡотолоу өсөн 1-2 ай буйына көн һайын 50-шәр г бал ашарға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Тупаҫ кеше тупаҫ булып ҡаласаҡ, шулай ҙа уны был насар ғәҙәтенән арындырырға мөмкин, үҙен генә ҡайғыртыусыны башҡалар тураһында ла уйларға өйрәтеп була. Нисек тиһегеҙме? Бының өсөн үҙегеҙгә үҙгәрергә кәрәк.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# ТЫЙЫУҘАР

## Тәрбиә, хоҡуҡ менән бәйле йолалар:

- Күп көлмәйҙәр, зиһен тарала.
- Күп көлмәйҙәр - йән үлә.
- Иҫнәгән саҡта ауыҙҙы ҙур асып, кешегә ҡарап иҫнәмәйҙәр, йәмһеҙ була.
- Атай-инәйгә "уф" тип әйтергә ярамай.
- Кеше өйөндә тырнаҡ киҫмәйҙәр.
- Тырнаҡты ташларға ярамай, утҡа яғырға йә күмеп ҡуйырға кәрәк.
- Кеше әйберен һорауһыҙ алмайҙар, теймәйҙәр.
- Кешегә яулыҡ менән һуҡмайҙар, күҙе һуҡырая.
- Күлдәк итәгенә ҡулыңды һөртмә - оят күрерһең.
- Ҡульяулыҡ менән бит һөртмәйҙәр.
- Ҡыҙ баланың артына типмәйҙәр, бәхетһеҙ була.
- Ботҡа бот һалып, аяҡты һелкеп ултырмайҙар, аяҡта шайтан бәүелә.
- Эт, бесәйгә типмәйҙәр, аяғың һыҙлаулы була.
- Энә урламайҙар, уғрылыҡҡа төртөп тора.
- Ҡунаҡ килгәндә баланың урыны шаршау артында. Ул ололарҙың һүҙен тыңлап, ҡушылып һөйләшеп ултырырға тейеш түгел.
- Ҡунаҡта саҡта хужаның бесәйен ашатырға ярамай, ғауға сыға.
- Буш күнәк менән кешенең юлын ҡыйырға, урамда оҙаҡ торорға ярамай.
- Өлкән ир кешенең юлын ҡыйырға ярамай.
- Яулығыңды бәйле көйө сисеп ырғытма - таушыш булыр.
- Төш күрһәң, "хәйерлегә булһын" тип әйтмә, ул хәйер көтөп тик тора, ти.
- Юҡ-барға ант итергә ярамай.
- Ниәт ҡылып, ант итһәң, мотлаҡ үтәргә кәрәк. Аманатҡа хыянат итергә ярамай.
- Ҡорбан ашын ашағандан һуң, ит һөйәктәрен ергә күмеп ҡуялар.
- Күләгәлә ултырып, кесе ярау итмәйҙәр, ауырыу табырһың - күләгәгә шайтан эйәләшә.
- Ашаған һөйәкте тәҙрә аша бирмәйҙәр - өйҙән мәйет сыға.
- Төндә бәҙрәфкә йөрөргә ярамай, ен-зәхмәт һуға.
- Ямғыр яуғанда яланбаш йөрөргә ярамай.
- Ямғыр яуғанда тәҙрәгә ҡарарға ярамай.

### Кеше күңеленә бәйлеләре

- Ватыҡ көҙгөгә ҡарарға ярамай - күңелең китек булыр.
- Ир кешене рәнйетергә, уны кәмһетергә ярамай.
- Кешене нахаҡҡа ҡарғама, ҡарғышың үҙеңә төшөр.
- Кешегә нахаҡҡа яла яҡмайҙар
- Кешегә ҡаты бәрелмә, күңелен рәнйетеп ҡуйыуың бар. Кеше рәнйешенән һаҡлан, ул ҡарғыштан да нығыраҡ төшә.
- Кешегә рәнйемә, уртаҡ төшә.
- Нахаҡҡа кеше йөҙөн йыртма, халыҡ араһында кәмһетмә, юғиһә, үҙең дә кәмһетелерһең.
- Нахаҡ рәнйеһәң, рәнйеш үҙеңә төшә.
- Көн дә көйләп йөрөмәйҙәр, көйөрһөң.
- Таңдан көндө йыр менән башлама, моңайырһың.
- Бер нәмәгә лә аптырарға ярамай, нимәгә аптырайһың, алдыңа шул килер.
- Кешегә артығы менән шатланырға ла, ҡайғырырға ла ярамай.
- Урысты матур тимә, үлгәс, иманыңа булышыр.

**Фәнирә ҒАЙСИНА.**
**(Дауамы бар).**

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

# БАЛАҢДЫ АҠСА ҠОЛО ИТМӘ!

### Янсығыңды өйҙә "онот"

Әле бала һөйләшә лә белмәгән сағынан уҡ үҙе яратҡан тәмле туңдырма, кәнфит-сәтләүектәр ҡайҙа һатылғанын яҡшы белә. Һәр әсә, бигерәк тә өләсәйҙәр, баланың һораған тәм-томон, уйынсығын һатып алырға күнегеп китә. Кемдең балаһын ҡыуандырғыһы килмәһен инде! Пакемондар, телепузиктар, киндер-сюрприздар, сникерстар, таҫмалар, машиналар, музыкаль открыткалар...

Бәлки, сабыйығыҙҙың холҡо бындай иғтибарҙан боҙолоп та китмәҫ, шулай ҙа ул "нимә һорайым, шуны миңә алалар" тигән уйҙы бәләкәй саҡтан аңына һеңдереп үҫәсәк. Әлбиттә, был теләктәр бала ҙурайған һайын үҙгәреп торасаҡ. Иң мөһиме - теләгән нәмәһен шунда уҡ һатып алып, балағыҙҙы хыяллана һәм шатлана белеү тойғоһонан мәхрүм итәсәкһегеҙ.

Тиҙҙән балағыҙ өйҙә ҡунаҡ булғанда йәки телевизорҙа мауыҡтырғыс фильм барғанда ни өсөн ул йоҡларға тейешлеген дә аңламай башлаясаҡ. Китабынан айырып, уны магазинға икмәккә лә ебәрә алмаясаҡһығыҙ. Ҡасан булһа ла балағыҙҙың үҙ мәнфәғәттәренән бер нисек тә баш тартырға йыйынмауын аңлаясаҡһығыҙ.

Ләкин былар киләсәктә буласаҡ. Ә әлегә балағыҙ матур ҡаплы шоколад һатып алмағанығыҙ өсөн магазин уртаһында аҡырып илаймы? Бындай саҡта нимә эшләргә һуң? Был хәлдән сығыу юлы бер генә: урамға сыҡҡанда аҡса янсығын өйҙә "онотоп" ҡалдырыу. Шулай ғына сабыйығыҙҙы был насар ғәҙәтенән арындыра аласаҡһығыҙ. Әлбиттә, ял көнө паркка барғанда балағыҙға байрам яһап алырға ла ярай, тик көн һайын түгел.

### Ғаиләлә кем һанай?

Ун алты йәшлек ҡыҙығыҙ бер көн килеп һеҙгә "Минең туфлийым 500 һум тора, ә һин үҙеңә ике меңлек аяҡ кейеме алаһың", тип үпкәһен белдерһә, "Мин кемде үҫтергәнмен!" тип, өмөтһөҙлөккә бирелергә ашыҡмағыҙ. Балағыҙ ата-әсәһенең тотонған аҡсаһын һанай башлаған икән, уйланырға урын бар. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле: бәлки, һеҙ үҙегеҙ өйҙә бөтә алынған әйберҙәрҙең хаҡы тураһында йыш һөйләйһегеҙҙер? Ә бәлки, олатай-өләсәйҙәр "Күпме тора? Иҫең китер!" тип йыш ҡабатлайҙыр. Ҡыҙығыҙға ата-әсәнең сығымы уны бер нисек тә ҡыҙыҡһындырырға тейеш түгеллеген иплап кенә аңлатыу кәрәк буласаҡ.

Әлбиттә, бындай аңлашыуҙарҙан һуң бер аҙ ваҡытҡа балағыҙға нимә булһа ла һатып алыуҙан тыйылып тороғоҙ. Һеҙгә ҡыҙығыҙҙың һүҙҙәре оҡшамаҫы, быны ул яҡшы белеп торһон. Был осраҡта "Миңә бит эшкә йөрөргә, шуға ла яҡшыраҡ һәм ҡиммәтлерәк кейенергә тейешмен", тип аҡланып маташыу ҙа насар эҙемтәләргә килтерәсәк.

### Бала үҙе аҡса эшләп ҡараһын

Реклама роликтары һәм телевизорҙа барған шоуҙар үҫмерҙең аңын томалай. Унда күрһәтелгән матур тормошҡа ул шул тиклем ышана, үҙе лә шулай йәшәргә хыяллана башлай.

Рекламаларҙан баланы бер нисек тә һаҡлап булмай. Хатта өйөгөҙҙә телевизорығыҙ боҙоҡ булһа ла, ул был фетиштарҙы ҡайҙан булһа ла ишетәсәк. Уны ярлыҡтар, лейблдар, фирма билдәләре тулыһынса арбай. Баҡтиһәң, сәстәрҙе фирмалы шампунь менән йыуырға кәрәк, кеҫәндәге телефондың ҡиммәтле, төрлө функцияларға эйә булырға тейеш, ялдарыңды Мысыр һәм Европала үткәреү дөрөҫ икән. Былай дауам итһә, элек йәй көндәрендә ауылға ҡайтып, олатайөләсәй янында ял итергә яратҡан балаларығыҙ тиҙҙән һеҙҙең иҫке алтынсы моделдәге машинағыҙға ултырырға ла ояла башлар. Балағыҙҙы ғаиләһенең йәшәү кимәле түбән булыуы ла сығырынан сығарасаҡ. Яйлап ҡына "тормошта бер нәмәгә лә өлгәшә алмаған" ата-әсәгә ихтирам кәмей башлай. Мәктәпте тамамлауға бындай "матур тормошта йәшәү өсөн генә тыуған" балаларҙың башында елдәр уйнауы, институтҡа йәки колледжға уҡырға инеү өсөн белеме етмәүе асыҡлана ла инде. Шул саҡта тағы ла ата-әсәгә һуңғы аҡсаларын балаларына репетитор яллау өсөн тотонорға тура килә. Күптәр шулай эшләй ҙә. Әммә бынан үҙегеҙ генә яфаланасаҡһығыҙ. Бала түләп юғары белем алыуҙы шымартылған юлдан "икенсе, яҡшыраҡ" тормошҡа илтеүсе һуҡмаҡ итеп күрә. Уларҙың был иллюзияларын ваҡытында юҡҡа сығарырға кәрәк.

Балағыҙға джинсы һатып алырлыҡ булһа ла аҡса эшләп ҡарарға мөмкинлек бирегеҙ. Ата-әсәһенең "ябай" уҡытыусы, табип, инженер булып эшләүенән ояламы? Шулай булғас, әйҙә, һеҙгә нисек йәшәргә кәрәклеген ул үҙе өйрәтһен. Тик эшенә ҡыҫылмағыҙ, ярҙам да итмәгеҙ, барыһын да үҙе атҡарып сыҡһын.

### Комплекстарыңдан арын

Үрҙә килтерелгән миҫалдар бөтә ғаиләлә лә осрайҙыр, моғайын. Тик бер нәмәгә иғтибар итергә кәрәк: ҡайһы бер ғаиләләрҙә балалар ата-әсәләренең аҙ ғына эш хаҡы алып эшләүенән бер ҙә оялмай, нимәләр тапмай, тырып та аптыратмай, ки-рәһенсә, үҫеп етеп, үҙҙәре уларға ярҙам итә башлаясаҡтары тураһында хыяллана.

Бер ғаиләлә үҫеп килеүсе ике бала ла төрлө булыуы бар. Улығыҙ булғанына ла риза, ә ҡыҙығыҙ аҙым һайын илап, "Яңы телефон алмаһағыҙ, алгебранан "икеле"не төҙәтмәйем", тип янай. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң?

Тәбиғәттән бирелгән характер үҙенсәлектәре алдында беҙ көсһөҙ. Тупаҫ кеше тупаҫ булып ҡаласаҡ, шулай ҙа уны был насар ғәҙәтенән арындырырға мөмкин, үҙен генә ҡайғыртыусыны башҡалар тураһында ла уйларға өйрәтеп була. Нисек тиһегеҙме? Бының өсөн үҙегеҙгә үҙгәрергә кәрәк. Әгәр ҙә өйҙә гел атаһының "Эштә ҡәҙеремде белмәйҙәр" тип зарланыуын ишетһә, әсәй кеше иренә уның аҙ аҡса эшләүен, күршеләренең инде өсөнсө машина алыштырыуын көн һайын иҫенә төшөрөп торһа, бала бәләкәйҙән үк ғаиләләге финанс хәлде башҡаларҙыҡы менән сағыштырып анализларға өйрәнеп китә.

Шулай булғас, комплекстарығыҙҙан арынырға кәрәк. Һәр ваҡыт аҡса тураһында ғына һөйләүҙән тыйылып тороғоҙ. Аҡса тормошта иң мөһиме түгел икәнлеген яҡшы беләһегеҙ бит. Шулай уҡ бөтә ғәйепте рекламаға, заманға япһарып ҡуймағыҙ. Тәрбиә ғаиләлә башлана, һеҙ ниндәй - балаларығыҙ ҙа шундай, быны бер ваҡытта ла онотмағыҙ.

ТУҠТА, МӘЛ!



МИН АҠСА ЭШЛӘҮ СЕРҘӘРЕН БЕЛӘМ...

✓ **Ә.-З. Вәлиди был йәһәттән "татар" тип айырым "төмән" булып торған - унарлы система буйынса ойошторолоп формалаштырылған 10 меңлек ғәскәрҙе атауҙары тураһында яҙа.**



*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# АТА-БАБАМ ҠАЛА ТӨҘӨГӘН...

**Тарихсылар һәм әҙәбиәтселәрҙең Башҡортостандағы рус ҡәлғәһенә нигеҙ һалыусы кеше тураһындағы туктауһыҙ бәхәсе сығанаҡтарҙың бик аҙ булыуына бәйле. Ул ваҡытта Волга буйы төбәгендә Рәсәйҙең бер нисә ҡалаһына нигеҙ һалына. Мәскәү дәүләте, Ҡаҙан һәм Әстерхан ҡолатылыу иҫәбенә, көньяҡ-көнсығыш территорияны үҙенә ҡушып нығытып ҡуйырға ынтыла. Мәсәлән, Һамарҙы кем төҙөгәнен генә түгел, хатта буласаҡ ҡаланы теүәл һүрәтләгән планлы батша наказына ла эйәбеҙ. Әммә Өфөгә ҡарата бындай раҫлауҙар юҡ тиерлек.**

Мәсәлән, Михаил Александрович Нагойҙы ла Өфө ҡалаһына нигеҙ һалыусы тип раслай торған документтар юҡ. Уның Өфө воеводаһы булыуы тураһында 1475-1598 йылдарҙағы "разряд кенәгәһендә" беренсе мәғлүмәт теркәлә. Унда: "Өфөләге яңы ҡалала Александр улы Михаил Нагой менән башлыҡ Григорий Онучин", - тип билдәләнә. Башҡа вазифалы тәғәйенләүҙәр булған был мәкәлә 7095 йыл менән билдәләнә, йәғни датаны донъя башланғандан алып Ғайса бәйғәмбәр тыуған ваҡытҡа күсерһәк, 1585-1586 йылдар икәнен күрәбеҙ. Бында эш шунда: XVII быуатта йыл дәүләт календары буйынса 1 сентябрҙә башлана. Шул сәбәпле, М.А. Нагойҙы тәғәйенләү "Аллаһы Тәғәлә" ("Госпожин") көнөнән һуң тормошҡа ашырылыуын асыҡлап китеү мөһим. Был православие байрамы 28 августҡа тура килә. Шулай итеп, яңы ҡалаға воевода 1586 йылдың көҙөндә тәғәйенләнә. Быға бәйле билдәле тарихсы М.Н. Тихомировтың Синодаль йылъяҙмаһында юлыҡҡан юлдарҙа иғтибар итергә кәрәк. 7095 йыл менән билдәләнгән сығанаҡта: "Волгала Һамар ҡалаһын ҡуйҙыҡ. Шул уҡ йылды Өфө ҡалаһын еткерҙек", - тиелә. Йәғни, төҙөнөк түгел, ә еткерҙек. Был Өфөнө 1586 йылда төҙөлөп бөткән Һамарҙан алда төҙөй башлау тураһында һөйләй. XVI-XVII быуаттарҙа Рәсәйҙә ҡалаларҙы беренсе һыуыҡтар башланғанға тиклем, яҙғы-йәйге ваҡытта төҙөйҙәр. Шулай итеп, Өфөнө (Өфө ҡәлғәһен - **Ред.**) 1585 йылда төҙөй башлап, 1586 йылда Һамар ҡалаһы менән бер ваҡытта тамамлайҙар. Тимәк, М.А. Нагойҙы тәғәйенләү ҡала беренсе хеҙмәт итеүселәрҙе, йәғни йәшәүселәрҙе ҡабул итергә әҙер булғас тормошҡа ашырыла.

Шуға ҡарамаҫтан, Ағиҙел йылғаһындағы ҡаланы (ҡәлғәне - **Ред.**) төҙөүҙә ҡатнашҡан күп кешеләрҙең береһенең исемен атай алабыҙ, тип уйлайым. 1695 йылда оҙайлы ер процесы башлана, унда Урал арьяғы крәстиәндәре башҡорттарҙы Уралдың Себер яғындағы өлөшөн баҫып алыуҙа ғәйепләй.

XIX быуат һуңында Пермдың крайҙы өйрәнеүсеһе В.Н. Шишонко "Пермь йылъяҙмаһы"ның алтынсы томында ошо суд тикшереүенең документтарын баҫтыра. Ошо эштә Себер юлы Оло Ҡатай һәм Һалйоғот олоҫо башҡорто Амағол Кузеевтың иптәштәре менән бергәләп яҙған коллектив үтенесе айырым ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Ата-олаталарының ҡаҙаныштарын һанап, башҡорттар Өфө ҡалаһын төҙөүҙә олаталары Шөгөр Дәүләтовтың ролен айырым билдәләй, бының өсөн уға кенәз исеме бирелеүенә баҫым яһай.

Шөгөр Һалйоғот ҡәбиләһенең бейе була, сөнки документта күрһәтелеүенсә, ул Синара йылғаһы буйында аҫаба ерҙәренә эйә. Был йылға ошо берләшмәнең үҙәге булып тора. Ә.-З. Вәлиди үҙенең башҡорттар тарихы буйынса тикшеренеүҙәрендә һалйоғоттарҙың Тайбуғаның төмәндәре булыуын белдерә. Ә.-З. Вәлиди һалйоғоттарҙың Шибанид ханы менән ҡанһыҙ бәрелештәре бигерәк тә XVI быуатта, шибанид Күсем һалйоғот бейенең улы Йәҙгәр Мырҙаға ҡаршы һуғыш башлағас, ҡабына, тип яҙа. Себер ырыуы һалйоғоттарҙың Сыңғыҙхан империяһы составындағы тарихи яҙмышы күпселек башҡорт ырыуҙарының сыңғыҙиттар менән мөнәсәбәттәре характерына тап килә.

Әммә Урал алды башҡорттарынан айырмалы, Сыңғыҙхан вариҫтары һалйоғоттарға ҡарата үҙҙәренең бөйөк ата-олаталарының васыятын тоторға тырышмай. Джучиҙың бишенсе улы Шибандың вариҫтары тайбуғидтар династияһын ҡолатырға ынтыла һәм Себер йортон үҙҙәренә буйһондорорға тырыша. Был көрәш XV-XVI быуаттарҙағы ике йөҙ йыллыҡтар дауамында ла тынмай. Күсем хан заманында шибанидтар Себерҙән элек бында хакимлыҡ иткән кланды ҡыҫырыҡлап сығара һәм юҡ итә. Шуға ҡарамаҫтан, Күсемдең еңеүе ваҡытлыса ғына була, сөнки тарихи сәхнәгә Ермак фигураһы менеп баҫа. Себер йортоноң идара итеүсе кланы булараҡ, һалйоғоттар сыңғыҙидтарға үҙҙәренең урындағы уғыр ҡәбиләләре өстөнән хакимлыҡ итеүен юҡҡа сығарыуҙы ғәфү итә алмай. Шуға күрә, Рәсәй ғәскәре Урал арьяғында күренеү менән, Себер воеводалары һалйоғоттарҙа тиҙ генә үҙҙәренең ышаныслы союздаштарын таба. Урындағы юлбашсыларҙың береһе Шөгөр Кокузов үҙ кешеләре менән Себерҙән хатта 1570 йылда уҡ Рәсәй властары ҡала төҙөүҙе ҡушаллаған Ағиҙел йылғаһына күсеп килә. Өфө тарихы буйынса боронғо сығанаҡ - "Отводная книга по Уфе" китабы Урюза йылғаһында татар слободаһы Өфөнөң беренсе хеҙмәт итеүселәренә поместье урыны рәсми бүленгәнгә тиклем барлыҡҡа килеүен теркәй.

Рус ғәскәрҙәрендә "вожи" тип урынды ғына түгел, халыҡтың телен һәм традицияларын да яҡшы белеүсе юл күрһәтеүсе йәки разведчикты атағандар. XVII быуатта хеҙмәттәге кешеләр поместье өсөн ер һорарҙан алда тәүҙә уны ике-өс йыл эшкәрткән. Шундай уҡ асыл менән булаҫаҡ алпауыт ерҙең үҙен тулыһынса туйындырыуына, икенсенән, һайланған участкаға икенсе кешеләр дәғүә итмәүенә ышанған. Был ерҙе үҙ белдегең менән файҙаланыу тип аталған һәм хөкүмәт бындай асулға рөхсәт биргән. "Отводная книга по Уфе" китабындағы күп һанлы күрһәтмәләр 1591 йылда "слобода татарҙары" Шөгөр Козуков иптәштәре менән 90 дисәтинә һөрөнтө ерҙе һөрҙө, тип раслай. XVII быуат башына Шөгөр исеме Урюза йылғаһындағы татар слободаһына бирелә. Шул уҡ исемде 1912 йылғаса Урюза тип аталып йөрөтөлгән йылға алып, шундағы тау менән бер рәттән һаманғаса Шөгөр йылғаһы тип йөрөтөлә. Тимәк, 1695 йылда Шөгөр Кокузовтың Өфөнө төҙөү тураһындағы мәғлүмәттәрҙең хаҡ булыуы бик ихтимал, сөнки "слобода татарҙары" биләмәһе ҡаланан алдараҡ йәки уның менән бер үк ваҡытта барлыҡҡа килә.

Уҡыусыны Шөгөр слободаһы халҡын "татар" тип атауҙары хаталы һығымта яһарға этәрмәһен. Сөнки Ә.-З. Вәлиди был йәһәттән "татар" тип айырым "төмән" булып торған - унарлы система буйынса ойошторолоп формалаштырылған 10 меңлек ғәскәрҙе атауҙары тураһында яҙа. Моғайын, тап ошо сәбәп буйынса һалйоғот башҡорт ҡәбиләһе ырыу бүлексәләренә эйә булмағандыр. Себер воеводалары рәсми документтарҙа хатта башҡорт ырыуҙары булған ҡатай, ҡыпсаҡ, табын һәм әйләләрҙе лә татар тип атай. Шуныһы ҡыҙыҡ, Шөгөр дуҫтары менән ерҙәрҙе хеҙмәттәге татарҙар оклады буйынса ала, шул уҡ ваҡытта Урал арьяғында үҙҙәренең боронғо аҫаба ерҙәрен дә һаҡлап ҡала. 1695 йылғы үтенес ҡағыҙы буйынса фекер йөрөткәндә, Шөгөр Кокузовтың вариҫтары, Һалйоғот һәм Ҡатай олоҫо башҡорттары, үҙҙәренең Синаре, Мейәс, Исет, Ревле, Багаряк йылғалары буйындағы аҫаба ерҙәренә хоҡуҡтарын раҫлағанда, уларҙың боронғо аҫаба ерҙәре булғанына баҫым яһай. Документтар һәм 1695 йылғы үтенестәге мәғлүмәт Шөгөр Кокузовтың 1601 йылда Өфөнән Тубыл йылғаһы үренә Күсем хандың уларына ебәрелгән дипломатик миссияла ҡатнашыуын да раҫлай.

Шөгөр Кокузовтың Ҡасим батшаһы Арыҫлан Алексей улының яҙмышына ла ҡыҫылышы булыуы тураһында тарихи хеҙмәттәрҙә әлегәсә аныҡ фекер юҡ. 1695 йылғы үтенес хатында Шөгөр Кокузов Арыҫлан Алексеевичты "Бөйөк хаким һәм бөйөк кенәз Михаил Федеровичҡулы аҫтына инергә" дүндерә алыуы тураһында әйтелә. Был батшаның биографияһын мәҡсатлы өйрәнеүсе тарихсы А.В. Беляков Алп-Арыҫландың Күсем хандың ейәне булыуын, 1598 йылдың 20 апрелендә Обь йылғаһы буйынса Күсем хандың ғәскәре ҡыйратылғас, рустарға әсирлеккә эләгеүен белдерә. Әммә Арыҫлан Мәскәүгә әсир булып түгел, ә үҙаллы, Обь йылғаһындағы алыштан һуң ете йыл үткәс бара. Уның Мәскәүгә барыу тураһындағы ҡарары тап шул йылдарҙа күсемселәр менән һөйләшеүҙәрҙә әүҙем ҡатнашҡан һалйоғот Шөгөр Кокузовтың йоғонтоһо аҫтында ҡабул ителеүе лә ихтимал. Шуныһы ҡыҙыҡ, улының Мәскәүҙән әйләнеп ҡайтырына өмөтөн өҙгән Алей солтан үс итеп һәм уларҙы улының юғалыуында ғәйепләп, Өфө өйәҙе башҡорттарына һөжүм итергә ҡарар ҡыла. XVI быуат һуңындағы сығанаҡтарҙа Шөгөр Кокузовтың ҙур улы - Маңғатай Шөгөрөв билдәләнә. "Отводная книга по Уфе" китабында 1591 йылда Өфө татарҙары слободаһы менән күршеләш Маңғатайҙың һөрөнтө ерҙәре билдәләнә. Был сығанаҡта ул "хеҙмәттәге татар" тип түгел, ә башҡорт тип яҙыла. Күрәһең, Маңғатай Шөгөрөвкә XVI быуат һуңында уҡ Мең олоҫо аҫабаһы булыу насип була. Шуға ҡарамаҫтан, төрки-монгол мөхитендәге ҡанлы ҡон бер ваҡытта ла ваҡыт йәки туғанлыҡ дәрәжәһе менән сикләнмәй. Һөҙөмтәлә Себер сыңғыҙидтары Шөгөр Кокузовтың тоҡомонан үс ала. Әммә быны Күсемдең улы Алей түгел, ә уның ағаһының улы - Аблай солтан тормошҡа ашыра. 1635 йылда ул Үҙәк Башҡортостанда булған Торатау районынан Шөгөрөвтың слободаһына хәл иткес һөжүм яһай. Солтан Аблайҙың төп көсөн ҡалмыҡтар алып торғанлыҡтан, рәсми документтарҙа Өфөнөң слобода татарҙары ҡалмыҡ баҫҡынсылығынан үлтерелә, тип билдәләнә.

1645 йылда Өфө дворяны П. Ураков көл өйөмө ҡалған ташландыҡ Шөгөр слободаһына килеп, сиктәш һөрөнтө ерҙәрҙе Өфөнөң хеҙмәттәге кешеләренә бүлеп бирә. Элекке ер биләүселәр тураһында "быға тиклем был ерҙәрҙә Маңғатай һәм Күҙебай һәм уларҙың дуҫтары йәшәне. Уларға ҡалмыҡ кешеләре һөжүм итеп, улар вафат булды. Ә ерҙәр 10 йыл һәм унан да күберәк ваҡыт буш ята, бер кемгә лә поместье итеп тә, оброк итеп тә бирелмәгән", тип билдәләнә. Шуға ҡарамаҫтан, Шөгөр Кокузовтың Урал арьяғындағы туғандары 27 йыл үткәндән һуң Күсем ханға ҡаршы тороуҙа реванш ала. Тап һалйоғоттар ҡатайҙар менән берлектә 1662 йылда Аблайҙың улы - Ҡансураны ҡатыны һәм балалары менән әсирлеккә алып, уны Өфө властарына тапшыра.

**Булат АҘНАБАЕВ,**
**тарих фәндәре докторы.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Филипп НЕФЕДОВ*

# ХАЛЫҠ БАТЫРЫ САЛАУАТ

Шәхси, ғаилә мөхитендә башҡорттар мәрхәмәтле, ягымлы һәм шат күнелле булалар, ҡатындары менән яҡшы мөнәсәбәттә йәшәйҙәр, балаларын яраталар. Ҡунаҡсыллыҡ улар өсөн изге бурыс иҫәпләнә. Ҡатындары ирҙәренә тоғролоҡло, йорт эштәре һәм балалар тәрбиәләү тулыһынса уларҙың иңендә була. Башҡорт әсәләре хаҡында йыш ҡына халыҡ йырҙары сығарылған. Батыйға тиклем башҡорт бына шундай булһа, унан һуң да шулай булып ҡала. Европа ғәрәсәте - Сыңғыҙхандың ейәне Рәсәйҙе ҡырған хәлдә лә башҡорттарға теймәгән - улар йөҙәндә ул ырыуҙаштарын күргән. Башҡаларҙан айырып, башҡорттарға ул тамға һәм улыс исемдәре бирә, башҡа өстөнлөктәргә мөмкинлек аса.

Быуаттар үтә. Ваҡыт һәм тәбиғәт үҙ эшен итә: тауҙарҙа, далаларҙа йәйләп көн итеүсе башҡорттар тора-бара бүленә, айырымлана башлай. Шул уҡ ваҡытта тау башҡорттары көстәрен тағы ла арттыра төшә, бойондороҡһоҙлоған һаҡлап ҡала, ә даланыҡылар тыныс көнкүрешкә ылыҡып, ултыраҡ тормошҡа күсә. Элекке берҙәмлек һәм бойондороҡһоҙлоҡ бәйләнештәре өҙөлөп ҡала. Башҡорттоң ҡан дошманы булған ҡырғыҙҙар (ҡайсаҡ-ҡырғыҙҙар, йәғни хәҙерге ҡаҙаҡтар - **Ред.**) "тау башҡорттары" исемен ишетеү менән ҡалтырап төшөр булған, ә даланыҡыларға барымта яһап, һөжүм итеп торған. Был хәл башҡорт далаларында нуғайҙарҙың нығыныуына булышлыҡ итә. Улар ҡырғыҙҙарҙың арт һабағын уҡытып, башҡорттар өсөн кәрәкле союздашҡа әүерелә. Нуғайҙар менән башҡорттар татыу йәшәй. Ләкин Ҡаҙанды буйһондороуҙан бер нисә йыл элек Дим буйы ялан башҡорттары тормошонда тотош халыҡтың аратабанғы яҙмышында фажиғәле сағылыш алған ваҡиға була. Халыҡ риүәйәттәре был хаҡта бына нәмә һөйләй.

Бер туған ике нуғай ханы Аҡһаҡ Килембәт менән Ҡара Килембәт үҙара ыҙғышып китеп, яман һуғыш ҡуба. Башҡорттар ҙа, нуғайҙар ҙа икегә бүленеп, берәүҙәре - өлкәнен, икенселәре кесе туғанды яҡлай. Ҡан ҡойғос ауыр һәм оҙайлы һуғыш була был, бик күп халыҡ ҡырыла, хатта ер тетрәй. "Ер ыңғырашты" ти был хаҡта аҙаҡ башҡорттар. Аҙаҡ ҡаты ҡыш килә, ер йөҙөн тәрән көрт баҫа. Был күренештә яман билдә фаразлаған Килембәттәр Яйыҡ арьяғына һәм Кубань тарафтарына ашыға, башҡорттарҙың да ҡайһылары уларға эйәрә. Ырыу башлығы Ҡәнзәфәр бей, йәш булыуына ҡарамаҫтан, ҡалғандарҙы тыуған ерен ташлап китмәҫкә күндерә.

**(Дауамы бар).**



**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВАны шағирә итеп тә, бөгөнгө башҡорт прозаһының йөҙөк ҡашы булырҙай прозаик та, тос фекерле журналист итеп тә беләләр хәҙер. Хәҙер, тибеҙ, сөнки ул оҙаҡ йылдар Сибайҙа йәшәне, ижад итте, ә төпкөлдәгеләр, үҙегеҙ беләһегеҙ, ниндәй генә ҙур талант эйәһе булмаһын, етмәһә, Миләүшә һымаҡ үтә етди кеше лә булһа, үҙе хаҡында бик танытып, белгертеп бармай. Һәм, ниһайәт, ул Өфөлә. Башта Башҡортостан юлдаш телевидениеһында эшләне, хәҙер бына ике йылдан ашыу "Киске Өфө" гәзитендә хеҙмәт итә. Башҡорт журналистикаһында оҙаҡ ҡына ваҡыт эшләүен иҫәпкә алып, "Киске Өфө" гәзите коллективы уны Башҡортостан Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһына тәҡдим итте. Миләүшә Сәйғәфәр ҡыҙының журналист һөнәре тураһында фекерҙәре, моғайын, был юлдарҙы уҡыусыларға ла ҡыҙыҡлы булыр, тип ышанабыҙ.**

# ЖУРНАЛИСТЫҢ ҠОРАЛЫ -

## геройын, уҡыусыһын арбау ул

### Журналист булырға теләп...

Башҡорт теле уҡытыусыһы булырға хыялланып үҫтем, уҡыным, шул маҡсат менән ҡанатланып, Башҡорт дәүләт университетына килгәйнем. Журналистика факультетында уҡыған ҡыҙҙар - Эльвира Айытҡолова, Гөлназ Мортазина, Рәйлә Күсемхановалар менән бер бүлмәлә тура килдем. Улар мәҡәләләр яҙалар, редакцияларға йөрөйҙәр, шуларҙы баҫтырыу ниәте менән гәзит-журнал баҫмаларында эшләүселәр менән тығыҙ аралашалар. Хәтеремдә, Рәйләгә эйәреп, "Йәшлек" гәзитенә барҙым. Гәзиттең ул саҡтағы баш мөхәррире Артур Иҙелбаев "Редакцияға кеше буштан-бушҡа килеп йөрөмәй ул", тип, миңә лә задание ҡушып ҡайтарҙы. Бығаса инша яҙыуҙан һәм "әсәй-бесәй" темаһындағы шиғырҙарҙан башҡа нәмә яҙып ҡарамаған беренсе курс студенты булған минә был эш бик ҙур яуаплылыҡ һалды. Ҡайтҡас та яҙырға ултырҙым, кис буйына яҙҙым, төнгөләккә ҡараламанан таҙаһына күсерҙем һәм иртәнсәккә ярты шаҡмаҡ дәфтәрлек мәҡәләмде тотоп, баш мөхәррирҙең ишек төбөндә тора инем инде. Ул аптырап китте. Бер нисә битен уҡыны ла, урынбаҫарынмы, яуаплы сәркәтибенме саҡыртты. Мине ҡабул итеү бүлмәһенә сығарҙылар. Ишек асылып-ябылғанда уның: "Шаяртып ҡына ҡушҡайным..."- тигән кеүегерәк хәбәрен ишетеп ҡалдым бит. Ғорурлыҡтың баштан ашып түгелгән сағы, хистәр менән идара итеп булмай - үпкәләп сығып ҡайт та кит. Берәй аҙнанан баш мөхәррирҙең сәләме килеп етте һәм мине "Йәшлек" гәзитенә ярты ставкаға эшкә алдылар. Был минең журналистика донъяһына һаған тәүге аҙымдарым ине.

### Китапхана һуҡмағында

Бала саҡтан китаптар яраттым. Китапханаға тартып ҡына торҙо күңелем. Балалар өсөн яҙылғандарын ҡат-ҡат уҡып, ятлап бөткәнмен инде. Күҙем ололар кәштәһенә лә төшөп-төшөп ала. Китапханасы апай быны аңғара һәм: "Ошоно бирһәм, әсәйең әрләмәҫ микән..." - тиеңкерәп, һайлап-һайлап, шул кәштә баҫмаларын да тоттороп ҡуя. Ҡыуанысымдан ырғый-һикерә өйгә йүгерәм дә, тиҙ арала йотлоғоп уҡып бөтөп тә ҡуям. Кире алып барһам, китапханасы апай ысынлап уҡығанмыюҡмы икәнемде тикшереү өсөн эстәлеген һорай. "Бер апай менән бер ағай" тип һөйләп ташлайым. Көлә-көлә лә, тағы бирә. Китапхана ябыҡ булһа, шунда клуб нигеҙе төбөндә көтөп ултырам. Ауыл ерендә ни, ғаиләлә булған апайҙың донъяуи мәшәҡәттәре лә, районға йөрөй торған эштәре лә булғандыр инде. Мин, бала-саға, уны аңлап етмәйемдер, көтә лә ултырам. Бер шулай нигеҙ буйында ултырып ойоп киткәнмен. Уянып китһәм, күләгәлә тәгәрәшеп ятҡан кәзәләр, яу булышып минең китаптарҙы сәйнәп яталар. Илай-илай йыйып алдым да, был хәлдәге китаптарҙы алып барырға оялып, китапхана юлын онотоп торҙом. Хатта урамда китапханасыны күрһәм дә, ҡасып китә башланым. Бер мәл ул мине үҙе килеп тапты, хәлде асыҡланы. Аңлаштыҡ һәм мин ҡабаттан китапхана юлынан йүгерә башланым. Һәм ошоғаса тиклем, ҡайҙа ғына йәшәһәм дә, китапхана тупһаларына саң төшөрмәйем.

### Сәбәп

Ниндәй эш башланһаң да, юл һайлаһаң да, уның сәбәпселәре була.

Башланғыс синыфтарҙа ниндәй шиғыр яҙғанмындыр инде, уны уҡытыусы Вәзимә апай райондың "Таң" гәзитенә ебәргән. Бер көн сана шыуып йөрөп, ҡараңғыла ғына ҡайтып инһәм, өҫтәл артында бер бабай атайым менән ашапәсеп ултыра. Аш төпкө яҡтағы түңәрәк өҫтәлгә ултыртылған, уртала араҡы тора. Әсәйем өлтөрәп йөрөп һыйлай. Аптырайым хәҙер. Ғәҙәттә, шешә төҫө күреү менән көйә лә китә торғайны әсәй. Был юлы үҙе хөрмәт итә.

Түрбашта шым ғына ултырайым тиһәм, былар мине бабайҙың эргәһенә үк алып килеп ҡуйҙылар. "Быуна ул - Миләүшә", - тиҙәр. "Әэй, был ни сәпсим бәләкәй бит", - тип арҡамдан һөйҙә ҡунаҡ. Минә иһә уны "Яҙыусы ағай - Самат Ғәбиҙуллин" тип таныштырҙылар. "Яҙыусы" тигән һүҙҙән мин дә шаҡ ҡаттым.

Икенсе көн Самат ағай мине толопҡа урап, трактор санаһына ултыртып, үҙәккә, шиғыр кисәһенә алып китте. Юлда ҡоҫоп, ауырып, бик ҡәйефһеҙ барып төштөм. Ағай мине дауалап, ниндәйҙер үләндәр ҡайнатып эсереп, күлдәктәремде үтекләп биреп, бер апайҙы саҡыртып сәсемде бантиклатып, әүрәтеп-тынысландырып, ҡатнаштырҙы байрамда. Шиғриәткә ҡарата яһаған беренсе аҙымым тап ошо булғандыр, тип уйлайым.

### Фекер эҙләп...

Ниндәй генә мәҡәлә уҡыһам да, фекер эҙләйем. Фекер юҡ икән - мәҡәлә лә юҡ. "Йәшлек" гәзитендә эшләй башлағас, тәүге уҡытыусыларым Гөлсимә Ризуанова менән Хәсән Назар булды. Береһе әрләй, икенсеһе маҡтай. Хәсән ағайҙың "Ҡайҙа бында фекер?" тип ҡаты итеп һорағанынан ҡурҡып биҙрәп торам. Ҡағыҙымдың яртыһын сыя ла, яңынан яҙырға ултырта. Фекеремдә яҙам да кеүек. Ҡыйыуһыҙыраҡ сығалыр, күрәһең, ағай "Ҡуян яҙмалары уҡытма миңә, ҡыйыу әйт, сатнатып яҙ" тип кире тоттора. Был Хәсән ағай мине бөтөнләй күрә алмай, ахыры, тип уйлайым шул саҡ. Гөлсимә апай бутҡа бешереп алып килеп һыйлай, ипләп кенә әүрәтә. "Хәсән ағайың һине яратып, яҡын күреп әрләй ул, ҡайһыларҙы, ана, күрмәй ҙә", - ти. Шулай ҡаҡҡылай торғас, йәйләп ул минең мәҡәләләрҙе оперативкаларҙа өлгө итеп ҡуя башланы. Гәзиттән китеп хушлашҡанда, иҫтәлек яҙып китабын бүләк иткәйне. Унда "Минең фекерле, ҡыйыу уҡыусыма" тигән һүҙҙәр ҙә бар ине...

Шунан алып, мәҡәлә яҙһам, хатта яҙыр алдынан уҡ, мин унда мәғлүмәт биреүҙән тыш, ниндәй фекер әйтә алам, тип уйлай башлайым.

### Журналисты кем өйрәтергә тейеш?

Ауыл балалары башҡорт филологияһына уҡырға барыуҙы иң еңел юл, тип уйлай. Башҡортса беләм, шулай булғас, унда уҡый алам, тигән фекерҙә улар. Ә, асылда, филологияны өйрәнеү башҡортса һөйләшеп кенә йөрөү түгел ул. Унан, шул йәштәр йәки редакцияға, йәки мәктәпкә эшкә юллана. Унда инде кем ҡулына эләгә? Бөгөн матбуғат баҫмаларында йәштәр менән шөғөлләнеп ултырыусылар юҡ иҫәбендә. Шулай үк яҙыусылар араһында ла ундайҙарҙы табыу икеле. Сабир Шәрипов ағай шундайҙарҙың береһе ине. Йәш яҙыусылар менән бик әүҙем эшләне. Ваҡытында минең тәүге китабымды ла ҡабат-ҡабат күсерткәйне ул.

"Киске Өфө" гәзитенә килгәс, шул мәктәптең әле бар икәнен күреп ҡыуандым. Йәш журналистарҙы әҙерләү тимерлеге бында. Был мәктәпте үткән һәр журналист бер ваҡытта ла эшләгән баҫмаһының һәм үҙенең йөҙөн ҡыҙартып тормаясаҡ.

### Хәбәрсе гәйбәтсе түгел

Туҡтауһыҙ яңылыҡ эҙләп, күпте күреп, күпте ишетеп-белеп тороуға күнеккән журналист журналист этикаһын һәм һөнәри кимәлен һаҡлай белмәй икән, ул гәйбәтсе генә булып ҡалырға мөмкин. Был сифат уның мәҡәләләрендә лә, аралашыу манераһында ла сағылыш таба. Бөгөн бары тик бәйән итеүгә һәм хистәр солғанышына ғына ҡоролған материалдар яҙыу модаға инеп китте. Уларҙа яҙыу мәҙәниәте лә, стилистик ҡағиҙәләр ҙә тотолмай. Бары тик уҡыусыны шокка керетеү, уның күңел ҡылдарында уйнау ғына маҡсат итеп ҡуйыла. Социаль ҡатламдың иң түбәненә төшөп, ундағы бысраҡ кейемдәрҙе әйләндереп күрһәтеү ыҙрыҡлы мәҡәлә була икән, тип тә уйлайҙар, күрәһең. Асылда, журналист уҡыусыны ытырғандырырға, уның психикаһына кире тәьҫир яһарға тейеш түгел. Уның ундай хоҡуғы юҡ. Хәбәрсе теләһә ниндәй мәғлүмәтте лә итәғәтле, мәҙәниле сиктәрҙә еткерергә бурыслы.

Зәңгәр экрандарҙағы шоу формаһындағы тапшырыуҙарҙың алып барыусыларына тиңләшергә лә, оҡшарға тырышырға ла кәрәкмәй. Улар журналистар түгел, улар бары шоумендар, тапшырыуҙары бер ниндәй нормаларға ла нигеҙләнмәгән. Шулай итеп, сикте тота беләйек - хәбәрсенән гәйбәтсегә әйләнмәйек.

### Яҙыусы һәм журналист

Яҙыусы менән хәбәрсе араһында айырма ҙур. Яҙыусы журналист һәм журналист яҙыусы булырға тейеш тигән хәҡиҡәт юҡ. Редакцияларҙа эшләү дәүерендә һәр ваҡыт тигәндәй әҙәбиәт бүлеген алып барҙым. Бында, ғәҙәттә, ябай авторҙарҙан тыш, ҡулъяҙмаларын ҡәләм тирбәткән ҡараусы уҡытыусылар, телселәр һәм журналистар алып килә. Был осраҡта яҙмалар әҫәр булмай сыҡҡанда, ошо хәҡиҡәтте кемдәргә аңлатыу ауырыраҡ тип уйлайһығыҙ? Журналистарға. Улар гәзит-журналдарҙа яҙышҡас, табаҡ-табаҡ мәҡәләләре донъя күреп торғас, баштарында бик күп мәғлүмәт, әҙер сюжеттар булғас, бөтөн был байлыҡты әрәм итмәҫкә булып, әҫәр яҙырға булалар. Әлбиттә, беҙҙең журналистар араһында сынъяһау яҙыусыларыбыҙ, һәләтле, абруйлы шәхестәребеҙ ҙә бар. Әммә улар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Яҙыусы менән хәбәрсе стиле лә, әҙәби һүрәтләнеш алымдары ла һәм әҙәбиәт теорияһына ҡағылышлы башҡа бик күп ҡағиҙәләр ҙә айырыла. Был бик нескә сик ул. Был сикте, айырманы йәки фәнни белем аша аңғараһың, йәки тояһың. Ошо төшөнсәләргә үҙең өлгәшмәһәң, уны һинә редакцияның әҙәбиәт бүлегендә ултырған хеҙмәткәр генә аңлата алмаясаҡ.

### Һүҙ өсөн яуаплылыҡ

Һүҙ өсөн яуап бирә белеү журналисты ғына түгел, һәр кемде лә биҙәй. Ә инде журналисты икеләтә. Быны өсөн, тимәк, яҙған һүҙенә яуап бирә алырлыҡ тема һайлай белеү зарур. Һәм, әлбиттә, ҡыйыулыҡ, белем, хәҡиҡәткә тоғро ҡалыу кәрәк. Бына тап һүҙгә яуап бирә белеү, материал өсөн иңгә яуаплылыҡ алыу аҡһай бөгөн. Ошоларҙан ҡасып, үтә лә йомшаҡ, абстракт мәҡәләләр, ә

**_Журналист журналист этикаһын һәм һөнәри кимәлен һаҡлай белмәй икән, ул гәйбәтсе генә булып ҡалырға мөмкин. Был сифат уның мәҡәләләрендә лә, аралашыу манераһында ла сағылыш таба. Бөгөн бары тик бәйән итеүгә һәм хистәр солғанышына ғына ҡоролған материалдар яҙыу модаға инеп китте. Уларҙа яҙыу мәҙәниәте лә, стилистик ҡағиҙәләр ҙә тотолмай. Бары тик уҡыусыны шокка керетеү, уның күңел ҡылдарында уйнау ғына маҡсат итеп ҡуйыла._**

***✓ Хәрбиҙәр һәм медицина темаһынан тыш, айырыуса һуңғы осорҙарҙа, туған тел һәм динебеҙ хаҡында йыш яҙа башланым. Үҙемдең төп һөнәрем тел ғилеменән алыҫ булыуына ҡарамаҫтан, был проблема мине лә үтә борсой.***



күп осраҡта бары тик һүрәтләүгә, мәҙхиәгә генә ҡоролғандары яҙылыусан. Ҡыйыуһыҙ хәбәрсе һәм шундай уҡ яҙыусыларҙың да яҙмаларын, әҫәрҙәрен уҡығанда авторҙың был эске кисерештәрен һиҙеп була. Саҡ ҡына иғтибарлыраҡ булған һәр уҡыусы аңғара ала быны. Һәм уҡығанға ҡарата ҡыҙыҡһыныу юғала ла. Сөнки мәҡәлә аша авторҙың яҙған темаһын үтә лә һағайып ҡына һөйләгәнен йәки аңлап етмәгәнен тояһың. Уҡыусыны алдап булмай, ул һәр саҡ уяу, һиҙгер һәм күҙәтеүсән.

## Арбау һәм әхлаҡ

Һәр ваҡыт кешеләр менән аралашыу, уны әңгәмәгә ылыҡтырыу, аса алыу өсөн арбау һәләте лә кәрәк. Ә ул һәләтте үҫтереп була икән. Быны миңә бер психолог аңлатҡайны. Беҙ, мәҫәлән, журналист ҡырылған джинсыла, һуҙылған свитерҙа ла йөрөй ала, тигән фекерҙәбеҙ. Һәм күптәр шулай йөрөй ҙә. Әммә халыҡтың "Әҙәм күрке сепрәк" тигәне лә буштан ғына тыумаған икән. Кешенең психологияһы шундай, ул алдында бөхтә кейенгән, үҙен яҡшы ҡараған, специфик еҫтәре булмаған әңгәмәсегә нығыраҡ асылыусан икән. Йәғни, ышанысы тиҙерәк уяна. Мәҫәлән, һеҙ банкка, докторға йәки башҡа хеҙмәтләндереү вәкиленә барып, ҡаршыһына ултырғас, уны яйлап ҡына ентекле күҙәтәһегеҙ, шулай бит. Журналисты иһә әңгәмәсеһе өслөтә-бишләтә тикшереп ҡараусан. Сөнки хәбәрсе тап уның шәхесе, уның эштәре, шәхси тормошо менән ҡыҙыҡһына. Һөйләшеү барышында һинең ҡул тырнаҡтарыңа, кейемеңдәге ниндәйҙер йөйҙәргә, өҫтәлдә ятҡан күҙлегеңә, аяғыңдағы туфлийыңа ҡәҙәр күҙ йүгертә, хатта нимәгәлер артығыраҡ иғтибар итеп тә китә улар. Шул саҡта хәбәрсе үҙендәге бер нәмәнән дә уңайһыҙланмаҫлыҡ булһын. Бының өсөн һин осрашыуға әҙер булырға тейешһең. Кейем, сәс, йөҙ, төҫ - барыһы ла тәртиптә, самалы биҙәнеү, самалы биҙәүестәр ҡулланыу һәм башҡалар әңгәмәселә ыңғай тойғолар уятырлыҡ булһын. Артыҡ асыҡ йәки ҡыҫҡа күлдәктәр, ҡысҡырып торған макияж, экстравагант төҫ кеше менән төрлө темаларға һөйләшергә тейешле булған хәбәрселәр өсөн түгел. Әхлаҡ нормалары эске донъянан тыш, тышҡы ҡиәфәттә лә сағылыш тапһын ул. Быларға өҫтәп, шулай уҡ бер сиктән ашып китмәгән ихласлыҡ, йылмайыу, яғымлы ҡараш. Кешене асам, тип, үҙ тормошоңдо, ситтән алынған миҫалды һөйләү хата. Был инде мәҙәнилек сиктәренән сыға. Минеңсә, әхлаҡлы арбау - журналистың ҡоралы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Журналислыҡ - ул йырсы, бейеүсе, шағирлыҡ һымаҡ уҡ, бары тик талантлылар ғына үҙләштерә торған һөнәр. Әммә бөгөн уны аҙмы-күпме аҡсаһы булған эш урыны йә үҙендең амбицияларынды атҡара торған абруйлы вазифа итеп кенә күреүселәр күбәйеп китте. Ундайҙар хатта редакцияларға эшкә килеп урынлашыу менән үҙен журналист тип таныштырыуҙан да тартынмай. Ундайҙар редакцияларҙа бишалты йыл эшләү менән үҙҙәрен абруйлы премияларға күрһәтә башлаған осраҡтар ҙа булып тора. Ни генә тимә, былдай ҡәләм тирбәтеүселәрҙе уҡыусылар белмәй һәм танымай. Ә әле генә журналислыҡ тураһында үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашыусы Миләүшә Ҡаһармановала (Хәбилованы) беләләр, таныйҙар. Сөнки ул, үҙе әйткәнсә, мәғлүмәт биреү өсөн генә яҙмай мәҡәләләрҙе, ә һәр кемде уйландырырлыҡ, һығымталар яһатырлыҡ, һорауҙарына яуап бирерлек ысын ижад өлгөләре тәҡдим итә. Һәм тап ошондай журналистар Хөкүмәт тарафынан да лайыҡлы баһаланырға тейеш тә инде.**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

*ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ*

# ХӘРБИ ТАБИПТАН...

## журналислыҡҡа тиклемге оҙон юл



**"Киске Өфө" гәзите уҡыусылары отставкалағы медицина хеҙмәте подполковнигы Хәлил Төхвәт улы ҺӨЙӨНДӨКОВтың ижады менән яҡшы таныш. Сәләмәтлек, ғаиләләге тәрбиә, туғандарҙың, кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәре, йәмғиәттәге төрлө әхләҡи күренештәр, дини ҡағиҙәләр тураһында үҙенсәлекле, талантлы яҙмалар авторы ул. Был авторыбыҙҙың уҡыусылар күңеленә туп-тура юл тапҡан яҙмаларын көтөп алабыҙ, ҡыуанып баҫтырабыҙ һәм шундай авторы булыуы менән гәзитебеҙ бик бәхетле тип иҫәпләйбеҙ. Хәлил Һөйөндөковтың да Башҡортостан Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһына тәҡдим ителеүен хуплайбыҙ һәм уны ла был бүләкләүгә лайыҡ тип иҫәпләйбеҙ. Түбәндә - ошо премияға дәғүә итеүсегә өс һорау.**

**➔ Һеҙ беҙҙең гәзиттә иң әүҙем авторҙарҙың береһе. Номер һайын тигәндәй һеҙҙең фәһемле мәҡәләләрегеҙ донъя күреп тора. Һеҙ үҙегеҙҙе журналист итеп тояһығыҙмы?**

- Әҙәби әҫәрҙәр - хикәйә һәм ваҡ повестар яҙырға, ғөмүмән, яҙышырға илле йәште ҡыуа башлағанда ғына тотондом. Иң беренсе "Тау тотҡоно" исемле повесым - ғүмеремдә тәүге яҙған нәфис әҫәр "Шоңҡар" журналында 2003 йылда баҫылып сыҡты. Мин ул саҡта инде 45 йәштә инем. Унан һуң сыға башлаған әҫәрҙәремдең мөхәрририәттәр тарафынан хупланыуына дәртләнептер, ун йыл тирәһе дауамында байтаҡ ҡына нәмәләр яҙып ташлағанмын. Шул ваҡыттарҙа, параллель рәүештә, һәр төрлө мәҡәләләрем дә йыш ҡына сыҡҡыланы. Хикәйәләр ижад иткәндә һәр саҡ журналистарҙың яҙған әҫәрҙәренә ҡыҙыға инем. Ни өсөн? Сөнки улар тормошта, ысынбарлыҡта булған нәмәләр хаҡында яҙа. Уларҙың һәр төрлө аныҡ миҫалдар килтереү ярҙамында береһенән-береһе мөһим проблемаларҙы күтәреүҙәрен күреп, бик йыш ҡына осраҡта ҡыйыулыҡ та талап ителгән ошо һөнәр кешеләрен ниндәйҙер кимәлдә яу яланындағы көрәшсе һымағыраҡ итеп күҙ алдына килтерәм. Сөнки журналистың һәр саҡ кемдәлер тик маҡтап ҡына тормай, ә дөрөҫлөктө, тормоштағы ысынбарлыҡты, йәшәйешебеҙҙә килеп сығып торған һәр төрлө, хатта ифрат киҫкен проблемаларҙы ла матбуғат биттәрендә сағылдырыуы бәғзе берәүҙәргә әллә ни оҡшап та етмәүе мөмкин. Башҡортта "Тура әйткән - туғанына ярамаған", тигән әйтем дә йөрөй бит әле. Аныҡ һорауығыҙға аныҡ ҡына итеп яуап бирергә ниәтем: профессиональ журналист булмауыма ҡарамаҫтан, мин үҙемде журналист итеп тоям, әлбиттә. Кемдер булһа уҡып, үҙе өсөн файҙалы берәй һығымтаға килерлек мәҡәлә яҙыу - минең төп маҡсатым.

**➔ Ижад иткәндә ниндәй жанрға күберәк мөрәжәғәт итәһегеҙ? Ниндәй темаларға яҙыу оҡшай? Үҙегеҙ нимәләр хаҡында уҡырға яратаһығыҙ?**

- Һуңғы йылдарҙа, үҙем дә һиҙмәҫтән, әкренләп журналистикаға юлына баҫа барыуым - тәбиғиҙер. Һәммә кеше, ваҡыт үтеү менән, ниндәйҙер кимәлдә үҙгәреп тора бит. Милләттәштәребеҙҙе борсоған мәсьәләләрҙе күрә һалып, ана шул проблеманы ваҡытында күтәреп алыу - һәр журналистан талап ителеүе хаҡында беләм. Ҡәләме ярҙамында кемгәлер файҙа килтереүҙе беренсе планға ҡуйыусы йәш һәм олораҡ булған яҙыусыларыбыҙҙы ла күреп (дөрөҫөрәге, уҡып) йөрөйөм. Битараф булып ҡалырға ярамаған һәр нәмә, әлбиттә, минең дә күҙ уңында тора. Баштараҡ, оҙайлы хеҙмәтемде әле генә тамамлаған дәүерҙә, башлыса әрме хеҙмәте хаҡында яҙырға тырыша инем. Илебеҙҙәге бөтә тиерлек булған ир-ат әрме аша үтеп тора бит инде. Йәшәйешебеҙҙән һис кенә лә айырып алып булмаған бына ошо әрме темаһы әле булһа ла минең өсөн һуңғы планда түгел. Мәҫәлән, армияла булған "дедовщина"ла тик офицер халҡы ғына түгел, ә, башлыса, өйҙән үк "потенциаль дед", йәғни, хулиган булып тәрбиәләнеп килгән һалдат ғәйепле булыуы хаҡында мәҡәләләрем донъя күргеләне. Әрмелә ҡайсаҡ урын алған суицидҡа, уның төп сәбәптәренә ҡарашымдың да үҙенсәлектәре бар. "Суицидҡа әҙер булған кеше гражданка шарттарында ла үҙенең ошо эшен атҡармайынса ҡуймай", тигән фекер менән йыш ҡына сығыш яһағылайым. Мәҡәләләремдә шулай уҡ табиптар мәсьәләһенә лә иғтибар итәм. Тыштан ғына тыныс, шаян күренгән, ә эстән һәр саҡ үҙенең пациенты хаҡында уйланыуҙан бушамаған табиптарҙың (айырыуса, хирург халҡының) эске кисерештәре хаҡында ла яҙыуға өҫтөнлөк бирәм. Бәғзеләр, бәлки, бына ошо сифатымды, "ҡарға күҙен ҡарға суҡымай", тип тәнҡитләп тә алыуы мөмкин, әлбиттә. Тормош - ифрат та ҡатмарлы. Һәммәбеҙҙең ыңғай яғы менән бер рәттән, хаталарыбыҙ ҙа етерлек бит...

Хәрбиҙәр һәм медицина темаһынан тыш, айырыуса һуңғы осорҙарҙа, туған тел һәм динебеҙ хаҡында йыш яҙа башланым. Телебеҙ именлеге тураһында борсолған авторҙарыбыҙ күплегенә шатланам. Үҙемдең төп һөнәрем тел ғилеменән алыҫ булыуына ҡарамаҫтан, был проблема мине лә үтә борсой. Илебеҙҙә тәрән тамыр йәйгән иң әшәке нәмәләрҙең береһе булған эскелек проблемаһы ла ижадымда ҙур урын биләй. Башҡа күп кенә ҡәләмдәштәрем менән бер рәттән, бына ошо афәткә ҡаршы ғүмерем буйы көрәшәсәкмен, ин шә Аллаһ. Былдай ҙур проблемаға ҡағылышлы мәҡәләләремде "Киске Өфө", "Йәшлек", "Башҡортостан" кеүек абруйлы баҫмаларыбыҙҙа баҫтырам.

"Киске Өфө" гәзитенә килгәндә инде, уны яратмай уҡыу мөмкин түгел. Унда сыҡҡан һәр бер яҙманы иғтибарһыҙ ҡалдырмаҫҡа тырышам. Бәғзе бер авторҙарыбыҙҙың артабан фекер үҫтереүгә "орлоҡ" биреүҙәре оҡшай. Әхмәр Үтәбайҙың, Исмәғзәм Исмәғиловтың һәм башҡа күп кенә ҡәләмдәштәремдең фекерҙәрен айырыуса көтөп алам.

**➔ Һеҙ хәрби табип юлын үткәнһегеҙ. Бөгөн дин юлындағы кеше. Ижад та итәһегеҙ. Былар барыһы ла һеҙҙә, бер кешелә нисек һыйыша?**

- Ҡасандыр Ғәлимов Сәләм үҙенең "Ғүмер" исемле поэмаһында "шахтермылыр, инженермылыр ул, конюхмылыр, әллә һунарсы..." булған ябай совет гражданины хаҡында яҙған. Меңәрләгән кеше тейәлгән пассажир поезын ҡотҡарыу өсөн үҙ ғүмерен ҡорбан иткән ябай бер совет кешеһе тураһындағы был әҫәрҙе уҡып тетрәнмәгән милләттәшебеҙ юҡтыр. Һөнәрең буйынса кем генә булыуыңа ҡарамаҫтан, ысын совет патриоты булырға кәрәк, тигән фекер һалынған был поэмаға. Тап шундағы һымағыраҡ, минең хәҙерге инаныуымса, хәрбиме һин, әллә табипмы, яҙыусымы, журналист, йә башҡа ябай һөнәр кешеһеме, һәммәбеҙ ҙә иң тәүҙә илен, халҡын яратырға, улар хаҡына эшләгән эштәрен дә яратып башҡарырға тейеш. Ә бына бер кешелә бер нисә һөнәр бер юлы "һыйышыуы" һәр кемгә лә хастыр ул. Матур йырлаған яҙыусы һәм шағирҙарҙы, оҫта итеп бешерә белгән спортсыларҙы, һыҙҙырып музыка ҡоралдарында уйнаған фәнни эшмәкәрҙәрҙе беләм. Бер нисә һөнәрең булыуы, яҙышырға тотонған кешеләр өсөн тик ярҙам ғына, тип уйлайым. Әлеге әйткәндәй, әрме, медицина темһына ниҙер яҙыу өсөн һәр төрлө материалдарҙы, аныҡ миҫалдарҙы әллә ҡайҙан эҙләйһе түгел. Дини темалаға яҙғанда, әлбиттә, Ҡөрьән аяттарына, Аллаһ илсеһенең сахих хәҙистәренә таянам. Үҙем тел буйынса махсус белемем булмау сәбәпле, яҙған ваҡытта теге йәки был һүҙҙә, һөйләм төҙөлөшөндә хаталар ебәрмәҫ өсөн йыш ҡына ҡәләмдәштәрем ярҙамы менән файҙаланым. Миләүшә Ҡаһармановаға йә Хәйҙәр Тапаҡовҡа консультация өсөн мөрәжәғәт итәм. "Промышленность", "политика", "экономика", "культура" һымағыраҡ һүҙҙәрҙе беҙгә элек мәктәптә шул көйөнсә өйрәттеләр бит инде. Шунлыҡтан, бәғзе мәл Илгиз Ишбулатовты маҙаһыҙлап алам. Әхмәр Үтәбайҙы айырыуса йышыраҡ борсойом. Ҡәләмдәштәрем бер ваҡытта ла ярҙам итеүҙән баш тартмай, әлхәмдүлиллаһ. Әмир ағай Әминев: "Яҙыусы яҙмай тора алмаҫҡа тейеш", - тигәйне бер саҡ. Тап шуның һымаҡ, хәҙерге мәлдә ниндәйҙер булһа берәй көнүҙәк темаға мәҡәлә яҙғым килә лә тора. Дин юлындағы кеше тигәндәй, һуңғы осорҙа башлыса журналистика жанрына өҫтөнлөк биреүем дә тап бына шуның менән бәйлелер, тип уйлайым. Ҡөрьән-Кәримдең "Шағирҙар" сүрәһендә Аллаһы Тәғәлә, тик булған нәмәләрҙе һөйләү һәм унда Раббыбыҙҙы йыш иҫкә алыу зарурлығы хаҡында әйтә. Шуға күрә лә, ниндәй генә донъя проблемаһы хаҡында яҙһам да, уларға динебеҙ ҡанундары күҙлегенән сығып ҡарарға тырышам. Китап нәшриәтенә биргән бер мәҡәләләр йыйынтығының да тәүге киҫәген "Тормош һабаҡтары" тип атаһам, икенсеһен, Мифтахетдин Аҡмулланың һүҙҙәре менән, "Иң әүәл кәрәк нәмә" тип исемләнем.

**ШУЛАЙ ИТЕП, комиссия йәмәғәт ойошмаларын, хеҙмәт коллективтарын һәм айырым кешеләрҙе Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияға тәҡдим ителгән авторҙар ижадын тикшереүҙә ҡатнашырға саҡыра. Үҙ фекерегеҙҙе, тәҡдимегеҙҙе һәм иҫкәрмәләрегеҙҙе матбуғат биттәрендә, телевидение һәм радио программалары йәки түбәндәге адрес буйынса хат аша еткерергә мөмкин: 450076, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, 10-сы ҡат, Башҡортостан Журналистар союзы. Телефон-факс: 276-42-66. Эштәрҙе тикшереү 27 сентябргә тиклем дауам итә.**

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

**✓ Буҙатты сыбыртҡыланылар. Унда ла баш һалмаға, таш ҡәлғәгә ҡамап индереп, баһраулап, ашһыҙ-һыуһыҙ йонсотоп, аяҡтарына бығау һалдылар. Был көйө ул өйөрөн һаҡларлыҡ, эйәртерлек хәлдә түгел, үҙен дә яҡлай алмай.**






Тағы ике көнлөк юлда юлыҡҡан ауылда ла ҡышлау әҙләгән булып ҡыландылар, әммә уларға Ҡазыбәк ерҙәренә барып етеү кәрәк ине. Унда барып етеүгә тағы ике тәүлектән ашыу ваҡыт китте. Өҫтөндә туҡтауһыҙ туҙан осоп йөрөгән сикһеҙ даланың уйпатһыу бер урынында, һауаһы кеүек үк болғансыҡ һыулы йылға инләп, йәйелеп ятҡан ине атаҡлы ҡаҙаҡ ханы Ҡазыбәк ауылы. Бында тәпәшәк тирмәләрҙән тыш балсыҡтан ҡатырып эшләнгән саман өйҙәр ҙә, өңөп яһалған ер аҫты торлаҡтары ла бар ине. Хатта ауыл тирәләй һыу япмаған яҡтан таш-балсыҡтан күтәрелгән ҡәлғә лә ҡалҡҡан. Бөтөн был ҡоролмалар араһында халыҡ ҡырмыҫҡа кеүек ҡайнашып тора. Эҫе ҡояш аҫтында йөрөүҙәренә ҡарамаҫтан һырмалы бишмәттәрен ныҡ быуып кейгән ҡатын-ҡыҙ, йонсоған ҡиәфәттә усаҡ тирәләрендә ҡайнаша, балалар сыр-сыу килә. Арыраҡ кейеҙ баҫҡан, тәгәрмәс яһаған, тимер сүкегән, балсыҡ һуҡҡандар һәм тағы ла Көнбикәгә аңлашылып етмәгән әллә ни төр кәсеп менән булашыусылар күҙгә салына. Һораша торғас, юлаусыларҙы байҙың өлкән хеҙмәтсеһенә алып килделәр. Ул баштан аяҡ юл туҙанына күмелгән был икәүгә күҙ һалды. Йөҙ һыҙаттарының башҡалығы ла аңғарылды.

- Кемдәр?

- Истәк, - Айыухан ҡиәфәтенә нисек тә күндәмлек, вайымһыҙлыҡ бирергә тырышты.

- Ҡайҙан?

- Атап ҡына әйтер төйәгебеҙ юҡ. Күптән ер гиҙәбеҙ.

- Ниндәй һөнәрегеҙ бар?

- Көтөү көтәбеҙ. Үткән бер ҡыш Ертай байҙа йылҡы ҡарап ҡышланыҡ.

Яҫы яңаҡтары ялтырағансы ҡояшта янған тәпәшәк ир саллана башлаған һаҡалын семтекләй биреп торҙо ла, ярты битен көләпәрәһе эсенә йәшереп бөршәйгән Көнбикәгә төртөп күрһәтте:

- Был нимәгә эшкинә?

- Ул яҡшы бешерә, ҡаҙан тирәһендәге бөтә йомошто белә. Ауырыу туғаным, янымда булһын инде, телһеҙ.

Ҡаҙаҡ, кәүҙәләһенең артына һырына барған был шөкәтһеҙ генә малайға ҡарап, тағы икеләнде:

- Аҡылы теүәлме?

- Теүәл. Зыян булмаҫ, әкә, эргәмдә йөрөһөн инде.

- Ярай, - унан кемгәлер фарман да бирҙе, - Жамбыл! Алып кит бынауҙарҙы! Быныһы көтөүгә, быныһы... бергә шунда.

Нәҙек билен яҫы ҡайыш менән өҙәргә быуған, Жамбыл тигән ҡоралы йылғыр әҙәм уларҙы эйәртеп алып китте, барған ыңғайы эйәреүселәренә һөйләп барҙы:

- Тәртиптәр ҡаты. Бер баш мал юғалһа - илле ҡамсы, көтөүҙе ташлап китеүселәр табылып, бәйләп далаға ташлана.

Уның әйткәндәренең яртыһын Көнбикә аңламаны, әлбиттә. Хәҙер килеп, ул үҙенең нимә уйлап был яҡтарға юлланыуына хайран ҡалды. Ул бит ҡаҙаҡ тәбен аңламай ҙа икән. Был турала уйлаған ҡайҙа? Бынау Айыухан артынан юлланмаһа, ҡалайтыр ине икән? Әллә был тарафтарға килеп тә етә алмаҫ ине.

* * *

Өйөргә яҡынлашҡан һайын, йөрәге нығыраҡ дарҫланы Көнбикәнең. Ул бында, ел генә килеп етерҙәй ҡаҙаҡ далаларында, аҙашып китҡән ҡан туғандарын тапҡандай булды. Етер-етмәҫтән менеп килгән менгеләре кешнәп ебәрҙе, уларға далалағыларҙан яуап булды. Малдың малы, күрәһең, ырыуҙаштарын таныны. Танымай һуң, үҙҙәренең инәләре лә шул өйөргә йөрөйҙөр бит.

Таный уларҙы Көнбикә лә. Ана, анауы ҡола бейәне былтыр үҙе ҡолонлатты. Сысҡан һыртлы, тәпәш кәүҙәле йылдам малҡай. Атаһының әйтеүенсә, Уралға килеп сыҡҡан ҡырағай аттар өйөрөнән айырып алып ҡалынған йылҡы тоҡомо. Уның эргәһендәге оҙон ботло һомғол көрән бейә тоҡомо ҡасандыр атаһының олатаһына ғәрәп илсеһе тарафынан бүләк ителгән, тиган тарих йәшәй. Ә инде өйөрҙөң күп өлөшөн биләгән буҙ төҫтәге бейәләр - өләсәһе һөйләгән риүәйәттәрҙәге Аҡбуҙат тоҡомо, шуның ҡомарҡылары. Улар кәүҙәгә лә эре, өйрәтеүгә лә барыһыҙ. Ә инде бер ҡулға эйәләштереп алһаң, яҡҡа баш бирмәҫ, яуҙа ташлап китмәҫ тоғро юлдашҡа әйләнәләр. Өйөр башы, ғифрит кәүҙәле Буҙат та шулар ҡанынан. Буҙат, тигәндән... Ҡайҙа һуң ул?

Көнбикә һаҡлыҡты ла онотоп, менгеһенең ҡабырғаларын төйә-төйә, өйөрҙө уратып юрттырҙы. Унынса, өйөргә яттар килеүен аңғарыу менән үк Буҙат өйөрөн тирәләп талпына башларға, ҡәнәғәтһеҙлеген белдереп ер тетрәтеп кешнәнәп ебәрергә тейеш ине лә бит. Тик уның юлын быуырға тип һырыныышып тупланған бейәләр араһынан әле бер, әле икенсе айғыр атылып сығып, ҡолаҡтарын ҡамсылатып ынтылғандай итте лә, һыбайлы ҡулында оҙон сыбыртҡы һауа телеп һыҙғырып шартылдауға, кире боролоп китте.

Ҡыуып алып киленгән өйөр бындағы йылҡыға ҡушылған, күрәһең, даланың күҙ күреме ерен тотошлайы менән ҡаплап һибелгәндәр. Өйөрҙөң осона сығып етерлек түгел. Тик Көнбикә өмөтөн өҙмәне. Туҡтауһыҙ осоп торған саң ҡатыш ҡом күҙҙәренә тулһа ла, сыбар өйөрҙән ҡарашын күсермәне. Хәтһеҙ ваҡыт йөрөгәс, башҡалар араһынан айырылып ҡалҡып торған дәү һыртты аңғарҙы. Менгеһен, ашыҡтырып, шунда ҡыуҙы. Етәрәк, эйәренән шыуып төшөп, айғыр ҡаршыһына йүгереп килде лә... ҡатып ҡалды:

- А-аһ! Буҙат! Буҙа-ат... - ҡыҙ устары менән ауыҙын томаланы, әйтерһең, үҙен артыҡ һүҙ әйтеүҙән тыйҙы. Буҙат иһә бар донъяға битараф көйө рыя ҡарап тора бирҙе. Алғы аяҡтарына ағас бығау һалынған, киң һырты ҡамсы эҙҙәренән сыбарланған. Таланған. Үнәсендә, күкрәк тәңгәлендә сей яралары асылып, ҡанһырап тора. Һынар күҙе әллә һытылып аҡҡан, әллә төртөлгән - ябылып ҡутырлаған. Аһ, Буҙат...

Янағына үрелгән ҡулдан тартылып, ялбыр ялдарын һелкетеп, артҡа шылмаҡсы ине, быгаулы аяҡтарын ҡушарлап һикергән ыңғайы улары аҫтынан ҡара ҡан юлаҡтары йүгерҙе.

- Хоҙайы-ым... Эй, Хоҙайым... - әсе йәштәренә тығылып һыҡраны Көнбикә, - Ер йотһон... Ер йотһон һинә ҡулдары күтәрелгәндәрҙе...

Икенсе тапҡыр ынтылғанда айғыр тайпылманы. Кәүҙәһен тулҡын йүгергәндәй итеп дерелдәтте лә, һаҡ ҡына моронон һуҙып, башта устарын, унан битен еҫкәне.

- Таны мине, Буҙат, таны... Был бит мин - Көнөкәй. Көнөкәй! Ишетәһеңме? Көнөкәй һине алып ҡайтырға килде...

Уларҙы Айыухан шул хәлдә килеп тапты. Миктәгән айғырҙың муйынына һырынып буҙлаған ҡыҙҙы саҡ ысҡындырып алды.

- Көнөкәй! Баш юҡ һиндә бөтөнләй! Хәҙер берәйһе күрһә!

- Күрһенме? Буҙатты нишләткәндәр!

Айыухан да малҡайға һыҡранып ҡараны:

- Ошолай булыры билгеле ине. Ындай айғырҙы улар башҡаса ҡалайтып буйһондорһон.

- Мин уны был хәлдә ҡалдырмайым!

- Көнөкәй! Хәҙер үк атыңа мен!

- Юҡ!

Әлеге мәлдә ҡатылыҡ менән алдырып булмаҫын аңлаған егет тауышын йомшарта төштө:

- Әле тота килеп кенә бер нәмә лә эшләп булмай. Аңла. Төнгә, башҡалар яткас, айғырҙың быгауын сисербеҙ. Шулайтып яйлап хәл индерергә кәрәк уға. Был хәлдә алыҫҡа китә алмаясаҡ. Мал һауыҡҡан арала башҡаһын ниәтләрбеҙ.

Был һүҙҙәрҙән бер аҙ йәйға килде ҡыҙ ҙа. Айғырҙың яңаҡтарынан тотоп, һау күҙендәге сағылышына өндәште:

- Саҡ ҡына сабыр ит, йәме, Буҙатҡайым. Саҡ ҡына...

Уларҙы өлкән көтөүсе Итбай ажғырып ҡаршыланы:

- Һин был бөкөрөнө бағырға килденме, әллә малдымы?! Ә һин ҡайҙа рөхсәтһеҙ саптың? - үҙе шул ыңғайы яндарынан елдереп үтеп барышлай ҡулындағы ҡамсыһы менән киҙәнеп, Көнбикәнең арҡаһына һыҙырып үтте. Көтөлмәгәнлектән албырған ҡыҙ эйәренән ҡоланы ла төштө. Был хәлдән Итбай артынан килгән башҡа көтөүселәр, менгеләрен бер тирәлә тапандырып, эйәлә-бөгөлә көлдө:

- Атта ултыра белмәгән көтөүсе килгән!

- Истәк эйәренә тотона алмай! Һа-һа-һа!

- Ер ҡорто!

- Һо-һо-һо!

- Ах-ха-ха!

Айыухан, нисек кенә эсе өҙөлһә лә, әллә ҡауышауҙан, әллә ҡурҡыуҙан һаман ерҙә йөҙтүбән ятҡан Көнбикәгә ярҙам итмәне, ә өҫтән ҡарап екерҙе генә:

- Мырҙан! Тор! Мен атыңа!

Шунда ғына ҡыҙ үҙенең хәҙер Мырҙан икәнлеген иҫенә төшөрөп ҡалҡынып, өҫтөн ҡаҡҡылай-ҡаҡҡылай йүгәненә сыбалып йөрөгән атына юлланды. Ауыртыуҙы тойманы, сөнки арҡалағы ҡайыры аша ҡамсы теле үтмәгәйне. Йылдам ғына менеп, Айыуханға йәнәшләнә. Уның бысраҡ ауыҙ-моронона ҡарап һаман көлөштөләр, төрттөрөп, шаяртып маташтылар әле.

Көн оҙоно йылҡыны офоҡта түбәләре генә ағарып күренгән тауҙар яғына ҡыуҙылар. Далала үлән ҡыуарып ҡороғас, шул тауҙар аҫтындағы һутлы ерҙәргә алып бармаҡсылар икән. Йылҡы ҡышты тауҙар аҫтында сығасаҡ. Яҙ тыуыуға, ҡабаттан далаға ҡыуасаҡтар. Быларҙың көн итмеше лә, уларҙыҡы кеүек үк, мал туҡлығы артынан эйәреп йөрөүҙә икән.

Көнбикә-Мырҙан өйөрҙөң иң артынан килә. Буҙаттың да арттағылар рәтендә булырын белә. Быгауҙары менән һикерәнләп барыу уның тиҙлеген ҡолонло бейәләрҙекенән дә йәлата. Былыныа өҫтәп, хужалыҡҡа дәғүә итеүсе ҡола айғыр тенкәһенә тейә. Артта ҡалғандарҙы тешләп-тибеп тиҙләткән ыңғайы, Буҙатты айырыуса рәхимһеҙ талай. Айғыр арҡҡы аяҡтары һәм тештәре менән генә ҡаршы тора. Ҡаса ла, һөжүм итә лә алмай. Етмәһә, ҡаҙаҡ көтөүселәренең ҡамсылап, баһраулап төйгән арҡаһы ла яҙылып тибешергә бирмәй. Быларҙы күҙәтеп барған Көнбикә, Буҙатҡа ябырылғандарҙы аңғарыу менән, сыбыртҡыһын шыйтлатып араларға ташлана. Оло өйөрҙө әллә нисәгә бүлгеләп, бейәләргә талашҡан йәш айғырҙар, берәгәй өйөр башлығы булмауҙан файҙаланып, ни теләһәләр, шуны ҡыланалар ине. Йәйы сыҡҡан һайын өйөрөн ҡайырып алып китергә ынтылған, ҡороҡларға маташыусыларҙы дала буйлап һөйрәтеп йөрөткән, танау ярыҡтарынан ҡайнар тын бөркөп, алғы тояҡтары менән ер сапсып ҡуржыған, көртә-ҡоймаларҙы күкрәге менән емерә төртөп сығып сапҡан был бәһлеүән күк айғырҙың көрен ҡайтарабыҙ тип көтөүселәр ҙә хаттин ашты. Айғырлы өйөрҙәр алып килеп ҡуштылар ҙа, башлыҡтар араһында һуғыш ҡупҡанда янаҡлап килеп, Буҙатты сыбыртҡыланылар. Унда ла баш һалмағас, таш ҡәлғәгә ҡамап индереп, баһраулап, ашһыҙ-һыуһыҙ йонсотоп, туҡмап хәлһеҙләндереп, аяҡтарына быгау һалдылар. Был көйө ул өйөрөн һаҡларлыҡ, эйәртерлек хәлдә түгел, үҙен дә яҡлай алмай.

Айғырҙың айбарланып ырғып сабырға маташыуын, ҡәҙерле өйөрөнән ҡалмаҫҡа, бейәләренән, ҡолондарынан күҙ яҙҙырмаҫҡа булып алаҡланғанына, сит айғырҙарҙан көнләшеп асырғанып кешнәгәненә ҡарап, йөрәге ҡыҫылды Көнбикәнең. Ҡайһындай ҡәҙрәтте, ерһыуының, ырыуының даны, атаһының ғорурлығы булған тоҡомло малды былай тәләфләгән дошмандарының боғаҙына барып йәбешеүҙән көскә тыйылып йөрөнө.

Көн эңерләүгә туҡтап тамаҡ бешергән, ятыр урындар әҙерләгән мәшәҡәтле мәлдә башҡаларҙан күҙ яҙҙырып, айғыр янына килә һалып та етте ҡыҙ. Хәнйәре менән оҙаҡ ҡына ышҡып, быгауҙарҙың ике яғынан нығытылған сүс арҡандарҙы ҡырҡты. Унан тояҡтарҙың итен ҡырып батып ингән ағастарҙы ипләп кенә айырып алды. Айғыр сабырһыҙланып, оҙон ялдарын туҙытып, башын һелккеләне, бышҡырҙы, әммә ҡаршылыҡ күрһәтмәне. Ул был еҫте, был ҡулдарҙы, иркә тауышты таный, таный ғына түгел, ошо нәҙекәй генә һынды күреү менән, ҡаны ҡайнап ҡайҙалыр ынтылғыны, осҡоһо килә башлағайны.

Тояҡтары ысҡынған мал, аяҡтарын алмаш-тилмәш күтәргеләп, бер атҡа, бер алға китеп ҡараны. Унан, азатлыҡты тойғас, ҡойроғон ҡәпсәйтеп, көбөләй башын ҡаҡайтып, муйынын дуғаландырҙы ла, ябыҡҡан, әммә мөһабәтлеген юғалтмаған кәүҙәһен мөлкөлдәтеп, еңел юртып китте. Шул ыңғайы юлына сыҡҡан теге ҡола айғырҙы күкрәге менән бәреп тә йыҡты. Теге һе тыбырсынып тороп маташҡансы, төнгө даланы яңғыратып кешнәп, хужалығын барларға юлланды.

**(Дауамы бар).**

**✓ Ғөмүмән, йәшәйештең ҡанундары ябай бит ул: кеше өлөшөнә үрелмә, зыян итмә, алдашма. Бөтә изге китаптарҙың нигеҙендә шулар ята. Әллә ниндәй асыштар яһарға түгел, ошоларҙы йөрәккә һеңдереү мөһим.**



ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# ӘҘИП - УЛ...

## үҙе бер донъя, хатта йыһан



**Күренекле шағир, прозаик, Учалы районының Муса Мортазин исемендәге премия лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Мәүлит ЯМАЛЕТДИНОВ Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим ителде. Ошо айҡанлы уға гәзитебеҙ уҡыусыһы, башҡорт теле уҡытыусыһы, Учалы районы һәм ҡалаһының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Мәрзиә Солтанбаева һорауҙар менән мөрәжәғәт итте.**

**➔ Мәүлит Байгилде улы, һеҙҙе шағир, яҙыусы ғына итеп түгел, ә тюркология һәм тел ғилеме буйынса бик үҙенсәлекле фекер әйткән ғалим, фольклорсы, хатта сәсән тип тә ҡабул итәбеҙ. Бындай киң эшмәкәрлек, әлбиттә, һеҙҙең күп уҡыу, эҙләнеүҙәр, ҡыҙыҡһыныусанлыҡ һәм битараф булмауығыҙ һөҙөмтәһелер?**

- Үҙен ысын мәғәнәһендә әҙип итеп тойған һәр ижадсы халыҡ тормошонон, йәмғиәт үҫешенең һәр ваҡ-төйәгенә ҡәҙәре белергә, үҙен үҙе камиллаштырырға тейеш. Был - аксиома. Башҡорт халҡы - 200 миллионлы төрки ҡәүеменең айырып алғыһыҙ бер өлөшө, хатта уның алғасҡыһы, тип әйтергә була. Шуға күрә, башҡорттоң ғына түгел, ә шул оло төрки донъяһының мәҙәниәтен, телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, әҙәби традицияларын, ауыҙ-тел ижадын (хәл ҡәҙәренсә) өйрәнеү фарыз. Әлбиттә, был үҙенән-үҙе генә бирелмәй, бының өсөн ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, белмәгәненде белергә тырышыу, өр-яңы мәғлүмәттәр эҙләү буйынса хәтһеҙ эш башҡарырға тура килә. Унан һуң, төрки донъяһы, төрки мәҙәниәтенән тыш, донъя мәҙәниәте, уның классик әҙәбиәте лә бар бит әле. Уларҙы ла белеү әҙип өсөн шарт булып тора. Сөнки үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнау, башҡа мәҙәни традицияларҙы һанға һуҡмау ҙа бер яҡлылыҡҡа килтерә. Ғөмүмән алғанда, әҙип - ул үҙе бер донъя, хатта йыһан, тип әйтергә була. Әлбиттә, мин ысын әҙипте, ысын әҙәбиәтте күҙ уңында тотам. Әҙәбиәтебеҙ тарихында был өлкәлә өлгө алырлыҡ шәхестәребеҙ байтаҡ. Шуларҙың шәхси тормошонан, әҙәби мираҫынан өҙлөкһөҙ өйрәнергә, белем кимәлеңде арттырырға ғына кәрәктер.

**➔ Бөгөн беҙ бөтә йәмәғәтселек иғтибарын һәм власть даирәләрен башҡорт телебеҙҙе, ғөмүмән, туған телдәрҙе ҡурсалауға йәлеп итергә тырышабыҙ. Әммә әллә ниндәй уңыштарға өлгәшкән юҡ әле. Ошондай шарттарҙа беҙҙең халыҡҡа ни эшләргә, һаман да туған телде өйрәнеүҙе, уҡытыуҙы властағыларҙан даулауҙы дауам итергәме, әллә икенсе төрлө саралар эҙләргәме?**

-Бөгөнгө көндә тел мәсьәләһе - иң ныҡ борсолоу тыуҙырған уртаҡ проблема. Глобалләшеү тигән күренеш милли телдәргә, уның менән бергә милли мәҙәниәттәргә емергес һөжүмен башланы. Беҙ уның тәүге емештәрен тирәбеҙ бөгөн. Ул артабан тағы ла аяуһыҙыраҡ буласаҡтыр, тип фаразлана. Шундай шарттарҙа халыҡ үҙенең теле өсөн үҙе көрәшергә тейеш, тип уйлайым. Әлбиттә, тура килгәндә, закон статьяларына таянып, ҙур урын биләгән вазифалы кешеләрҙән дә талап итеү фарыз. Бына ошо көндәрҙә төрлө райондарҙа депутатлыҡҡа кандидаттар йышланы. Уларға тел тураһында, уның киләсәге тураһында урындарҙан һорауҙар биреүселәр булдымы икән? Беҙҙә бит шулай ҡуйылған: депутат булып үтеү менән халыҡтың ихтыяжы ла, биргән вәғәҙәләре лә онотола. Әлбиттә, халыҡ төрлө ойошмалар төҙөп (мәҫәлән, Ағинәйҙәр ҡоро), тел өсөн көрәшергә маташа, ләкин ул юғарыла ултырғандарҙың күтәрмәләүҙәренә мохтаж - шуны онотторға ярамай. Ә әлеге сәйәсәттең ни менән барып тамамланырын күҙаллауы бик ауыр, уны тик Алла ғына белә инде...

**➔ Мосолман донъяһында Һеҙ Ҡөрьән-Кәрим хәҙистәрен шиғри юлдарға һалған берҙән-бер автор. Бындай изге эшкә тотонорға нисек йөрьәт иттегеҙ?**

- Ҡөрьән сүрәләрен шиғри ҡалыпҡа һала башлауыма 25 йылдан ашты. Әлеге көндә 25-ләп сүрә ҡалды (урта өлөшө). Уны тағы ла 1-2 йылдан тамамлармын, тип өмөтләнәм. Унын һаулыҡҡа һәм илһам сығанағының урғылып тороуына бәйле. Әйткәндәй, сүрәләрҙең шиғри интерпретацияһы фәҡәт башҡорт телендә пәйҙә булыуы минең өсөн ҡыуаныс һәм ғорурлыҡ. Уның нигеҙендә башҡа төрки телдәргә лә тәржемәләр булыр, иншалла. Йәнә шул: ошо "Ҡөрьән сүрәләренә шиғри интерпретация" китабы телебеҙҙе һаҡлаусы бер изге китап буласағына иманым камил, сөнки дингә ылығыусылар күбәйә, йылдар үткән һайын күберәк заттар әлеге китапты уҡыясаҡ. Был үҙенән-үҙе телебеҙҙе һаҡлаусы мөһим сығанаҡҡа әүереләсәк, тип уйлайым. Һәр хәлдә, шуға ышанғы килә.

ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*

### Ашнаҡсы

Еңеү байрамы алдынан һуғыш ветеранын класс сәғәтенә саҡырҙыҡ. Ул юбилей айҡанлы бирелгәндәрен түгел, яуҙа алған берҙән-бер миҙалын тағып килгәйне. Әңгәмәләшеү, аралашыу бик тә йылы, ихласлыҡ шарттарында үтте. Балалар береһе икенсеһен уҙҙырып, бүлеп, төпсөнәләр генә. Осрашыу аҙағында бер малай, олатай, был награданы ни өсөн алдың, тип һораны.

- Һуғышта мин ашнаҡсы булдым бит, балалар. Ҡашығаяғымды шауҙырлатып Сталинградтан Венгрияға ҡәҙәр барып еттем. Мәлендә өлгөртөп аш бешергән өсөн бирҙеләр мыны, маршал Василевский үҙе тапшырҙы. - Ҡәҙерлелер, йөҙө һиҙелеп тоноҡланған, таға барып сепрәге төҫһөҙләнеп бөткән миҙалын һыйпай биреп ҡуйҙы.

- Кемдәрҙе ашаттығыҙ инде? - тигән сираттағы бер ҡатлы, мәғәнәһеҙ һорауға һүҙҙең йәбен, рәтен белмәгән ауыл ҡарты юғалыңҡырап ҡалды башта, шунан силәгенә күрә ҡапҡасы, тигәндәй, былай тип яуапланы.

- Мин бит гел алғы һыҙыҡтың тылында йөрөнөм, осраҡлы ылауға палиуая күхнәмде тағып. Асыҡһалар, яныма килеп, беҙҙекеләр ҙә ашап китәләр ине... нимесләр ҙә...

Бөтә класс менән дәррәү көлөп ебәрҙек, беҙгә ҡунағыбыҙ ҙа ҡушылды. Совет һалдатының һуғышта дошмандың тамағын ҡайғыртып, уны һыйлап йөрөмәгәнлеге билдәле, шулай ҙа ер йөҙөндә ике демократик һөнәр бар - медицина хеҙмәткәре һәм ашнаҡсы. Уларҙың изге бурысы - кешене дауалау һәм ашатыу. Кем булыуына ҡарамаҫтан.

### Әҙәм ҡәҙере

Бәлйерәп бөткән, ныҡ бирешкән, таяҡҡа таянған ул ҡартты гел генә урамда осрата инем: иртәнсәк, төш мәлендә һәм кискеһен. Кейгән кейеме арзан булһа ла, таҙа, үтекләнгән, муйынында галстук. Ҡарашында ихтыяр көсө сағыла, кәүҙәһен тура тоторға тырыша. Тротуар ҡырлатып тирә-яғына ҡарамай атлай, бер кемгә иғтибар ҙа итмәй, уны ла күҙгә элеүсе, туҡталып сәләм биреүсе, хәлен һорашыусы юҡ. Тормош тарафынан, халыҡ тарафынан онотолған әҙәм. Һуңынан белдем, ул ваҡытында ҡала башҡарма комитеты рәйесе вазифаһында оҙаҡ йылдар эшләгән, ҡаланы үҫтереүгә, иҡтисадын нығытыуға ҙур өлөш индергән, тырыш, эшсән, принципиаль кеше булған. Был яңғыҙаҡ ҡартты бер йүнәлештә ылғый осратыуымды ла асыҡланым, пенсияһы бәләкәй, йәшәү шарттары насар, тәғәмләнеүе наҡыҫ булғанлыҡтан, уны бер ашханаға беркетеп ҡуйғандар икән, тегенең бар шөғөлө көнөнә өс тапҡыр шунда барып туҡланыу, йәғни хәйерсе аҙығын ашау...

Яҙмыш ҡайһылай ҙа рәхимһеҙ, ҡаты хөкөм яҙған маңлайына, ҡаланы төҙө лә шул ҡалала фәҡир кимәлендә тереклек ит инде, күтән һурпаһын һемер! Ә ул бит мәлендә кеҫәһен ҡалынайтыуҙы, байыуҙы маҡсат итеп ҡуймаған, әхлаҡ идеяларына ярашлы иң әүәл башҡаларҙы ҡайғыртҡан.

Хәҙер ҡарт юлымда тап булмай. Үҙенең бәләкәй генә өкәлтәгендә шау-шыу ҡуптармай, башҡаларға бәләһен һалмай, вафат булып ҡалған. Үлгәс, ҡаланың бер урамына уның исемен биреп ҡуйҙылар. Тере саҡта күҙгә эленмәһә лә кешенең ҡәҙере үлгәс кенә беленә, тигәндәре шулдыр...

ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# ШИҒРИӘТ - ТОТҠАН ДИНЕМ

**Салауат ӘБҮЗӘРҙе беҙ мисәүгә өс ат еккән ижадсы итеп беләбеҙ. Төпкә егелгәне - шиғриәт, яндауында килгәндәре - драматургия һәм проза. Уның "Ғәмәл дәфтәре" тигән шиғырҙар йыйынтығы Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим ителде. Ижадсыға гәзиттең традицион өс һорауы менән мөрәжәғәт иттек.**

**➔ Салауат, мин бер мәл электричкала барғанда дуҫыбыҙ, ҡәләмдәшебеҙ, мәрхүм Рәмил Ҡолдәүләттең нисек шиғыр яҙыуына шаһит булдым. Өс строфа шиғыр ижад итер өсөн ул бер дәфтәр самаһы яҙҙы: бер яҙҙы, бер сыймаҡланы, һүҙҙәрен алмаштырҙы, бер строфаның әллә нисәмә вариантын теҙҙе, сағыштырҙы, шунан һуң ғына үҙе иң яҡшыһы тип тапҡанын ҡағыҙға төшөрҙө. Һөҙөмтәлә бынамын тигән шымарған, камил, ысынъяһау ынйы килеп сыҡты. Сер булмаһа, һин нисек ижад итәһең: шиғыр һиндә иң тәүҙә фекер, мәғәнә, образ булараҡ барлыҡҡа киләме, әллә бөтөнләй башҡасамы?**



- Шиғыр минең өсөн көтмәгәндә бирелгән бүләк һымаҡ. Шул турала яҙайым әле, тип уйлап йөрөгәнем юҡ. Кире адресһыҙ был бүләк өсөн кемгә рәхмәт әйтергә лә белмәйем. Ғәҙәт буйынса, Хоҙайға рәхмәт, тим.

Ҡайһы саҡта оҙаҡ ҡына "бүләк" алмай йөрөгән саҡтар була. Ҡәләм алып, сыймаҡлап ҡарайым, килеп сыҡмай ҙа ҡуя. Хет үлтер, йән ҡабул итерлек бер юл да яҙылмай. Ә ҡайһы саҡта бер-ике сәғәт эсендә өс-дүрт шиғыр тыуа, күңел кинәнес кисерә.

Ғәжәп, йәй айҙарында ҡыш тураһында, яҙ мәлендә көҙ хаҡында шиғырҙар килеп сыға. Ундай саҡтарҙа, "күк почтаһы" һуңлап килде, тигән булам.

Унан, шиғырҙы ҡат-ҡат төҙәткеләмәйем, нисек тыуған, шулай ҡала...

Әлбиттә, заказ буйынса яҙылған шиғырҙар ҙа була. Уларын тырышып-тырмашып яҙһаң да йөрәк ҡабул итмәй барыбер.

**➔ Шиғыр китабыңдың исеме "Ғәмәл дәфтәре" тип атала. Үтә лә яуаплы, ҙур мәғәнәгә эйә атама, аңлауымса, бындай дәфтәргә барлыҡ ғәмәлдәрең яҙылырға тейештер. Һин уға ниндәй мәғәнә һалдың?**

- Эйе, ғәмәл дәфтәренә кешенең фани донъялағы бөтә ҡылыҡтары теркәлеп бара, ти, динебеҙ. Бер шиғырымда мин былай яҙғайным:

*Намаҙлығым - ап-аҡ ҡағыҙ,*
*Йырҙарым - доға минең.*
*Табынғаным - әҙәбиәт,*
*Шиғриәт - тотҡан динем.*

Нисек кенә юғары яңғырамаһын, әҙәбиәт - минең яҙмышым. "Ғәмәл дәфтәре" китабы иһә әлегә тиклем йәшәлгән ғүмеремдең сағылышы. Был дәфтәргә һуңғы нөктә ҡуйылмаған әле, тип өмөтләнәм.

**➔ Беҙ һине дүрт бала атаһы итеп беләбеҙ. Уларҙы нисек тәрбиәләйһең? Нимә генә тимә, хәҙер балаларҙы үҙебеҙ үҫкәндәге кеүек "ярай", "ярамай" ғына тип тәрбиәләп булмай.**

- Иң һөйөндөргәне - балаларым үҙаллы булып үҫә. Ғөмүмән, балаларға тәрбиә биреүҙең бер ниндәй ауырлығы юҡ: үҙеңә тәрбиәле булыу ҙа етә... Уларға, был ярамай, теге ярамай, тип "сыбыҡлап" тороу кәрәкмәй: йығыла-йығыла атларға өйрәнә кеше. Былай ҙа тормош ҡулында шыйыҡ "сыбыҡ" бар.

Ғөмүмән, йәшәйештең ҡанундары ябай бит ул: кеше өлөшөнә үрелмә, зыян итмә, алдашма. Бөтә изге китаптарҙың нигеҙендә шулар ята. Әллә ниндәй асыштар яһарға түгел, ошоларҙы йөрәккә һеңдереү мөһим. Йомғаҡлап әйткәндә, ата-бабаларҙың әхлаҡ, әҙәп ҡағиҙәләрен онотмаҫҡа кәрәк.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЯЛ ИТ ҺӘМ... ЯБЫҠ

■ Леонардо да Винчиҙың "Мона Лиза" исемле билдәле картинаһы тәрлө өлкә белгестәрен ҡыҙыҡһындыра. Күптән түгел табиптар ҙа уға иғтибар иткән һәм моделдең тышҡы ҡиәфәтенә ҡарап, уның гипотиреоз (ҡалҡан биҙе эшмәкәрлегенең түбән булыуы) менән ауырыуын фаразлаған. Ҡатындың ҡулдары шешенгән, сәсенең дә һирәгәйә барыуы күҙәтелә. Белгестәр шулай уҡ тиреһенең һарғылт төҫөн һәм ҡалҡан биҙенең ҙурайып тороуын билдәләй. Рәссам Лиза Герардини исемле итальян дворянкаһын төшөргән тигән фараз бар һәм был мәлгә уның йөш балаһы була. Табиптар әйтеүенсә, был ауырыу ҡатынҡыҙҙарҙа тап бала тапҡас башланыу ихтималы ҙур. Етмәһә, итальяндарҙың рационында йод етерлек кимәлдә булмаған, был да боғаҡ биҙе сирен аңлата ала.

■ Kaiser сәләмәтлекте тикшереү үҙәге хеҙмәткәрҙәре билдәләүенсә, өлкән йәштәге ҡатындар өсөн тән ауырлығын яйлап ҡына юғалтыу ҙа хәүефле. 20 йыл эсендә уртаса 9 килограмм ауырлыҡ ташлағандарҙа һөйәктәр һыныуы, дөйөм физик тороштоң насарайыуы күҙәтелә. Һынауҙарҙа 1323 гүзәл зат ҡатнашҡан. Тикшеренеүҙәр башланған мәлдә уларҙың уртаса йәше - 68 булған. Эксперттар уларҙың сәләмәтлеген, физик әүҙемлеген, тән массаһы индексын, алкоголь һәм тәмәке ҡулланыуын күҙәткән. 20 йыл эсендә ғалимдар мәғлүмәттәрҙә 8 тапҡыр яңыртҡан, шулай уҡ һөйәк һыныуҙарын, физик әүҙемлектең түбәнәйеүен теркәгән. Асыҡланыуынса, өлкәнәйгәс ауырлыҡ юғалтыусыларҙа 80 йәште үткәс сәләмәтлектәренә бәйле проблемалар тыуыуы бар. Ғалимдар шуға ла диеталарҙан баш тартып, туҡланыуға етди иғтибар бирергә, физик йәһәттән әүҙем булырға кәңәш итә.

■ Ауырлы саҡта балыҡ майын ҡабул итеүсе әсәләрҙең балалары тәүге 6 йылда тән ауырлығын яҡшы йыя. Копенгаген университеты тикшеренеүҙәре ауырлы булыуҙың аҙаҡҡы осоронда балыҡ майының файҙаһын дәлилләй. Һынауҙарҙа 24-се аҙнанан һуң һәр көн балыҡ майы йәки зәйтүн майы ҡабул итеүселәр ҡатнашҡан. Баланың буйы, ауырлығы, бил һәм баш үлсәме 6 йәшкә тиклем 11 тапҡыр үлсәнгән. Кем ауырлы саҡта балыҡ майы ҡабул иткән, уларҙың балаларында сәләмәт тән ауырлығы күҙәтелгән, уларҙа һимереү осраҡтары бөтөнләй булмаған. Дөйөм алғанда, был балаларҙа мускул, һөйәк һәм май массалары ла ҙурыраҡ. Йәғни, балыҡ майы үсеүҙә стимуллаштыреусе булып тора.

■ Дублин колледжы ғалимдары билдәләүенсә, көн һайын 120 г майлы сыр ашау холестерин профилен яҡшыртырға мөмкинлек бирә. Майлы сырҙың составындағы майҙар артерияларҙа тығындар барлыҡҡа килтерә тигән ҡараштa ине быға тиклем белгестәр. Хәҙер асыҡланыуынса, майлы сыр "насар холестерин" кимәлен түбәнәйтә. Был уның үҙенсәлекле төҙөлөшө һәм составында кальций һәм казеин булыуы арҡаһында башҡарыла. Майлы һөт ризыҡтары ҡулланыу инсульт хәүефен 42 процентҡа кәметә.

■ Тропик урмандарҙа үҫкән каму-каму тигән ағастың емештәре сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыусылар араһында бик популяр. Был емеш матдәләр алышыныуын әүҙемләштерә, һәҙәмтәлә һимеҙлектән ҡотолоу мөмкинлеге бар. Уның тағы ла бер уңайлы яғы: каму-каму тән ял иткәндә әүҙемерәк эшләй. Ул С витаминына, антиоксиданттарға бай. Эсәк микрофлораһын яҡшыртыуҙа ла уның өлөшө ҙур.

СӘЙӘХӘТНАМӘ

# ЯНКА КУПАЛАНЫ ЛА...

## башҡорт телендә яңғыраттым



**Беларусь Республикаһынан "Нәфис әҙәбиәт - бер-беребеҙгә юл" тип аталған халыҡ-ара түңәрәк ҡорҙа ҡатнашырға саҡырыу ҡағыҙы алғас, һис икеләнмәй юлға сығырға булдым. Әле былтыр ғына 18 декабрҙә Өфө һәм Минск ҡалалары араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлгәйне. Ике республиканың тәрлө өлкәләрҙәге хеҙмәттәшлеген нығытҡан килешеү 1999 йылда уҡ барлыҡҡа килгәйне. Ә инде яҙыусыларҙың үҙ-ара хеҙмәттәшлеге тағы ла алыҫыраҡ ваҡытты күҙаллай. 1936 йылдан башлап тәрлө йылдарҙа башҡорт матбуғатында Янка Купала, Якуб Колас, Андрей Александрович, Максим Танк, Петрусь Бровка әҫәрҙәре донъя күргән. Белорус классиктарын иһә Сәйфи Ҡудаш, Марат Кәримов, Хәниф Кәрим, Хөрмәт Биҡҡолов, Ғилемдар Рамазанов, Сафуан Әлибаев, Әсхәл Әхмәт-Хужа, Шәриф Биҡҡол кеүек ҡәләм оҫталары башҡортсаға тәржемә иткән. Мин дә буш ҡул менән юлланмайым был сәфәргә. Яңы ғына Алесь Карлюкевичтың "Шубуршун һәм уның дуҫтары" тигән повесть-әкиәтен башҡортсаға ауҙарып бөттөм. Уның ҡайһы бер һандары быйыл "Аманат" журналында донъя күргәйне. Етмәһә, поэма тиклем поэманы һәм бер шәлкем шиғырҙарымды белорус теленә тәржемә иткән Мария Кобец, балалар өсөн шиғырҙарымды белорус теленә ауҙарған Валерия Радунь исемле шағирәләрҙе лә бик күргем килгәйне. Уларға күстәнәскә, мотлаҡ, яңы айыртылған башҡорт балын һалып алаcаҡмын. Шулай итеп, етәкселектең ризалығын алғас, күтәренке кәйеф менән юлға әҙерләнә башланым.**

### Хикмәт тулы юлдар...

Сәфәргә әҙерләнеү бик ҡыҙыҡ бит ул. Шул илгә бәйле иҫтәлектәрҙе барлай башлайһың. "Белорус" һүҙен бәләкәйҙән ишетеп үҫтек инде ул. Атайымдың бер туған ҡустыһы, күршелә генә йәшәгән Иҫәнбай ағайым мәрхүм йөрөтөр ине беларус тракторын. Колхозда механизатор булып эшләгән изге күңелле ағайымдың исеме менән гел ҡуша әйтелер ине был һүҙ: "Иҫәнбай бер беларус һалам килтереп китте. Иҫәнбайҙың белорусы менән утынға барып килдек. Әлдә Иҫәнбай осраны, район үҙәгенән рәхәтләнеп беларусҡа ултырып ҡайттыҡ!"

Бәй, Минск һүҙе лә бәләкәйҙән таныш икән дә баһа! Уныһы инде бер туған Зәфәр, Илдар ағайҙарымдың йәшлек осоронa бәйле. Төнгә ауыл урамдарын аҙ үтмәне инде ул "Минск", "Иж-Юпитер" мотоциклдары, күрше ауылдарҙы ла таң атҡансы ҡырҡ урарҙар ине!

Һәм тағы... Белоруссия фронтында һуғыш юлдарын үткән гәзиз атайымдың яҡты иҫтәлеге менән дә бәйле миңә был ерҙәр!

Күпләп рус телендә сыҡҡан башҡорт яҙыусыларының китаптарын алып килергә ҡушты дуҫтарым. "Китап" фирма магазинына инеп, күҙемә эләккән бар китаптарҙы ла тоҡсайыма тултырам: Шәйехзада Бабич, Мостай Кәрим, Ғәзим Шафиҡов, Талха Ғиниәтуллин, Тамара Ғәниева, Сабир Шәрипов, Шәүрә Шәкүрова, Әмир Сәйфуллин, Факил Мырҙаҡаев, Айгиз Баймөхәмәтов, Лариса Абдуллина... Их, рус телендә сыҡҡан шиғыр китаптары әҙерәк икән шул... Барыһын да күрһәтке килә бит!

Билеттар алынған. Тәүҙә Мәскәүгә, Мәскәүҙән артабан Минскиға осасаҡмын. Кискеһен әйберҙәремде шыплап тултырғас, самолетта багажға тапшырыла торған юл сумкаһын үлсәп ҡарайым. Их, тейешле килограмдарҙан саҡ ҡына ауырыраҡ килеп сыға. Бер-ике китапты ҡул багажына алһам әгәр? Ҡыҫҡа ғына хикәйәләрҙе уҡып барыуы йәтеш булыр, тип, Сабир ағай Шәриповтың рус телендә сыҡҡан "В горах мои зори" китабын айырып, бәләкәй сумкаға һалып алам. Уҡый алһам әле! Тултырыһып йәрөп, серем итергә өс кенә сәғәт ваҡыт ҡалған. Таң менән юлға. Әллә йоҡланым, әллә юҡ. Тороп сәй ҡуйҙым. Бәй, сәғәткә ҡараһам, ваҡытты дөрөҫ һанамағанмын бит. Минә күптән аэропортҡа барып етергә кәрәк! Әлдә иптәшем үҫән түгел, етеҙ генә тейешле урынға алып барып та ҡуйҙы. Йүгереп барып, иң һуңғыларҙан булып регистрация үтеп, бер ҡайҙа ла туҡталмай тиерлек, самолетҡа инеп ултырам. Күҙ шарҙай булған! Йоҡо ҡайғыһымы инде хәҙер!

Әлеге лә баяғы Сабир ағайҙың китабын ҡыуанып ҡулыма алам. Уҡыйуҡый, йоҡлап та китермен, бәлки. Үҙем яратып уҡыған юл хикмәттәрен асам. Йоҡланың, ти, йоҡламай... Берсә көләм, берсә күҙгә йәш алам. Тышлыҡтағы матур фотоһына ҡарап: "Бына бит, әлхәмдүлилләһ, ҡарағайҙай ағайҙарыбыҙ бар бит әле!" - тип ысын күңелдән һоҡланып ҡуям. Күңелемдән генә Сабир ағай менән һөйләшеп тә алам. Бына сәфәрҙән ҡайтҡас, шылтыратырмын да: "Сабир ағай, һеҙҙең китапты Минскиға алып барҙым," - тип ҡыуандырырмын, тип хыял ҡорам. Әле бер, әле икенсе хикмәтте уҡып, Домодедово аэропортына нисек килеп еткәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалғанмын. Минскиға оса торған самолетҡа регистрация үткәс, йәтешләп кенә ултырып, ватсапҡа килгән сәләм-хаттарҙы барлайым. Ҡәләмдәшем Тәнзилә Дәүләтбирҙина ебәргән хәбәрҙе асам һәм телһеҙ ҡалам: "Сабир Шәрипов мәрхүм булып ҡалған. Йәне йәннәттә булһын... "

Самолетта Минск менән Мәскәү араһы ни бары 1 сәғәт тә 20 минутлыҡ ҡына юл. Ары-бире тамаҡ ялғап, уңға-һулға ҡарағансы, барып та төшәһең. Мин һаман да китаптан айырыла алмайым. Хәҙер инде бөтөнләй икенсе тойғолар солғанышында уҡыйым. Һәр һүҙҙе күңелемә һеңдерәм, Сабир ағайҙың тау кешеләренә генә хас ғорур ҙа, ышанысль ла, күҙәтеүсән дә, намыҫсан да образы күҙ алдымдан китмәй. "Һаумы, килен!" - тип шаяртып өндәшкән булыр ине, "Биләрит егетенә" кейәүгә сыҡҡанымды иҫәпкә алып йор һүҙле "ҡайнағам".

"Мин һеҙҙең менән хушлашмайым. Әле йылы ҡулдарығыҙҙы ҡыҫып иҫәнләшер көндәр алда әле! (... И я, уважаемый читатель, не подаю тебе руки. Встретимся ещё, тогда и пожмём друг другу тёплые руки... ") - ошо һүҙҙәрен уҡып, Сабир ағайҙың китабын ҡыҫып ҡосаҡлаған килеш, үкһеп илай-илай барып төштөм мин белорустар иленең баш ҡалаһына...

### "Беҙҙең министр көтөргә яратмай..."

"Ҡунаҡханаға урынлашыу менән, машина килеп алыр, сәғәт икегә министр һеҙҙең менән осрашыу билдәләнe", тип оҙатты аэропорттан Беларусь Республикаһының Мәғлүмәт министрлығы белгесе Виктория Лукошюте. Мин бит 31 август көндә, программаға ярашлы, музейҙа үткәрелгән кискe сараға ғына иҫәп тота инем. Төп саралар 1-2 сентябргә билдәләнгән. Енел машинаға күсеп ултырыу менән ауыр уйҙарымдан арынып, үҙемдә эш тулҡындарына көйләп маташам.

Алесь Николаевич Карлюкевич - Беларусь Республикаһының мәғлүмәт министры. Әйе, тап уның повестьәкиәтен мин башҡорт теленә ауҙарғайным. Былтыр әле был юғары вазифаға билдәләнгәнгә тиклем Татарстандың халыҡ шағиры, яҡташыбыҙ Роберт Миннуллин таныштырғайны уның менән. Иҫ киткес әүҙем, идеяларға бай, заманында хәрби кеше булараҡ, теүәллекте яратҡан дәүләт эшмәкәре ул. Үҙе лә тик ултырмай, кешене лә эшләтә белә.

Беларусь Яҙыусылар союзының "Неман" әҙәби-нәфис һәм ижтимағи-публицистик журналының баш мөхәррире Алексей Черота оҙатыуында министрҙың бүлмәһенә инәбеҙ. Башҡортостандан алып килгән бар китаптар Алесь Николаевичтың өҫтәленә ҡунаҡлай. "Ҡайҙа барһаҡ та, министр китап алып ҡайтыуыбыҙҙы үтенә", - тип һөйләп өлгөргәйнеләр инде миңә. Һәр берeһенә аңлатма бирәм. Быныһы - башҡорт халыҡ әкиәттәре, быныһы - Айгиз Баймөхәмәтовтың автографы. Уның повесын мотлаҡ рәүештә үҙем тәржемә итәм, тигәйне бит министр. Үҙемә лә автографлы бүләк тәтей. Бүләктең дә ниндәйе! Белорус телендәге "Шубуршун һәм уның дуҫтары". Министрҙың эш графигы бик тығыҙ. Оҙаҡҡа һуҙылмай ғына хушлашабыҙ. "Һеҙҙе хәҙер интервьюға алып китерҙәр, ә унан һуң музейҙа сығыш яһарһығыҙ. Ә мин оҙаҡламай Брест өлкәһенә ҡуҙғалам. Һеҙ унда иртәгә килеп етерһегеҙ!"

Беларустағы ҡәләмдәштәребеҙҙән, министрлыҡтың яҙыусы булыуы менән нығ бәхетләбеҙ, тигәндәрен күп ишетергә тура килде һуңынан. Белорус әҙәбиәтен үҫтереү менән генә сикләнмәй, уны донъя кимәлендә танытыу маҡсатында ла күп матур эштәр

✓ *Бар саралар баштан аҙағына тиклем тик белорус телендә алып барылды. Урыҫ телендә бирелгән һорауҙарға Мәғлүмәт министры шартлатып белорус телендә яуап ҡайтара.*



башҡарыла бында. Министр үҙе алып барған "Созвучие" блогында, мәҫәлән, төрлө илдәрҙең яҙыусылары баҫыла. "Неман", "Полымя", "Маладосць", "Литература и мастацтва" кеүек баҫмаларҙа ла әленән-әле башҡа илдәр яҙыусыларының әҫәрҙәрен баҫтырып, сит республикаларҙа баҫылыр өсөн үҙ ижадсыларына юл аса белорустар. Шулай уҡ ҡулалмаш китаптар ҙа нәшер ителә. Киләсәктә ҡулалмаш башҡорт шағирҙарының шәлкемдәрен баҫтырыу тураһында килешеп ҡайттым мин дә.

Ә әлегә Алексей Иванович мине "Звязда" нәшриәт йортона интервьюға алып китте. Тәү ҡарашҡа Минскиҙың үҙәк урамдары Советтар Союзы осорон хәтерләтә. Йорттары ла, ҡунаҡханалары ла, ихлас ҡарашлы кешеләре лә. Нисектер һил, тыныс кеүек бында. "Кара төҫкә өҫтөнлөк бирәһегеҙ икән", - тим, яңы архитектура ҡоролмаларының биҙәлешенә иғтибар итеп. "Ысын, шулаймы? - ти Алексей Иванович.- Бер иғтибар иткәнем юҡ ине. Үткән һуғыш эҙемтәһеме икән әллә? Ҡайғы төҫө беҙҙең күңел төпкөлөнән юйылмаған шул. Анау опера һәм балет театрын күрәһегеҙме? Һуғыш ваҡытында бомбаға тотоуҙарҙан һуң өлөшләтә иҫән ҡалған берҙән-бер мәҙәниәт бинаһы ул. Һуңынан, элекке фотоларына ҡарап, яңынан тергеҙгәндәр. Беҙҙә Бөйөк Ватан һуғышы музейы ла бар".

Беларусь Республикаһының Милли тарихы музейына барыр алдынан Алексейға ҡунаҡханаға һуғылып китеүен үтенәм, сөнки музейҙа башҡорт телендә Башҡортостан тураһында шиғыр уҡыясаҡмын, шуға ла тыуған илемде, халҡымдың асылын тулыраҡ күҙ алдына баҫтырһындар өсөн милли кейемемдә кейеп ала һалам. Бай экспозицияны музейҙағы тамашасылар араһында бер генә башҡорт та булмаһа ла, бар йөрәгемде һалып, башҡортса өндәшәм:

*Башҡортостан!*
*Һине данлап түймаҫ*
*Уралымда үҫкән ҡыу ҡурай.*
*Исемең бит һәр бер башҡорт өсөн*
*Изге доға булып яңғырай!*

*Башҡортостан!*
*Йәнгә шундай гәзиз,*
*Туған телдең һәр бер хәрефе!*
*Нисек ғорур яңғырай:*
*"Баш-корт-ос-тан!",*
*Ниндәй ҡеүәт бирә һүҙ: "Өфө!"*

"Ҡунағыбыҙ Зөлфиә Ханнанованың башҡорт телендә яңғыраған шиғырын тамашасылар оло ихтирам менән тыңланы. Башҡорт телен беребеҙ ҙә аңламаһаҡ та, "Башҡортостан, Башҡортостан" тигән төп мотив һәм шиғриәттең гүзәл моңо йөрәгебеҙгә ҡеүәтле ҡайнар тулҡын булып ағылды..." тип яҙып сығасаҡ һуңынан белорус баҫмалары. Бына бит ул туған телдең ҡөҙрәте! Шул уҡ һүҙҙәрҙе тамашасыларҙың күңеленә үтеп инерлек итеп рус телендә яңғырата алыр инемме икән? Юҡтыр, моғайын...

Икенсе көндө Брест өлкәһенә юл тоттоҡ. Дүрт сәғәтлек юл! Урамда утыҙ градус самаһы эҫелек. Алмағастар ышығында йәшенеп кенә ултырған, буяу төҫө күрмәгән ауыл өйҙәренә күҙ һалам. Ҡыйыҡтарҙың күбеһе тюль менән ябылған һәм уны мүк ҡаплаған. Шифер менән ябылғандары ла осрай, тик ул да ҡарайып бөткән. Черепица менән ҡапланған бер нисә генә йорт күренде.

Бер ҡайҙа ла туҡтап тормайбыҙ. Ашыҡтыралар, сөнки, үҙҙәре әйтеүенсә, "Беҙҙең министр көтөргә яратмай..." Көлгө килә. Беҙҙә булһа, киреһенсә, министр килә, тип, барыбыҙҙы лы бер-ике сәғәт алдан теҙеп баҫтырып ҡуймаҫтар инеме икән?..

## Мөңрәй-мөңрәй...

Брест өлкәһенең Воронцевичи ауылында, ысынлап та, мәғлүмәт министры Алесь Николаевич Карлюкевич үҙе ҡаршы алды. XXV белорус яҙмаһы көнө сиктәрендә уҙғарылған "Нәфис әҙәбиәт - бер-беребеҙгә юл" халыҡ-ара түңәрәк ҡоронҡ модераторы ла ул үҙе булды. 13 илдән йыйылған яҙыусылар һәм әҙәбиәт белгестәре ҡатнашты был мәртәбәле форумда. Улар араһында "Роман-газета" журналының баш редакторы Юрий Козлов, Пасос Давина (Эквадор), Лауцюс Яронимас (Литва), Берелис Гунтис (Латвия), Сирожиддин Саййид (Үзбәкстан), Балдадаш Ганбаров (Әзебайджан), Светлана Ананьева (Ҡаҙағстан), Талантбек Джумабаев, Жылдыз Акаева (Ҡырғыҙстан), Глеб Кудряшов (Украина), Римма Абызова (Татарстан) бар ине.

Түңәрәк ҡорҙа, башлыса, һәр республиканың тәржемә өлкәһендәге ҡаҙаныштары, үҙ-ара әҙәби бәйләнештәрҙе нығытыу һәм үҫтереү тураһында һүҙ алып барылды. Мин дә Башҡортостан яҙыусыларының ошо юҫыҡтағы эшмәкәрлеге менән таныштырғандан һуң, бөгөнгө белем биреү стандарттарына ярашлы, туған телдәрҙе уҡытыу дәрестәре көмөү сәбәпле, милли әҙәбиәттәрҙең киләсәге өсөн борсолоуымды белдерҙем. Шуныһы ҡыуаныслы, башҡа милләт вәкилдәре лә күтәреп алды был фекеремде. Түңәрәк ҡор онлайн рәүешендә барғас: "Юҡҡа сыҡҡан телдәр элек тә булған, уның өсөн нинә борсолаһығыҙ? Бөтһә, бөтә инде... Бәлки, икенсе төрләрәк проблемаларҙы яҡтыртыу кәрәктер бөгөн?" - тигән кеүегерәк реплика ташлаусылар ҙа булды. "Телдәрҙең кәрәге ҡалмағас, ни тип һөйләшәбеҙ һуң беҙ, берберебеҙгә ҡарап, мөңрәшеп кенә ултырайыҡ, улайһа!" тип бик тапҡыр ғына итеп урындарына ултыртты ундайҙарҙы белорус яҙыусыһы Валерий Казаков.

## Туған телемә хөрмәт

XXV белорус яҙмаһы көнө быйыл Брест өлкәһенең Иваново ҡалаһында үткәрелде. 1994 йылдан бирле йыл да шулай Беларустағы алты өлкәнең береһендә сиратлап уҙғарылған был сара ысын мәғәнәһендә ҙур байрамға әүерелә. Ҡала байрамса биҙәлгән, парктағы ҙур сәхнәләге тамашаны ҡарарға йыйылған халыҡтың осо-ҡырыйы күренмәй. Байрам сиктәрендә 20 майҙансыҡта 80-гә яҡын сара уҙғарылған. Шуларҙың береһе шиғыр һөйләүсе балалар араһында уҙғарылған "Тере классика" шиғыр бәйгеһе. Һүҙ юҡ, ундай саралар беҙҙә лә гөрләп уҙа. "Һаумы, һаумы, әкиәт!", "Урал-батыр" эпоҫын яттан һөйләүселәр, йәш сәсәндәр бәйгеһе һ.б. Белорус балаларын да бик яратып тыңланым. Бигерәк тә һуғыш темаһына яҙылған шиғырҙарҙы үҙәккә үтерлек итеп һөйләне улар. Башҡортостан Яҙыусылар союзы исеменән махсус приз да алып барғайным был сараға. Мостай Кәримдең башҡорт һәм урыҫ телдәрендә нәшер ителгән "Беҙҙең өйҙөң йәме" китабын Витебск ҡалаһынан килгән иң йәш ҡатнашыусы Кира Войцеховскаяға бүләк иттем һәм белорус уҡыусыларына баш ҡалабыҙ Өфөлә һәм гүзәл Башҡортостаныбыҙҙа йәшәгән тиҫтерҙәренән ҡайнар сәләмдәр еткерҙем.

Тағы ла шуныһы фәһемле, бар саралар баштан аҙағына тиклем тик белорус телендә алып барылды. Электән иғтибар итә йөрөй инем: телевидениеға интервью ваҡытында ла урыҫ телендә бирелгән һорауҙарға Мәғлүмәт министры шартлатып белорус телендә яуап ҡайтара.

Матбуғат һәм китап йәрминкәһендә эшләп торған майҙансыҡтарҙың береһендә Янка Купала китабының исем туйы уҙғарылды. Белорус классигының "Кем килә унда?" шиғыры 100 телгә, шул иҫәптән, билдәле шағир Ғилемдар Рамазанов тарафынан башҡорт теленә лә тәржемә ителгән. Ошо шиғырҙы башҡорт телендә яңғыратыуымды үтенделәр. Ҡаршы килмәнем. Ҡайҙалыр, алыҫ Беларуста, туған телемә ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп, башҡорт телендә уҡығыҙ әле, тип торғанда, ниңә уҡымаҫка, ти инде?..

**Зөлфиә ХАННАНОВА.**

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ТИБЕТСА ЙӘШӘРЕҮ РЕЦЕБЫ

**1971 йылда ЮНЕСКО хеҙмәткәрҙәре Тибетты өйрәнеп, боронғо монастырь ҡалдыҡтары араһында балсыҡ табличкалар таба. Уларҙа организмды йәшәртеү рецебы яҙылған була.**

Бының өсөн 350 гр һарымһаҡты таҙартып, йыуып, ваҡ ҡына итеп турарға һәм фарфор ҡалаҡ менән иҙергә, ошо массаның төбөнән (һуты күберәк булһын) 200 гр иҙелмә алып быяла йәки балсыҡ һауытҡа һалырға, 200 гр спирт ҡойорға һәм нығытып ябырға кәрәк.

Ҡатнашманы ҡараңғы, һалҡын урында 10 тәүлек тотҡандан һуң, һарҡытырға һәм тағы ла 2-3 көнгә ултыртып ҡуйырға. Төнәтмәне һалҡын һөт менән (бер эскәндә 50 гр) ашар алдынан 20 минут элек көнөнә өс тапҡыр схема буйынса эсергә:

**1-се көн:** иртәнгә аш - 1 тамсы; төшкө аш - 2 тамсы; киске аш - 3 тамсы
**2-се көн:** иртән - 4; төш - 5; кис - 6
**3-сө көн:** иртән - 7; төш - 8; кис - 9
**4-се көн:** иртән - 10; төш - 11; кис - 12
**5-се көн:** иртән - 13; төш - 14; кис - 15
**6-сы көн:** иртән - 15; төш - 14; кис - 13
**7-се көн:** иртән - 12; төш - 11; кис - 10
**8-се көн:** иртән - 9; төш - 8; кис - 7
**9-сы көн:** иртән - 6; төш - 5; кис - 4
**10-сы көн:** иртән - 3; төш - 2; кис - 1

11-се көндән көнөнә өс тапҡыр ашар алдынан 25 тамсыны һөт менән эсергә. Төнәтмә бөткәнсе шулай дауам итергә. Икенсе курсты алты йылдан һуң ғына ҡабатларға була. Һарымһаҡ төнәтмәһе организмды майҙарҙан, эзбиз ултырмаһынан таҙарта, матдәләр алмашыныуын, тамырҙарҙың һығылмалылығын яҡшырта, инфарктты, стенокардияны, фалижды һәм шештәр барлыҡҡа килеүен иҫкәртә, күҙҙең күреүен яҡшырта. Әгәр төнәтмәне эскәндә уңайһыҙлыҡ тойһағыҙ йәки ниндәйҙер хроник сирегеҙ ҡиҫкенләшһә, дауаланыуҙы туҡтатып, табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Хәтерҙе һаҡлайыҡ: иҫтәлектәр өсөн "суперелем" табайыҡ

XXI быуат башында хәтерһеҙлек ғәҙәтигә әйләнә. Әгәр быға тиклем коллегабыҙҙың исемен иҫләй алмаһаҡ, бөгөн - электрон почтаның, аськаның, фейсбуктың серһүҙен, кредит карточкаларының PIN-кодын онотабыҙ. Кәрәкле телефон номерын үҙебеҙҙең түгел, ә кеҫә телефонының электрон хәтеренә индереп ҡуябыҙ. Әммә был да ярҙам итмәй: кәрәк ваҡытта ҡайһы берәүҙәр хатта шылтыратырға тейеш абоненттының фамилияһын да иҫләй алмай.

Телевизор, компьютер, телефон, урамдағы реклама - улар барыһы ла беҙҙең аңыбыҙҙы бөткөһөҙ мәғлүмәт ағымы менән томалай. Көн һайын кеше мейеһенә күргән, ишеткән, уҡыған мәғлүмәтте эшкәртеп өлгөрөргә кәрәк. Ҡайһы бер ғалимдар белдереүенсә, кешелек эволюцияны шундай нөктәгә етә - мәғлүмәт ағымы мейенең ҡабул итеү мөмкинлектәрен артып китә. Тиҙҙән ул мәғлүмәтте ҡабул итмәй башлаясаҡ. Ул ваҡытта нимә?

Калифорния университеты тикшеренеүселәре иҫәпләүенсә, 2006 йылда ғына донъяның киң мәғлүмәт саралары, нәшриәттәр һәм реклама индустрияһы 161 эксабайт (1ЭБ-260 байт) мәғлүмәт сығара. Был - кешелек тарихында яҙылған барлыҡ китаптар күләменән 3 миллион тапҡырға күберәк. 2010 йылда был күләм 988 ЭБ тиклем арта, йәғни дүрт йыл эсендә 6 тапҡырға. XV-XVII быуаттарҙа белемле Европа кешеһе үҙ ғүмерендә бөгөн New York Times журналының бер һанына тиң мәғлүмәт ала.

Беҙҙең бахыр мейебеҙ быпдай баҫымға түҙерме? Футорологтар кеше үҫешенең әлегә ике юлын тәҡдим итә. Йә беҙҙең мейебеҙ компьютерҙы ҡыуып тотор өсөн тиҙерәк эшләй башларға тейеш, йә ҡатмарлы эмоциональ бурыстар бөтәрәләп, бер нисә быуын алмашынғандан һуң кешелек хистойғоһоҙ мәғлүмәт ҡулланыусыға әйләнәсәк. Әммә иң ҡурҡынысы - уларҙың хәтере лә булмаясаҡ.

Артабан нимә? Өҫтәлегеҙҙә тиҫтәләрсә телефон ята һәм улар барыһы ла бер үк ваҡытта шылтырай башлай тип күҙ алдына килтерегеҙ. Тәүҙә бер нисәһенә булһа ла яуап бирергә тырышасаҡһығыҙ, һуңынан кемдәндер көтөп тороуын үтенәсәкһегеҙ, һуңынан инде барыһына ла ҡул һелтәйәсәкһегеҙ. Аныбыҙ менән дә шундай уҡ күренеш ҡабатлана. Артыҡ мәғлүмәт баҫымына түҙмәйенсә, ул ингән мәғлүмәтте дөрөҫ ҡабул итмәй башлай, ғәҙәти булған бурыстарға ғына ваҡыт бүлә һәм бер аҙҙан тулы көсөнә эшләүҙе лә онота.

Ғалимдар хәҙерге һанлы технологияларҙың ҡеүәте кеше мейеһенең ҡабул итеү мөмкинлеген үтеп китте, тип иҫәпләй. Бер төймәгә генә баҫып, кеше тәүлек эсендә Ерҙә нимә булғанын белә ала: тиҫтәләрсә һәләкәт, бер нисә һуғыш, яңы эпидемия турағында мәғлүмәт аңыбыҙға 3-5 минут эсендә инеп ултыра. Һөҙөмтәлә барлыҡ донъяуи һәләкәттәр хис-тойғоһоҙ һәм анализһыҙ ҡабул ителә. Мейе барлыҡ ингән мәғлүмәтте һендереү өсөн ваҡыт экономиялай. Ә хис-тойғо менән анализ - хәтерҙең иң төп өлөшө. Уларһыҙ кешенең интеллект һәләте тупаҫлана.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 100 ЙЫЛ ЭЛЕК ТЫУҒАНДАР




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**35-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Яуаптар: Горизонталь буйынса:** Взвод. Асҡаров. Таған. Йоҙаҡ. Урман. Ағайрыҡ. Мамыҡас. Атлет. Артель. Апорт. Йод. Мулла. Илгә. Ритм. Ризыҡ. Обой. Атыш. Әкрен. Таһиров. Йосопов.

**Вертикаль буйынса:** Михалков. Йомағолов. Ҡаптырма. Аҡса. Тартай. Ҡасаҡ. Ваҡыт. Йомош. Трико. Ғәйнетдинов. Бруно. Диван. Уҡа. Мәрйә. Табу. Еңел. Нут. Арҡан.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Сентябрь (Зөлхизә-Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 17 (7) дүшәмбе | 5:23 | 6:53 | 13:30 | 17:56 | 19:26 | 20:56 |
| 18 (8) шишәмбе | 5:25 | 6:55 | 13:30 | 17:54 | 19:24 | 20:54 |
| 19 (9) шаршамбы | 5:27 | 6:57 | 13:30 | 17:51 | 19:21 | 20:51 |
| 20 (10) кесе йома | 5:29 | 6:59 | 13:30 | 17:49 | 19:19 | 20:49 |
| 21 (11) йома | 5:31 | 7:01 | 13:30 | 17:46 | 19:16 | 20:46 |
| 22 (12) шәмбе | 5:33 | 7:03 | 13:30 | 17:44 | 19:14 | 20:44 |
| 23 (13) йәкшәмбе | 5:34 | 7:04 | 13:30 | 17:41 | 19:11 | 20:41 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**15 сентябрь "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+

**19 сентябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 сентябрь "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**15-16 сентябрь "Буратино"** (А. Толстой). Башлана 12.00, 14.00 0+

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**11 сентябрҙә һижри буйынса 1440 яңы йыл тыуҙы. Уның беренсе айы мөхәррәмдең 10-сы көнөндә (быйыл 20 сентябрҙә) оло байрам - Ғәшүрә көнө билдәләнә. Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм һәм сәхәбәләр был көндө мөбәрәк һанап, ураҙа тотҡандар.**

# ЯҢЫ ЙЫЛ, МӨХӘРРӘМ АЙЫ ҺӘМ ҒӘШҮРӘ КӨНӨ

"Дөрөҫлөктә, Аллаһ ҡаршыһында Унының үҙ хөкөмө менән айҙар һаны - 12, - тип аңлата Ҡөрьән, - Күктәрҙе һәм Ерҙе яралтҡан көндән алып шул 12 айҙың дүртәүһе - хәрәм ай. Диндең хаҡ хөкөмө шул. Ул айҙарҙа үҙегеҙгә золом итмәгеҙ, был айҙарға ҡарата гонаһ эшләмәгеҙ" ("Әт-Тәүбә" (Тәүбә) сүрәһе, 36-сы аят). Хәрәм айҙарҙа гонаһ эштәр, яу сабыуҙар, ҡан ҡойоуҙар тыйыла. Улар - Мөхәррәм, Рәжәб, Зөлҡәғиҙә, Зөлхизә айҙары. Ошо хөрмәтле айҙарҙың, хөрмәттәрен боҙоп, хәрәм һәм гонаһ эштәр эшләү менән үҙ нәфсегеҙгә залимлыҡ һәм яуызлыҡ эшләмәгеҙ, тип өйрәтә дин. Хәрәм эштәр эшләү, гонаһҡа батыу бер ваҡытта ла дөрөҫ түгел, әммә Аллаһы Тәғәләнең был айҙар тураһында айырым әйтеп китеүе - ошо айҙарҙа эшләгән гонаһтың хәрәм мәсеттә - гонаһтар бөтөнләй тыйылған Ҡәғбәтуллала эшләнгән гонаһ кеүек үк - ғазапҡа лайыҡ булыуы тураһында киҫәтеүе.

Һижрәттән һуң мосолмандар тарихта айҙарҙы, йылдарҙы, көндәрҙе иҫәпләү рәүешен яңырта: һижри йылы, аҙан ҡабул ителгән йыл, Бәҙер һуғышы, Өхөд, Хәндәк һуғышы йылында тип һөйләүҙәр ғәҙәткә әйләнеп китә. Ай исемдәре менән хәрәм айҙар ғына үҙгәрешһеҙ ҡала.

Кем дә кем Ғәшүрә көнөндә бер изге эш ҡылһа, Аллаһы Тәғәлә унының бөтөн гонаһтарын ярлыҡап, күп сауаптар бирер. Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Рамаҙан ураҙаһынан һуң, ураҙаларҙың артығырағы мөхәррәм айында ураҙа тотоу". Бәйғәмбәребеҙҙең ҡатыны Хәҙисә раҙый-аллаһу ғәнһә әйткән: "Бәйғәмбәребеҙ өс төрлө эшкә даимсылыҡ ҡыла ине. Ул өс эштең беренсеһе - мөхәррәм айының унынсы көнөндә ураҙа тотоу. Икенсеһе - һәр бер айҙың ун өсөнсө, ун дүртенсе, ун бишенсе көнөндә ураҙа тотоу. Өсөнсөһө - иртәнге намаҙҙың ике рәкәғәт сөннәтен уҡыу".

Әгәр бер кеше Ғәшүрә көнөндә күршеһенең йәки бер мосолман ҡәрҙәшенең хәлен белешһә, Аллаһы Тәғәлә фәрештәләргә: "Был бәндәнең һәр бер аҙымы һанынса, донъя мәхлүкәттәре һанынса сауаптар бирермен, яҙығыҙ", - тип әйтер һәм һәр аҙымы һанынса гонаһын ярлыҡар. Бәйғәмбәребеҙ әйткәненән: "Әгәр бер кеше Ғәшүрә көнөндә балаларына үә йәмәғәтенә күңеллелек ҡылһа йәки яҡшы кейемдәр кейендерһә, йәки хәләл тәғәмдәр булдырһа, Аллаһы Тәғәлә ул кешегә үә унының балаларына һис тә мохтажлыҡ күрһәтмәҫ".

Әгәр кеше Ғәшүрә көнөндә бер етемдең күңелен шатландырһа, Аллаһы Тәғәлә ул кешенең йөҙөн тамуҡ утына харам ҡылыр.

Бер кеше был Ғәшүрә көнөндә ғөсөл ҡойонһа, бөтөн гонаһтарынан пакланып, әсәнән яңы тыуған кеүек булыр. Бер кеше был көндө бер изге эш ҡылһа, ул кешегә Аллаһы Тәғәлә бик күп сауаптар бирер.

Әгәр бер кеше был көндә саң тиклем генә хәйер-саҙаҡа бирһә, Аллаһы Тәғәлә ул кешегә оло әжер бирер һәм барса бәләләрҙән имен ҡылыр. Унының өсөн бәлә күктән инер, саҙаҡа күккә ашыр, икеһенең буйы бер булыр. Саҙаҡа күктән инә торған бәләне туҡтатыр, ул бәлә һис зарар итмәҫ, зарар итһә, ул зыян өсөн Аллаһы Тәғәлә күп файҙалар бирер.

Риүәйәттәрҙән. Бәйғәмбәребеҙ әйтте: "Бер кеше мөхәррәм айының унынсы көнөндә ураҙа тотһа, ул кешегә Аллаһы Тәғәлә ун мең фәрештә сауабын бирер. Ун мең хажи үә ғөмрә ҡылыусының сауабын бирер, ун мең шәһиттең сауабы бирелер".

ҠЫСҠА ӘҢГӘМӘ



**"Ҡурайсы алдан килә, уның артынан теҙелешеп, ҡурай моңо аҫтында һыйырҙар көтөүҙән ҡайта..." Учалы районының Ҡобағош ауылында бөгөн дә өлкән быуын кешеләренән ҡурайсы һәм йырсы көтөүсе хаҡындағы ошондай матур легендалар ишетергә мөмкин. Ғәҙәттә, риүәйәттәр һәм легендалар борон-боронғо замандар хаҡында һөйләгәнлектән, уларҙы беҙ бер ни тиклем әкиәт итеп кенә ҡабул итергә күнеккәнбеҙ. Әммә ошо легендала һүрәтләнгән моңло йырсы һәм ҡурайсы егеттең арабыҙҙа йәшәп ятыусы замандашыбыҙ булыуы һис әкиәт түгел. Улай ғына ла түгел, "Әрме", "Буранбай", "Сибай", "Бейеш", "Ҡаһым түрә", "Томан", "Тәфтиләү", "Хисам", "Шәүрә", "Ғилмияза", "Зөлифәкәй", "Шафиҡ" кеүек боронғо халыҡ йырҙарын унын кеүек башҡарған башҡа йырсыны белмәйбеҙ ҙә, ахыры. Ошо көндәрҙә Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Абдулла Афзал улы СОЛТАНОВҡа 90 йәш тула. Бөгөн дә тыуған төйәгендә - Учалыла йәшәүсе легендар шәхесебеҙгә оло ихтирамыбыҙҙы һәм һөйөү тойғоларын белдерәбеҙ һәм Абдулла Афзал улы хаҡында бер нисә һүҙ әйтеүен һорап, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Флүрә Килдейәроваға мөрәжәғәт иттек.**

# ХАЛЫҠ ЙЫРСЫҺЫ

- Республикабыҙҙа Абдулла Солтановтың йырлағанын һәр кем яраталыр ул, тип уйлайым. Уның тураһында оҙон һәм оҙаҡ итеп һөйләргә булыр ине, тик Абдулла ағайҙың һәләте хаҡында тапҡыр ғына итеп шуны әйтергә була: уға тиңдәр һирәк. Абдулла ағайҙы күптән беләм дә, уның менән дуҫлығыбыҙ үткән быуаттың 90-сы йылдарының башында башланды. Был мәлдә ул 60 йәште үткән ир уҙамаы ине. Үҙенең һәләтенең ҡәҙерен белгән кеше ул. Өлкән йәштә булыуына ҡарамаҫтан, репертуарындағы бөтөн йырҙарҙың көйөн һәм һүҙҙәрен яҡшы хәтерләй. Әүның репертуары бай икәнен үҙегеҙ беләһегеҙ. Йөҙҙән ашыу йырҙы хәтерҙә тотоп ҡара әле! Ғәҙәттә, олоға килә йырсылар өҫкө ноталарҙы ала алмай башлай, ә Абдулла Солтановтың өҫкө ноталары һаман матур. Тауышы формала булһын өсөн көн һайын ҡурайҙа уйнай, сөнки ҡурай уйнағанда тын алыу мускулдары эшләй.

Бер ваҡиға хәтерҙә ҡалған. Республика халыҡ ижады үҙәге, матди яҡтан ярҙам итәбеҙ, тигәс, 1996 йылда Абдулла ағайҙың дискыһын сығарыу маҡсаты менән уны Өфөгә саҡырҙым. Тормош иптәшем уны алырға Ҡобағошҡа барһа, ағай иңәлтә икән. Бесәнем алынмаған, тигәс, трактор табып, бесәнен алдырып, утынын ярып, инде лә риза иттем тигәндә, Юлай Ғәйнетдинов ҡурайҙа уйнаһа ғына барам, тине. Юлай Ғәйнетдинов менән һөйләштек. Дискыға 20 йыр һыя ине, ул 25-ләгән йырҙы 3 көндә яҙҙырҙы. Йырсылар бит дубль артынан дубль менән йырлап яҙҙыра йырын. Абдулла ағай бер-бер артлы 5-6 халыҡ йыры йырлай ҙа ҡуя икән. Башҡортостандың рус драма театрында эшләгән шәп тауыш операторы яҙҙырғаны, уның был хәлгә иҫе киткән. Диск Екатеринбургта сыҡты, сөнки беҙҙә әле эшләмәйҙәр ине. Гонорарына япон телевизоры, кҫтәнәстәр алып, Нәзибә иңәй менән ҡайтып киттеләр. Икенсе йылына район менән килешеп, Әнисә Алтынтимер ҡыҙы Яхина менән берләләп, Абдулла ағайҙы Башҡортостан буйлап йөрөттөк. Шунда ошо бирелгән уникаль һәләтенә ниндәй яуаплылыҡ менән ҡарауына тағы бер тапҡыр һоҡландым. Тауышын һаҡлау өсөн ныҡ эҫе сәй эсмәй, балды ла әҙләп кенә кисен генә ашай, спиртлы эсемлектәрҙән бөтөнләй йыраҡ тора. Һәм быларҙың барыһын да үҙенең тәжрибәһенән сығып башҡара, уны быға берәү ҙә өйрәтмәгән. Бына шундай шәхес ул.

Абдулла Солтанов бөтөн йырҙарҙы ла матур йырлай, әммә "Урал", "Сибай", "Буранбай", "Ҡара Сурай" йырҙары бигерәк үҙенсәлекле яңғырай. Бер шулай уның менән сәхнәлә бергә йырланыҡ та, мин залға төшөп ултырып, Абдулла ағайҙың "Сибай"ын илай-илай тыңланым. Артистарға бит залдан йыр тыңлау һирәк эләгә. Ә унан йыр бөтөнләй икенсе яңғырай. Һуңғы мәлдәрҙә был йырҙы һирәк кенә йырлап йөрөнөм, тип, әйтәйек, әйҙәгеҙ, "Шаһибәрәк"те йырлайыҡ, тип, үҙе тәҡдим итә. Беҙ уның менән "Эскадрон"ды, "Буранбай"ҙы, "Томан"ды һ.б. йырланыҡ. Телевидение фондында һаҡландымы икән, "Шәүрә", "Һары ла сәс"те дуэт менән йырлай инек. Әйткәндәй, ул һаман да радио, телевизорҙы тыңлай. "Флүрә, әйт әле шунда, минең яҙмаларымды нишләп бирмәйҙәр икән?" тип тә шылтырата. Ҡурайсыларҙы исемләп белә, бигерәк тә Юлай Ғәйнетдиновты, Азат Айытҡоловты ныҡ ихтирам итә, Роберт Юлдашев, Ишморат Илбәков, Илшат Ишморатовты һөйләй. Йырсыларҙан Азамат Тимеровты йыш ҡына иҫләп ала. Яҡташ ҡына түгел, Абдулла Солтанов менән рухташ, ижадташ булыуым, шундай бөйөк шәхес менән бер заманда йәшәүем менән бәхетлемен.

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАШҠОРТ ҺАРҠЫНДЫҺЫ МЕНӘН...

## тулған Себер

Уҡығандар күктә осор, һыуҙа йөҙөр,
Юҡтыр унда әүлиәлек, кирәмәттәр.
**(Аҡмулла).**

Шағирҙарға даһилыҡты бирә икән,
бирһен,
Даһилыҡҡа яһиллыҡты ҡушып
бирмәһен.
**(Рәшит Шәкүр).**

Башҡорт һарҡындыһы менән
тулған Себер,
Халыҡ, тиеп әсенмәйҙәр береһе бер.
**(Рәйес Түләк).**

Күрер күҙең күрмәҫ була килер ҡаза булғанда.
**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер батша күрше батшалыҡтағы хакимдың аҡылын һәм күҙәтеүсәнлеген, уның халҡының тапҡырлығын һынап ҡарамаҡсы булған һәм уларға өс бер төрлө, бер ауырлыҡтағы алтындан яһалған кеше һындары ебәргән. Хаким алдына шундай бурыс ҡуйылған: ошо һындарҙың ҡайһыһы иң ҡиммәтлеһе. Бурыс йөкмәтелгән хаким үҙенең вәзирҙәре менән бергәләп был һынды игтибарлап ҡарап сыҡҡан, ләкин улар араһында бер ниндәй айырма ла күрмәгән. Батшалыҡтағы ин аҡыллы ҡарттар ҙа был һындар араһында бер ниндәй ҙә айырма юҡ, тип раҫлаған. Хакимға быларҙы ишетеүе бик ҡыйын булған. Ул үҙенең еңелеүен таныр хәлгә килгәндә, төрмәлә ултырған бер егет ул серҙе сисеп ҡарарға теләк белдергән. Егеттә хаким һарайына килтергәндәр һәм уға баяғы алтын һындарҙы ҡарарға биргәндәр. Егет һындарҙы игтибар менән ҡараған һәм уларҙың һәр береһенең ҡолағында бөрәр бәләкәй тишек барлығын асыҡлаған. Шунан егет ул тишектәргә нәҙек кенә көмөш сым тығып, тикшереп ҡараған. Бер тишек ауыҙ менән, икенсеһе - икенсе ҡолаҡ, өсөнсөһө кендек менән тоташҡан булып сыҡҡан. Бер аҙ уйлап торғас, егет хакимға шулай тигән: "Ғәли йәнәптәре, был мәсьәләнең сиселеше асыҡ китап һымаҡ алдыбыҙҙа ята. Уны уҡып ҡарарға ғына кәрәк. Кешеләр бер-береһенән айырылған кеүек, һындар ҙа бер-береһенән айырыла. Беренсе һын ишеткәнен бар донъяға яңғыратып һөйләргә ашыҡҡан кешегә оҡшаш. Икенсе һын "бер ҡолағынан инә, икенсеһенән сыға" тип йөрөтөлгән кешеләргә оҡшаған. Өсөнсө һында һәр ишеткәнде йөрәгенә яҡын алған кешеләр менән оҡшашлыҡ бар. Хәҙер, ғәли йәнәптәре, үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ - ҡайһы һын ҡиммәтерәк һәм кемде һеҙ үҙегеҙҙең яҡын кешегеҙ итеп һайлар инегеҙ: бер һүҙҙе лә тотмаусынымы, һеҙ әйткәндәрҙе ел кеүек осороп торғандымы, әллә үҙегеҙ тулыһынса ышана алған кешенеме?.."**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!



Бөгөн тормош иптәшебеҙ, атайыбыҙ
**Шабанов Людвиг Йәғәфәр улының**
80 йәшлек юбилейы. Уны матур юбилейы менән ҡотлап, уға ҡаҡшамаҫ һаулыҡ, аҡ бәхеттәр, бәхетле оҙон ғүмер теләйбеҙ.

Ҡәҙерлебеҙ, һәр саҡ шулай беҙгә терәк, кәрәк булып, беҙҙе шатландырып, ҡәҙерхөрмәттә йәшә. Хоҙай һине тән сихәтенән, күңел тыныслығынан айырмаһын!

*Рәхмәт, атай, һиңә мең-мең рәхмәт,*
*Бар нәмәгә булдың түҙемле.*
*Сәләмәт бул, ҡайғылар һис күрмә,*
*Хоҙай ололаһын үҙеңде.*

**Иң изге теләктәр менән ҡатының Флүзә, улың Вадим, киленең Гөлсинә.**

АҒИНӘЙ ҺҮҘӘРЕ

# КЕШЕГӘ ҠАЛҒАН КӨНӨҢ...

♦ Бахыр баҡыр тимә: баҡырға баҡҡандың сире китер, хәсрәте кәмер, дәрте артыр.

♦ Арғымаҡҡа менгәшмә, үҙең өйрәт сабырға; тормошта ла шулай - үҙ юлыңды үҙең тап, кеше юлы мандылтмаҫ.

♦ Кешегә ҡалған көнөң - атмаған таңың, үткәрә алмаған төнөң.

♦ Хәмер түгел кҫтәнәс, ул йоҙроҡло дөмбәс (ығы-зығы).

♦ Ҡылтым кеше - ҡалтайған таҡта.

♦ Ете ҡат йоҙаҡ менән бикләнгән хазина тиҙ юғалыусан.

♦ Ике аҡыллы кәңәшләшә, ике йүнһеҙ кәҙәкләшә.

♦ Мөрхәтһеҙ күпкә лә ҡәнәғәтһеҙ, итәғәтле аҙға ла шатланыр.

♦ Етем тамыры ете ҡат - етемгә баш һалмағыҙ, үҙ тоҡомоң тамырына етемлек орлоғо һалмағыҙ. (Өләсәйем һүҙе).

♦ Теше сыҡмаған сабый ҡулындағы мәмәйгә ҡарай, тешен ҡаҡҡаны кемлегенә һынай.

♦ Етем ҡорһағы ете ҡат, туйһаң да ете өҙеп, ете ҡап, тәненә булыр йылы ҡат.

♦ Яңғыҙ кеше - яңғыҙ ҡайын: әсе елдәр бөтә яҡлап килеп бәрелә, йөрәген, тәнен әрнетә.

♦ Аслыҡта ейгән ҡойҡанды туҡҡа сыҡҡас онотма.

♦ Дауыл бәрелеүҙән тау һелкенмәй, ел һуғылыуҙан ғына имән эйелмәй.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририят:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зөйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 14 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 1625/09